ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 сентябрь (нарысай) 2017

№35 (765)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеле яңы хаҡтар менән башлана. Шулай итеп, 50665 индексլы "Киске Өфө"гә - 554 һум 82 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар) - 584 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары 499 һум 08 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шау-шыу аптырата...**



3

**Бөлөрһөң дә...**




7

**Арҡайым серҙәре...**



12

**Ҡорбан ғәйете мөбәрәк булһын!**



13

**ТВ-программа** 14


## МИНИСТР ӘЙТТЕ!

### Дәүләт милли телдәрен мотлаҡ уҡытыу уҡыусыларҙың хоҡуғын боҙмай!



Был хаҡта Рәсәй Федерацияһының мәғариф һәм фән министры **Ольга Васильева** 30 августа Бөтә Рәсәй ата-әсәләр йыйылышында белдерҙе, тип хәбәр итә REGNUM мәғлүмәт агентлығы.

Ул РФ Конституция судының вердиктын да хәтергә төшөрә. Белеүегеҙсә, Конституция суды быға тиклем Татарстан мәктәптәрендә татар теленең дәүләт теле буларак уҡытылыуы, әгәр ул имтихандар тапшырыуға һәм юғары уҡыу йорттарына инеүгә ҡамасауламай икән, һәр кемдең тәрбиә һәм белем биреү телен һайлауға хоҡуҡ ireклеген боҙмауы тураһында һығымта яһағайны.

**"Беҙ - күп милләтле, күп конфессиялы ил. Изгелекле мөнәсәбәт - ул эргәңдә йәшәүселәрҙең мәҙәниәтен белеү, көнкүреш кимәлендә телен дә белеү ул... Минеңсә, Башҡортостан йәки Татарстан территорияһында тыуып, шунда йәшәп, телде белмәһәң, был бигүк дөрөҫ булмаясаҡ", - ти министр.**

Быға тиклем Ольга Васильеваға Татарстан мәктәптәрендә туған тел булмаған телдәрҙе уҡытыуға бәйле хәл-торош буйынса ялыуҙар килгеләгән. Йәғни, министр белдереүенсә, Татарстандың рус телле ата-әсәләре комитеты республикала туған телдәге "Туған тел" һәм "Әҙәби уҡыу" компоненты иҫәбенә татар телен һәм татар әҙәбиәтен мәжбүри уҡытыу факты тураһында хәбәр иткән булған. Шуға ла Рәсәй мәғариф һәм фән министры һәр аныҡ хәл-торошто айырым ҡарарға кәрәклеген билдәләй һәм үтенестәрҙе үҙенең исеменә ебәрергә саҡыра. "Беҙ хоҡуҡ боҙолоу осраҡтарын айырым тикшерәсәкбеҙ", - тип һығымта яһай ул.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Мәғариф буйынса республика кәңәшмәһенең быйылғы темаһы Башҡортостанда тәрбиә биреү системаһын камиллаштырыу мәсьәләләренә арналды. Тәрбиә мәсьәләләрен камиллаштырып, үҙгәртеп буламы, ул мәңгелек төшөнсә түгелме ни?*

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Тәрбиә - үҙе үк сифат, тигән һүҙ. Тәрбиәле бала, тибеҙ икән, беҙ был тормошта үҙен тапҡан, үҙенең белгәнен көнкүрештә ҡуллана белгән һәм, иң мөһиме, үҙ халҡыбыҙҙың әхлаҡи-рухи ҡиммәттәрен һанлаған шәхесте күҙ уңында тотабыҙ. Ниндәй генә заманда йәшәмәйек, ул заман ниндәй генә фәнни-техник прогресс кисермәһен, тәрбиәнең асылы үҙгәрмәй. Был йәһәттән минең фекерем бер - бала үҙ мөхитендә тәрбиәләнергә тейеш. **Үҙ мәлендә Толстой ҙа, Достоевский ҙа, Ушинский ҙа, башҡалар ҙа тәрбиәнең милли ҡалыпта булыуын хуплаған.** Рус мәҙәниәтен француз мәҙәниәте ҡыҫырыҡлап сығара башлаған ваҡыттарҙы ғына хәтерләгеҙ. "Евгений Онегин" әҫәрендә Пушкин Татьянаның хатын яҙған саҡта йәйә эсендә: "Әйтерһең, ул был һүҙҙәрҙе рус телендә әйтә алмай ине", - тип өҫтәп ҡуя.

**Тәрбиә милли ҡалыпта булырға тейеш, тигән фекер борондан килә.** Тәүҙә ошоно аңларға кәрәктер үҙебеҙгә лә, мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәренә лә. Мәктәптәрҙә "Тормош һабаҡтары" дәрестәренең юҡҡа сығыуына ла уҡытыусылар бик борсола хәҙер. Ә бит ошондай дәрестәрҙән һуң үҙ мөхитенә ҡайтҡан бала бөтөнләй икенсе кешегә әйләнә лә ҡуя. Быны һауыҡтырыу һәм ял итеү лагерҙарында "Йәйләү" программаһы буйынса профилле эшләгән сменаларҙа күрәм.

Һәләтһеҙ балалар булмай, тик беҙ уларҙың ҡанына һалынған йүнәлеште аса ғына алмайбыҙ. Төп сәбәбе, әлбиттә, туған телдән айырыу, туған моңло мөхит булдырмау. Беҙ балаларыбыҙҙың фәҡәт юғары белем алыуы менән ҡәнәғәтбеҙ. БДИ тапшырһын да, уҡырға инһен, тибеҙ. Ә күпме һәләт, ҡаҙаныш, асыш юғала ошо хата ҡараш арҡаһында. Хәҙер беҙҙең Нияз Мәжитов, Диҡҡәт Бураҡаев, Миңнеәхмәт Моталов, Мәзһәр Иҫәнбаев, Вәрис Ғүмәров, Марат Аҙнабаев, Ринат Йосопов һәм башҡалар кеүек үҙ милләте өсөн дә янған, донъя фәне өсөн дә ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән ғалимдарыбыҙ юҡ тиерлек бит.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҺАУМЫ, МӘКТӘП!



*Һаумы, мәктәп!*
*Һаумы, алтын һуҡмаҡ!*
*Тормошомдоң изге һуҡмағы!*
*Күңелдәрҙә ошо һуҡмаҡтан да*
*Ҡәҙерлерәк нимә бар тағы!*

*Ҡәҙерлеһең. Ошо һуҡмаҡта бит*
*Һәр беребеҙ әҙләй үҙ-үҙен.*
*Оло донъяларға сығыр өсөн,*
*Тауыш бирә - әйтә үҙ һүҙен.*

*Мәктәп тигән кескәй бер утрауҙа*
*Ер күсәре, гүйә, әйләнә.*
*Һүҙ һорайбыҙ. Беҙҙең тауышты ла*
*Ишетергә Йыһан өйрәнә.*

*Һаумы, мәктәп!*
*Һаумы, изге һуҡмаҡ!*
*Яҡтылыҡ та бында ярала.*
*Ярала ла яңы киңлектәргә*
*Алтын һуҡмаҡ булып тарала.*

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**

12+

✓ *Педагогикала шундай бер талап бар, дәрес уҡытҡанда тәрбиә лә бирелергә тейеш. Хәҙер фәнгә саманан тыш иғтибар биреп, тәрбиә төшөнсәһе төшөп ҡала, был да дөрөҫ түгел. Дәрестәр тәрбиәүи маҡсатта ла ҡулланылырға тейеш.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәғариф буйынса республика кәңәшмәһенең быйылғы темаһы Башҡортостанда тәрбиә биреү системаһын камиллаштырыу мәсьәләләренә арналды. Тәрбиә мәсьәләләрен камиллаштырып, үҙгәртеп буламы, ул мәңгелек төшөнсә түгелме ни?

**(Башы 1-се биттә).**

"Йәйләү"гә рус мәктәбенән килгән бер башҡорт балаһы менән һөйләшәбеҙ. "Атай-әсәйем, ял итергә башҡорт лагерына бараһың, тигәс, баш тартырға уйлағайным. Йәнәһе, унда нимәгә өйрәтерҙәр, ниндәй уйындар булыр, тип уйлағанмындыр инде. Икенсе йылға мотлаҡ тағы ла киләм", - тип, ҡыуанып ҡайтып китте. Ошо баланың фекере кеүек ҡараштар биләп алған ят телле башҡорттар зиһенен. Атай-әсәйҙәр шуны аңламай һаман. Үҙ милләтеңде белмәүҙән дә ғазаплыраҡ тойғо юҡтыр аңлаған кешегә. Туған тел, моң, йола-ғөҙәт мөхитенә килеп сумған ят телле балаларҙың нисек үҙгәреп киткәнен күрһәгеҙ ине! Башҡортлоҡтары уянып, күҙҙәрендә нурҙар уйнап китә бит уларҙың "Йәйләү" лагерында булғанда...

***Лилиә ХАЛИҠОВА, педагогика фәндәре кандидаты:*** Тәрбиә мәсьәләһе, ысынлап та, кеше менән бергә барлыҡҡа килгән һәм уның төп асылы үҙгәрмәй. Әммә тәрбиә мәсьәләһендәге яңылыҡтарға килгәндә иһә, заман ул - үҙе яңылыҡ. Беҙ бөгөн тиҙ үҙгәреүсән, динамикалы, ғөмүмән, яңы тормошта йәшәйбеҙ. Балаларҙы яратыу,



бағыу, тәрбиәләү алымдары ҡырҡа үҙгәреп китмәй, әлбиттә, әммә тәрбиә ысулдары яңы заманға тап килергә лә тейеш. Федераль белем биреү стандарттарына ярашлы, гражданлыҡ тойғоһон, рухи, әхлаҡи тәрбиәне йәнләндереү талап ителә, сөнки бөгөн контекст икенсе. Совет заманында ла был тәрбиә алымдары төп урында ине, тик контекст бөтөнләй башҡа булды. Яңы быуындың үҙ сәләмәтлеген ҡайғыртыу, бының өсөн йәш саҡтан дөрөҫ йәшәү рәүеше алып барыу, психик һәм физик һаулығын һаҡлау өҫтөндә эшләү өсөн үҙаңы булырға тейеш.

Замандың тағы ла бер кире яғы - балалар буш ваҡыттарын файҙалы итеп үткәрә белмәй. Ваҡытын дөрөҫ үткәрергә, һәләттәрен, ғөмүмән, үҙенең асылын асырға булышлыҡ итергә кәрәк уларға. Бөгөн мәктәп кенә балаға мәғлүмәт бирмәй, уларҙы дөйөм интернет мөхите лә тәрбиәләй. Шуға ла атай-әсәйҙәргә, мәктәпкә бала тәрбиәләүҙәге ролен яңынан ҡарарға өйрәнергә ваҡыт. Улар йәш быуындың шәхесен ихтирам итеп, уны тиң күреп, уның менән хеҙмәттәшлек итеүгә өлгәшә алһалар, барыһы ла яҡшы буласаҡ.

**Бөгөн хатта рухи ҡиммәттәргә лә яңы ҡараш кәрәк. Әйтәйек, ғаилә башҡорт халҡы өсөн иң төп төшөнсәләрҙең береһе, бөгөн дә йәштәребеҙ матур итеп ғаилә ҡора, балалар үҫтерә. Тик Көнбайыш мәҙәниәтенә эйәреп, ғаиләгә башҡа ҡараштa булғандар ҙа бар бит.** Күптән түгел социаль селтәрҙә бер танышыу төркөмөнә барып әләктем. Ысынлап та, бында аҡыллы, белемле, йәш, матур егет-ҡыҙҙар теркәлгән, тик уларҙың күбеһе яңғыҙ йәшәүҙе маҡсат итеп ҡуя. Хатта бала табыуға ҡырҡа ҡаршылар. Ә әҙәм балаһы һәр ваҡыт кем тураһындалыр хәстәрлек күрергә тейеш - был тәбиғәт тарафынан һалынған сифат. Шуға ла бындай йоғонтонан да араларға кәрәк балаларҙы.

Һөнәр һайлау йәһәтенән лә эш башҡасараҡ бөгөн. Совет заманында кеше ҡайҙа уҡыясағын, унан һуң ҡайҙа эшләйәсәген белә ине. Хәҙер беҙ иртәгә нимә булырын, ниндәй һөнәр кәрәкле икәнен аныҡ ҡына әйтә алмайбыҙ. Һәләттәре асылмау сәбәпле йәки атай-әсәй йоғонтоһонда һөнәрен дөрөҫ һайламағандар үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт булмай. Ә был иһә ҙур трагедия, кеше үҙен бойомға ашыра алмаясаҡ. Ғаиләлә лә, мәктәптә лә баланы яңы стилдә - йүнәлеш биреү стилендә тәрбиәләргә кәңәш ителә. Үҙенең урынын табыу ҡатмарлашҡанға күрә лә, бөгөн суицид, экстремизм, наркомания кеүек күренештәр барлыҡҡа килә. Шуның өсөн баланың психологик һаулығына иғтибар итергә, уны тормошта килеп тыуған төрлө ваҡиғаларҙы хәл итергә өйрәтергә кәрәк. Педагогикала шундай бер талап бар, дәрес уҡытҡанда тәрбиә лә бирелергә тейеш. Хәҙер фәнгә саманан тыш иғтибар биреп, тәрбиә төшөнсәһе төшөп ҡала, был да дөрөҫ түгел. Дәрестәр тәрбиәүи маҡсатта ла ҡулланылырға тейеш. Рәсәй мәғарифында мөһим бер документ ҡабул ителгән, ул "2025 йылға тиклем тәрбиә үҫеше стратегияһы" тип атала. Был документ тап беҙ һөйләшкән темаларға иғтибарҙы арттырасаҡ та инде.

***Әлфиә ҒӘБИТОВА, уҡытыусы:*** Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, белем биреү сифатлы булырға, уҡыусылар мәктәптә алған белемен аныҡ шарттарҙа аныҡ маҡсаттарға өлгәшеү һәм йәшәү кимәлен үҫтереү өсөн тотонорға тейеш. Йәғни, хәҙер уҡыусылар тормош көтөүгә тулыһынса әҙер булып сыға инде. Улай тиһәң, совет мәктәбендә уҡыған беҙ ҙә төшөп ҡалманыҡ, вузға ла индек, һөнәребеҙ буйынса эшләп тә йөрөйбөҙ. Ә бөгөн кеҫәһендә вуз дипломы ятыусылар башлыса алған һөнәре буйынса эшләргә лә теләмәй, ана, торалар элемтә үҙәктәрендә, магазиндарҙа һатыусы-консультант булып. Әлбиттә, хеҙмәттең яңы етештереү саралары, мәғлүмәти технологиялар барлыҡҡа килгән замандың заңы ла башҡалыр, быны беҙ аңлап та етмәйбеҙҙер, тигән фекергә киләһең, ахырҙа. Ошо уҡ Стандарттарға ярашлы, уҡыусының шәхси һөҙөмтәләре тәрбиә һөҙөмтәһе булараҡ ҡарала. Мәктәп уға шарттар булдыра ла, шәхес үҫтереү процесы менән идара итә. Ләкин был бәхәсле мәсьәлә, кем әйткән әле, баланың теге йәки был уңышы мәктәптеке генә, тип, уны атай-әсәй ҙә, олатай-өләсәй ҙә, мөхит тә тәрбиәләй.

**Тәрбиә эшенең, тимәк, уның сифатының, аҙаҡҡы һөҙөмтәһе шунда уҡ күренмәй. Табиптың хатаһы - шунда уҡ, уҡытыусының хатаһы бер нисә йылдан һуң беленә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Шулай уҡ атай-әсәй тәрбиәһенең дә хаталары һуңынан ғына күренә.** Унан һуң, папка-папка итеп итеп тупланған маҡтау ҡағыҙҙары баланың белем һәм тәрбиә кимәле тураһында һөйләмәй әле. Шундай таныштарым бар, әсәһе улы өсөн интернетта үткәрелгән олимпиадаларҙа ҡатнашып, урындар яулай, маҡтау ҡағыҙҙары арта ғына бара. Бының ни зыяны, тип кенә уйлар инең, баланың холҡо боҙола, ул хәҙер бөтөн донъя уға тейеш тип ҡабул итә. Мәктәпте тамамлар йәшкә еткән ҡыҙҙары өйҙә һауыт-һаба, иҙән дә йыумаған ғаиләләрҙе беләм. Шуға ла ғаилә булһынмы, мәктәпме, тәү сиратта, бала кешелекле, изге күңелле, башҡаларҙың хәлен аңлай белгән, эшһөйәр булып үҫһен, тип тырышырға кәрәк. Бер туҡтауһыҙ камиллаштырып, процесты ҡатмарлаштырғансы, һыналған ысулдар ҡулай булмаҫ инеме икән?..

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ИЗГЕЛЕККӘ АЗАТЛЫҠ БИРӘЙЕК



Үҙәк телевидениенан ҡайһы саҡта Башҡортостаныбыҙ, шәхестәребеҙ тураһында хаҡ булмаған хәбәр яуҙырған тапшырыуҙар күренгеләп ҡала. Ошондай ҡара яғыуҙарға күнегеп бөткәнбеҙме, "Эт өрөр, бүре йөрөр" тип ҡарайбыҙмы, әллә "Сабырлыҡ төбө - һары алтын", тип түҙәбеҙме - бер ниндәй ҡаршы һүҙ әйтеүсе юҡ. Әллә түҙемлек буйынса башҡаларҙан уҙҙырырға булдыҡ инде? Беҙ түҙәбеҙ инде ул, түҙмәй сарабыҙ юҡ, ләкин Үҙәктәге кемдәрҙер тарафынан ялланған журналистар соҡсоноуҙы дауам итә. Ә бит улар иң тәүҙә беҙгә килеп һыйланғандыр, күстәнәс-маҙарын да мул ғына тейәгәндәрҙер, республикабыҙҙағы ҡунаҡсыллыҡтан файҙаланмай ҡалмағандыр, тим инде, ә аҙағынан ашаған табағына төкөрөү һымаҡ була инде был...

"Һүҙ азатлығы" тигән булабыҙ ҙа бит, ләкин ҡайһы бер сәйәсмәндәр, журналистар һүҙ азатлығын гел яуызлыҡ, яманлыҡ, ауыр һүҙҙәр тантанаһына әйләндерә лә ебәрә. Яҡшылыҡҡа, гүзеллеккә, изге һүҙҙәргә азатлыҡ бирергә ваҡыт түгелме икән беҙгә? Донъяларыбыҙ яуызлыҡ, уҫаллыҡ менән тулып бара бит былай ҙа...

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тип үҙгәртелде. Министрлыҡҡа республика Хөкүмәтенә Ошо үҙгәреш тураһындағы Положениены раҫлауға индерергә, шулай уҡ ведомство структураһында тейешле Идаралыҡ булдырыуҙы ҡарарға ҡушылды.

✓2017 йылда Башҡортостанда хеҙмәтте һаҡлау буйынса иҫкәртеү сараларына 278 миллион һум йүнәлтелә. Производствола йәрәхәт алыуҙы һәм һөнәри сирҙәрҙе кәметеү буйынса иҫкәртеү сараларын финанслау сиктәрендә Рәсәй Социаль страховкалау фондының төбәк идаралығы бүлгән аҡсаны 2,5 меңдән ашыу эш биреүсе ала. Уртаса алғанда, бер йыл эсендә республикала производствола меңдән ашыу бәхетһеҙ осраҡ теркәлә, тип билдәләнеләр ведомствола.

✓Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре башлана. Уларҙы уҙғарыу өсөн баш ҡалала 11 даими майҙансыҡ билдәләнгән. Өфө йәрминкәләрен ауыл хужалығы продукцияһы менән республиканың 45 районы, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Туймаҙы, Ишембай, Дүртөйлө, Благовещен ҡалалары тәьмин итә. Ял көнө йәрминкәләре популярлығын юғалтмай, халыҡтан һорау алыу мәғлүмәттәре ошо хаҡта һөйләй. Респонденттарҙың күпселеге ауыл хужалығы йәрминкәләренең эшен ыңғай баһалай һәм аҙыҡ-түлекте шунда һатып ала.

✓Тәүге ярты йыллыҡта Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнеше 2,449 миллиард доллар самаһы тәшкил иткән. Нигеҙҙә республика минераль продукттарҙы (65 процент), химия сәнәғәте продукцияһы, каучук (18,5), машиналар эшләү продукцияларын (10%) экспортҡа оҙатҡан. Импортта төп урынды машиналар эшләү продукцияһы (49 процент); химия сәнәғәте продукцияһы, каучук (22,7 процент); металдар һәм уларҙан яһалған изделиелар (14,6 процент) биләгән.Шул осорҙа 114 ил менән тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек тормошҡа ашырылған.

✓Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәге ҡаланың бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам фонды менән берлектә "Эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре" тигән бушлай курстар ойоштора. Дәрестәр 11-22 сентябрҙә үткәрелә. Йәшәү өсөн урын бирелмәй. Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 47/1, 17-се бүлмәлә, шулай уҡ (347) 251-14-83 телефоны буйынса яҙылырға мөмкин.

БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ

# ШАУ-ШЫУ АПТЫРАТА...




*Леонид ФИЛИНОВ, продюсер, "Тере таҫма" кинокомпанияһының башҡарма директоры:*

Башҡорт теле тирәләй барған шау-шыу мине сикһеҙ аптырата. Башҡорт телен көсләп уҡытырға ярамай, тигән аһ-зар йышыраҡ ишетелә башланы. Эйе, көсләп уҡытырға ярамай, кеше бының кәрәклеген үҙе аңларға тейеш. Беҙ күп милләтле республикала йәшәйбеҙ. Бындағы һәр халыҡтың үҙенең тарихы, мәҙәниәте, теле. Әгәр ҙә күп фатирлы йортта йәшәһәгеҙ, урыҫ, татар, башҡорт, украин, мари, удмурт һәм башҡа милләт вәкилдәре һеҙҙең күршеләрегеҙ. Улар менән күршеләш йәшәйһегеҙ, иҫәнләшәһегеҙ, аралашаһығыҙ, осрашаһығыҙ, кейәүгә сығаһығыҙ, өйләнәһегеҙ. Күршеңдең милли мәҙәниәте менән танышыу - мотлаҡ түгел, әммә һеҙ үҙегеҙҙе дуҫтар, күршеләр, ғаилә итеп иҫәпләйһегеҙ икән, белеү кәрәк, был тәбиғи хәл. Был башҡаларға ихтирам күрһәтеү.

Тел һәм мәҙәниәтте белеү - уртаҡ тел табыуҙа күпер булып тора. Быны мин үҙемдән сығып әйтәм. Мин бала саҡта башҡорт теленә тәржемә ителгән Дисней йәнһүрәттәрен күрһәтә торғайнылар, әммә уларҙа урыҫ теленә тәржемә ителгән субтитрҙар булмай торғайны. Шул саҡта миндә башҡорт теленә ҡарата кире тойғолар уянғайны. Бына тап шул мәлдә алда әйтелгән күперҙе һуҙыусы булманы...

Мәктәптә иҫәнләшергә һәм хушлашырға ғына өйрәнә алдым. Әммә минең атай-әсәйем башҡа милләттәргә ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләне, быны ни өсөндәр бөгөнгә атай-әсәйҙәр эшләргә теләмәй. Ҡайһы берәүҙәр хатта башҡорт теле дәресенән баш тартып, быны шәхси уңышы кеүек итеп ҡабул итә. Был шул тиклем көлкө. Эйе, Конституция аралашыу, белем алыу, тәрбиәләү, ижад итеү телен һайлау мөмкинлеген бирә. Тик ни өсөн был һайлауҙы агрессив рәүештә, үҙеңдең һоҡланғыс айырымлығыңды раҫлап эшләргә кәрәк һуң? Былдай ысул үҙеңдең әҙәпһеҙлеккә хоҡуғыңды раҫлау кеүек күренә. 10-15 йылдан нимәгә өлгәшергә теләйбеҙ һуң? Үҙ-ара талашып бөтөүҙе көсәйбеҙме?

Мин бөгөн башҡорт телен яҡлайым, сөнки башҡорт телен һәм мәҙәниәтен аңламауҙан алып, башҡорт мәҙәниәтен үҫтереү менән шөғөлләнә башлауға тиклем юл үттем. Барыһы ла "Урал батыр" циклынан, башҡорт ҡобайырҙары тураһында документаль фильмдан башланды. Фильм төшөргәндә районлар буйлап йөрөп, сәсәндәрҙе тыңланыҡ. Уларҙың үҙ теленә һәм мәҙәниәтенә ниндәй һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш менән баҡҡандарын күрҙем. Үҙ телендә һөйләшә алыуҙары менән бәхетле булыуҙарын аңланым, шул уҡ ваҡытта йолаларҙың бөгөнгө торошо хаҡында һүҙ сыҡҡанда күҙҙәрендәге шатлыҡтың һағышҡа алышыныуын күҙәттем. Тап ошо мине һоҡландырҙы һәм ҡарашымды үҙгәртте. Һөйөүгә лайыҡлы булмаған нәмәне ул тиклем яратып булмай. Уларҙың һөйөүе минең ҡарашымды үҙгәртте.

Кинорежиссер, милләте буйынса башҡорт булған Булат Йосопов менән төшөргән "Визит" фильмында 5 тел яңғырай - башҡорт, урыҫ, инглиз, ғәрәп, французса. 2015 йылда төшөрөлгән "Наган" фильмында ла урыҫ һәм үзбәк телдәрен ишетергә була. "Бабич" фильмы башҡорт телендә, әммә уны урыҫ титрҙары оҙатып бара. Фильмда ҡаҙаҡ, урыҫ, татар телмәре яңғырай. Бына былар Рәсәй халыҡтарының телен һәм мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүҙең лайыҡлы миҫалдары.

Әлеге мәлдә мин башҡорт мәҙәниәте хаҡындағы яңы фильмды продюсерлайым. Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арналған яңы кино "Беренсе Республика" шулай уҡ бер нисә - урыҫ, башҡорт, татар, украин һ.б. телдәрҙә буласаҡ.

Атай-әсәйҙәргә өндәшәм: башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә ҡаршатарыҡҙы үҙгәртергә саҡырам. Тел өйрәнеүгә ҡаршы булыу - наҙанлыҡ. Кемдер, башҡорт теле инглиз, ҡытай, испан телдәре кеүек кәрәкле түгел, тиер. Тик башҡорт теле төрки телдәр төркөмөнә ҡарай һәм уны аҙ ғына белһәң дә, Төркиәнән килгән туристар менән аралаша аласаҡһың, хатта Венгрияла ла һеҙгә туған итеп ҡараясаҡтар. Татарстан, Яҡутстан, Бүрәтстан, илдең башҡа төбәктәрендә "Зур рәхмәт!" тигән һүҙбәйләнеш тә һеҙҙе ҡәҙерле ҡунаҡҡа әйләндерәсәк. Төрки телдәрендә 165 миллиондан ашыу кеше һөйләшә. Ошондай оло мәҙәниәттең бер өлөшө һеҙҙең иғтибарығыҙға лайыҡмы? Һис шикһеҙ!

Мәҙәниәт һәм мәғариф эшмәкәрҙәренә мөрәжәғәт итәм. Үҙ-ара аралашыу, белем биреү сифатын камиллаштырырға, бөтөн милләт һәм диндәр вәкилдәрен ҡыҙыҡһындырыусы һәм йәлеп итеүсе онлайн-проекттар, телетапшырыуҙар, конкурстар, флешмобтар, акциялар булдырырға кәрәк.

Шулай уҡ дәүләткә һәм битараф булмаған кешеләргә өндәшәм. Мәҙәниәтте һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итегеҙ. Киләсәгебеҙ үҙебеҙҙең ҡулда. Үҙ мәҙәниәтегеҙҙе һәм йолаларығыҙҙы яратығыҙ, күршеләрегеҙгә ихтирамлы булығыҙ. Беҙ бер-беребеҙгә эшләй алған ин мөһим нәмә ошо. Һөҙөмтәлә барыһы ла отасаҡ ҡына.

**(Текст руссанан тәржемә ителде).**

ИШАРА

# ҺУҠЫРҘЫ ҺУҠЫР ЕТӘКЛӘМӘҺЕН,

## йәғни Сәйәси хәлдәргә аңлатма ла кәрәк ул



**Беҙҙең ғаиләлә тормошта булып яткан төрлө күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға ҡарата берәй көләмәс һөйләнмәй ҡалмай. Бигерәк тә төрлө һайлауҙар алдынан, төрлө партияларҙың телеэкран аша фекер алышыуҙарын, бәхәстәрен, тыңлағандан һуң барлыҡҡа килә көләмәстәр. Бына берәһе:**

Бер депутатлыҡҡа кандидат халыҡ алдына сығып:

- Илдә коррупция, ришүәтселек, дәүләт милкен талау бара! - тип яр һала. Халыҡ баҙнатһыҙ ғына:

- Әгәр беҙ һеҙҙең партияғыҙ өсөн тауыш бирһәк, был күренештәргә ҡаршы көрәшерһегеҙме? - тип һорай.

- Әлләсе, беҙҙең дә был эштәрҙә ҡатнашҡыбыҙ килә бит әле, - тип яуаплай депутатлыҡҡа кандидат...

Тағы бер көләмәс:

Тарих фәне уҡытыусыһы бер синыфта ике-өс йыл уҡыусы "икеле ҡапсығы"н таҡта янына сығарып: "Владимир Ильич Ленин кем ул?" - тип һорай. Уҡыусы: "Белмәйем", - тип яуап ҡайтара. "Ә Сталинды беләһеңме?" - ти уҡытыусы. "Иҫләмәйем", - ти бала. Уҡытыусы: "Бик насар, киләһе дәрескә әҙерләнеп кил", - тип, уны урынына ултырта.

Кисен, ҡараңғы төшөп барғанда, был уҡытыусы өйөнә ҡайтып бара икән. Юлына ҡапыл теге "икеле ҡапсығы" килеп сыға ла:

- Һеҙ Косойҙы беләһегеҙме? - тип ҡаты итеп һорай. Уҡытыусы ҡурҡыңҡырап:

- Юҡсы, - тип яуаплай.

- Ә Кривойҙы беләһеңме?

- Уны ла белмәйем, - тип яуаплай уҡытыусы, тамам ҡаушауға ҡалып. Ә уҡыусы, эре генә ҡиәфәт менән:

- Улай булғас, ниңә мине үҙегеҙҙең шайкағыҙ менән ҡурҡытаһығыҙ? Һеҙҙең - үҙегеҙҙеке, ә беҙҙең - үҙебеҙҙеке, - тигән дә үҙ юлы менән киткән...

Бына бөгөн дә һәр кемдең үҙ "партияһы" барлыҡҡа килгән заман. Улар бөтәһе лә, имеш, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғырта. Беҙгә алтын тауҙар вәғәҙә итәләр. Был һүҙҙәрҙе һәр дүрт йыл һайын ишетәбеҙ. Депутаттарҙың һайлауҙар алдынан ғына "ҡыҙыу" эш күрһәтеп ҡалырға тырышыуы һәр кемгә мәғлүм, әммә барыбер һайлауҙарға йөрөй бит халыҡ. Юморист Жванецкий шулай ти: "Мин түбәндәгеләргә төкөрөр өсөн юғарыға күтәрелдем..." Депутаттарҙың ҡайһы берҙәре, ысынлап та, ошо вазифаға өлгәшкәс, үҙ һайлаусыларынан алыҫлаша, ярҙамға мохтаж халыҡҡа төкөрөп кенә ҡарай кеүек тойола...

Әйткәндәй, журналистар баҫсаһына ла таш атайым әле: хәҙер үҙебеҙҙең республика гәзиттәрендә донъя, ил, республиканың сәйәси хәлдәренә бик үк анализ яһалмай. Сәйәсәттән алыҫ торһам да, телевизорҙан "Яңылыҡтар" тапшырыуын ҡарап барһам да, башҡорт телендәге гәзиттәрҙән шундай хәбәрҙәр эҙләйем дә ултырам. Үҙемдең аңлауыма аныҡлау, фекерҙәштәр эҙләйем, йәнәһе. Бигерәк тә һайлауҙар алдынан бик кәрәк ул шундай аналитик мәҡәләләр. Әтеү, рәссам Петр Брегелдең картинаһындағы кеүек, һуҡырҙарҙы һуҡыр етәкләһә, бөтәбеҙ ҙә упҡынға осорбоҙ бит...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мысырҙа Башҡортостандың заманса биш төр ярыш мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Гөлназ Ғөбәйҙуллина шәхси иҫәптә Рәсәй йыйылмаһына берҙән-бер алтын миҙал килтерҙе. Шулай уҡ ул Рәсәй спортсылары Анна Буряк һәм Ульяна Баташова менән бергә команда беренселегендә "көмөш" миҙал яуланы. Шулай итеп, Каирҙа үткән заманса биш төр ярыш буйынса донъя чемпионатында ете комплект миҙал уйнатылды. Рәсәй йыйылмаһы бер алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙал менән дөйөм команда иҫәбендә бишенсе урынды алды.

✓Өфөгә "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара кинофестиваленә актер Дмитрий Дюжев килә. Ул фестиваль ҡунағы буласаҡ, тип хәбәр итә сараны ойоштороусылар. Билдәле Рәсәй актеры тамашасыларға рус әҙәбиәте шедевры - А.С.Пушкиндың "Евгений Онегин" романының постановкаһын бүләк итәсәк. "Көмөш Аҡбуҙат" IV халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале Өфөлә 12-14 октябрҙә үтә. Өс көнгә Өфө мәҙәни үҙәккә әйләнәсәк һәм төрлө төбәктәрҙән, илдәрҙән режиссерҙарҙы, актерҙарҙы, продюсерҙарҙы йыясаҡ. Өс көн кинокүрһәтеүҙәргә инеү ирекле.

✓Башҡортостан буйынса күп функциялы "Минең документтарым" үҙәгенең бөтә офистарында ла биш йәшлә иҫәпләнгән сит ил паспорттарын алыу өсөн документтар әҙерләү ваҡытлыса туҡтатылды. Күп функциялы үҙәктең рәсми порталында быны Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының миграция мәсьәләләре буйынса идаралығында бланктарҙың булмауы менән аңлаттылар һәм хеҙмәттең тергеҙелеүе хаҡында өҫтәмә хәбәр ителер, тип өҫтәнеләр. "Минең документтарым" бәйләнеш үҙәгенең телефоны: (347) 246-55-33.

✓"Росреестр федераль кадастр палатаһы"ның Башҡортостан Республикаһы буйынса филиалында коррупцияға ҡаршы эш итеү, ведомство хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлегендә ришүәтселек күренештәре ихтималлығына тиҙ арала иғтибар итеү мәсьәләләре буйынса "ышаныс телефоны" эшләй башланы. Теләгән ваҡытта түбәндәге номерҙар буйынса шылтыратырға мөмкин: +7 (347) 292-66-07; +7 (495) 982-79-79 доб. 6070; +7 (495) 917-38-25.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Биҫтәлә дөйөм майҙаны 62 мең квадрат метрлыҡ 1 320 фатир төҙөү ҡаралған. Биләмәнең төп үҙенсәлеге шунда: бында социаль йорттар ғына һалына, шул иҫәптән граждандар авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсерелә.*



БАШ ҠАЛАМ

# БҮЛЕШКӘНДӘН...

## сәскә ата ла, арта ла

**Өфөлә йәйҙең һуңғы айында Сәскәләр көнөн үткәреү йолаға әйләнде. Быйыл ул Экология һәм айырым һаҡланған тәбиғәт территориялары йылы сиктәрендә уҙҙы. Быға тиклем барлыҡ райондарҙа территорияларҙы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса конкурстар үтһә, уларға ҡала парктарында ойошторолған Сәскәләр фестивале йомғаҡ яһаны. Ҡатнашыусылар гөлләмәләр, композициялар эшләү һәләтен күрһәтте, тамашасылар сәскәләр, фантазия һәм хуш еҫ донъяһына сумды. Ошо уңайҙан гөлсәскәләргә ғашиҡ табип Гөлнур НИҒМАНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

➔ **Һеҙҙе яҡындан белеүселәргә мәғлүм булыуынса, гөлдәр яратып ҡына ҡалмайһығыҙ, ә ошо һөйөүҙе башҡаларға ла "йоҡтораһығыҙ". Ә бына Сәсәкәләр фестивалендә ҡатнашаһығыҙмы?**

- Сәскәләр үҫтереү менән 10 йылдан ашыу шөғөлләнәм һәм мин эшләгән поликлиника йыл һайын фестивалдә ҡатнашып, призлы урындар ала. Ҡыҙым өсөн махсус костюм тегәм, төрлө композицияләр эшләйбеҙ һәм уларҙың фотоларын социаль селтәрҙәргә һалабыҙ.

Бынан тыш, минең гөлдәрем һәм сәскәләрем тураһында федераль кимәлдәге журналдар ҙа яҙып сыҡты.

➔ **Өфө иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем йәшеллеккә генә түгел, сәскәләргә лә күмелә. Әммә йыл һайын клумбаларҙан сәскә үҫентеләрен урлап, матурлыҡҡа ғына түгел, иҡтисадҡа ла зыян килтереүселәр табыла. Йәмғиәттә нисек итеп сәскәләргә ҡарата һөйөү тәрбиәләргә мөмкин?**

- Ундай кешеләргә яҡшы ҡараштамын тип әйтә алмайым. Сөнки һәр кеше башҡалар өсөн ниндәйҙер кимәлдә өлгө булып тора. Үҙем иһә был йәһәттән дүртенсе йыл инде яҙғыһын һәм көҙгөһөн ҡалаға сәскәләр тапшырам. Минең сәскәләремдән эшләнгән клумбаны үҙемә күрһәтһәләр, күңелгә шул тиклем рәхәт булып китә. Бына шундай миҫалдар күберәк булһын ине. Был, бер яҡтан, үҙенә күрә меценатлыҡ булһа, икенсе яҡтан, баҡсаһында һәр кем сәскә үҫтерә. Һәр кем сәскә үҫентеләре менән бүлешһә, һис зыян булмаҫ, сөнки күп йыллыҡ сәскәләрҙе мотлаҡ һирәкләргә кәрәк, шулай итеп тәрбиәләп тормаһаң, һуңынан улар ваҡлана, сәскә атмай башлай. Ә уларҙы таратып, яҡшылыҡ та эшләйбеҙ, селекцияны ла яҡшыртабыҙ. Бына ошондай өлгөләр киң мәғлүмәт саралары аша йышыраҡ яҡтыртылһын ине.

➔ **Әгәр мөмкинлегегеҙ булһа, Өфөлә ниндәй "Сәскәле ожмах" булдырыр һәм эшегеҙҙе ниндәй концепция буйынса ҡорор инегеҙ?**

- Минең бер дуҫым бар - Михаил Иванович. Ул телеүҙәк эргәһендә Зоя Космодемьянская исемендәге сквер булдырҙы. Былтыр беҙ унда икәүләшеп сәскәләр ултыртҡайныҡ, ошо көндәрҙә тағы ла тоҡомло иристар һәм лилиәләр килеп алырға тейештәр.

Мин, әлбиттә, профессиональ сәскәсе түгелмен, минең өсөн һәр сәскә - иң яҡшыһы ул, тоҡомломо - үҙенсә матур. Ә ҡаланы тағы ла күберәк сәскәгә күмергә мөмкин булыр ине. Бының өсөн йышыраҡ конкурстар үткәрергә, уларҙы киң матбуғат сараларында яҡтыртырға кәрәк. Журналистар килдә, ҡараны, күрҙе, төшөрҙө, материал яҙҙы йәки сюжет күрһәтте лә бөттө түгел, ә был эшкә күңелеңде һалып, уны даими алып барырға кәрәк. Шул ваҡытта ғына һөҙөмтә буласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА әңгәмәләште.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ



**Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев видеоконференция режимында мәғариф системаһының яңы уҡыу йылына әҙерлеге тураһында селектор кәңәшмәһе уҙғарҙы. Унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты.**

Быйыл Рәсәйҙә мәктәп партаһы артына 15,5 миллион уҡыусы ултырасаҡ, уларҙан 1,8 миллион бала беренсе класҡа барасаҡ. Был былтырғыға ҡарағанда 100 мең ҡыҙ һәм малайға күберәк, тигән һүҙ. Балалар баҡсаһына йөрөүсе балаларҙың да һаны артасаҡ һәм яҡынса 7,3 миллион кеше тәшкил итәсәк, тип билдәләне Премьер-министр. Ул шулай уҡ 2013 йылдан мәктәпкәсә учреждениеларҙа 1,25 миллиондан ашыу урын булдырылыуын, бөгөн өс йәштән ете йәшкәсә балалар өсөн сираттар булмауын, әммә өс йәшкәсә тиклемге сегмент буйынса эште дауам итергә кәрәклеген хәбәр итте. Яңы уҡыу йылында Башҡортостан Республикаһында парта артына 465,4 мең уҡыусы ултырасаҡ, был былтырғыға ҡарағанда 13,6 мең кешегә күберәк, тигән һүҙ. Беренсе класҡа 52,3 мең бала бара, ул былтырғы менән сағыштырғанда 1,6 мең кешегә артығыраҡ. Бер сменала уҡыусыларҙың өлөшө 90% тәшкил итәсәк.

# ӨФӨЛӘ УЛАР ӨСӘҮ



**Өфөлә уҡыу йылына өс яңы мәктәп: Киров районының Колгуев һәм Дим районының Көмөш шишмә биҫтәләрендә 160-сы һәм 161-се лицейҙар, шулай уҡ Октябрь районының Нуғай ҡасабаһында 147-се мәктәптең яңы бинаһы һалынған.**

770 балаға иҫәпләнгән 160-сы лицей 50 уҡытыусыға эш урыны тәҡдим итә. 1138 уҡыусы ҡабул иткән 161-се лицейға иһә 68 уҡытыусы кәрәк. Ике мәктәптә лә беренсе класс уҡыусылары бик күп. Колгуев лицейында ете беренсе класс (һәр класта 30-ар бала), Көмөш Шишмәлә - туғыҙ беренсе класс туплана. "Башланғыс мәктәптә уҡыусыларҙың күплеге 11-се кластарҙың булмауын ҡаплай, беҙҙә 9-10-сылар - бөрәр һәм ике 8-се класс бар", - тип һөйләне 160-сы лицей директоры Илнур Сәлихов. - Мәктәп бер сменала эшләй. Йүнәлешен әлегә билдәләмәгәнбеҙ: бер аҙ эшләргә, уҡыусыларҙы барларға кәрәк, киләһе йылда иһә физика-иҡтисад, гуманитар, спорт йүнәлештәрен һайларбыҙ, моғайын". Мәктәп, ысынлап та, спорт менән шөғөлләнеү өсөн яҡшы йыһазландырылған - бер нисә майҙансыҡ, футбол майҙаны. Ә 161-се лицейҙа спортблок бассейн менән дә тулыландырылған. "Мәктәбебеҙ - иң яҡшыһы", - ти уның директоры Гөлнара Ғимазетдинова. - Тап ошо проект типовой булыр тигән фекер бар".

Халыҡ күпләп йәшәгән Нуғай ҡасабаһындағы 147-се мәктәптең яңы бинаһы 1970 йылда төҙөлгән һәм 200 уҡыусыға иҫәпләнгән бинаны бушатыуға йүнәлтелгән. Яңы уҡыу йылында унда 678 уҡыусы уҡыясаҡ. "Яңы бинала 5-11 класс уҡыусылары белем ала, башланғыс мәктәп үҙ урынында ҡала. А блогын төҙөп бөтһәк, мәктәп 1250 уҡыусыны ҡабул итә аласаҡ", - тип хәбәр итте директор Наталья Силина. - Проектта 504 урынлыҡ тамашалар залы ла ҡаралған". Бөтә яңы мәктәптәрҙә һәйбәт йыһазландырылған ашханалар бар.

# ЯҢЫ БИҪТӘ



**Өфө буйлап эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Киров районында төҙөлә башлаған "Кузнецов затоны" биҫтәһендә булды.**

Башҡортостан Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фондының генераль директоры Григорий Невоструев һүҙҙәренсә, биҫтәлә дөйөм майҙаны 62 мең квадрат метрлыҡ 1 320 фатир төҙөү ҡаралған. Биләмәнең төп үҙенсәлеге шунда: бында социаль йорттар ғына һалына, шул иҫәптән граждандар авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсерелә. Бында торлаҡ программаһында ҡатнашыусылар, йәш һәм күп балалы ғаиләләр, аҙ тәьмин ителгән граждандар, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм хатта алданған өлөшсөләр ҙә фатир һатып ала. Эске биҙәү эштәре башҡарылған торлаҡтың бер квадрат метры 37 200 һум тәшкил итә.

Республика етәксеһе фатирҙарҙы ҡарап сыҡты, башҡарылған эштәрҙең сифатын баһаланы, төҙөүсе ойошманың вәкилдәре менән биләмәне төҙөкләндереү, инфраструктураны үҫтереү, транспорт мәсьәләләрен тикшерҙе. Григорий Невоструев һәр ихатала автомобилдәр туҡталҡаһы, балалар өсөн уйын, спорт һәм хужалыҡ майҙансыҡтары, шулай уҡ ағастар ҡаралғанлығын билдәләне. Беренсе ҡаттарҙа йәмәғәт һәм административ тәғәйенләнештәге биналар урынлашасаҡ. Балалар баҡсаһы һәм магазиндар эргәлә генә буласаҡ.

**"Башинформ".**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘРГӘ ИНЕ...

**Һорау: "Һалым буйынса бурысты түләү ҡағыҙын Башҡортостан Республикаһының Күп функциялы үҙәк офистарында алырға мөмкин, тиҙәр. Шул турала аңлатма бирегеҙ әле".**

- Ысынлап та, хәҙер Башҡортостан Республикаһының Күп функциялы үҙәк офистарында һалым буйынса бурыстарығыҙ бармы-юҡмы икәнен тикшерергә һәм һалым түләү ҡағыҙҙары алырға мөмкин.

Был Үҙәктәр бөтә граждандарға ла "Ғариза ҡабул итеү һәм физик шәхестәрҙең милек, ер, транспорт һалымы буйынса түләү ҡағыҙҙарын биреү" буйынса яңы дәүләт хеҙмәте күрһәтә.

Физик шәхестәргә һалым буйынса бурысы бармы-юҡмы икәне тураһында белеү өсөн шәхесте раҫлаусы документ йә нотариаль ышаныс ҡағыҙы күрһәтергә кәрәк. Бурысы булған физик шәхестәргә транспорт, ер һәм милек һалымын түләү ҡағыҙы бурыс һәм пени суммаһы менән бирелә. Түләү ҡағыҙы-квитанция буйынса түләүҙе терминал аша йәки яҡындағы түләү ҡабул итеү пункттары аша башҡарырға була.

Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы буйынса 2017 йылдың 1 майына ҡарата физик шәхестәрҙең милек һалымдары буйынса бурысы 2,7 миллиард һум тәшкил итә. Һалымдарҙы ваҡытында һәм тулыһынса түләү дәүләттең именлек һәм финанс тотороҡлоҡ нигеҙен тәшкил итә.

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығының матбуғат хеҙмәте.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда грипҡа ҡаршы вакцинация башлана. Бөгөнгә көнгә республикаға балаларға 175 мең грипҡа ҡаршы тәүге вакциналар партияһы килтерелгән, балалар поликлиникаларына бүлеү бара. БР Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Эльза Сыртланованың һүҙҙәренсә, иммунизация менән республиканың яҡынса 40 процент халҡын тәьмин итеү күҙаллана.

✓Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә Рәсәй транспорт ведомствоһы популяр Рәсәй курорттарына туристарҙы ташыуға яңы субсидиялау механизмын әҙерләй. Мәсәлән, илебеҙ туроператорҙары Краснодар крайы һәм Ҡырым диңгеҙ курорттарында ял итеүҙе ойоштороуға махсус субсидиялар алыуы ихтимал. Халыҡ-ара тәжрибәлә бындай субсидиялау тәжрибәһе файҙаланыла, мәсәлән, Төркиәлә һәм Израилдә. Унда туристик операторҙар һәр ташылған пассажир өсөн аҡса ала.

✓Урам саттарында мотоциклсылар өсөн махсус туҡтау һыҙаты булдырылыуы һәм рәттәр араһынан йөрөү рөхсәт ителеүе ихтимал, тип хәбәр итә киң мәғлүмәт саралары. Илдең Эске эштәр министрлығына, Транспорт министрлығына һәм Мәскәү Хөкүмәтенә юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә тейешле үҙгәрештәр әҙерләргә ҡушылған. Бөгөн велосипедсылар һәм мотоциклсылар автомобилселәр менән бергә светофорҙың йәшел уты янғаның көтөп тора һәм улар менән бергә старт ала, был иһә бик хәүефле.

✓2017-2018 йылдағы көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә туристар Өфөнән Гоа, Дубай һәм Нячангка оса ала. Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә рейстар аҙнаһына ике тапҡыр - шишәмбе һәм йома көндәренә билдәләнгән. Boeing-737-800 самолеты Өфөнән урындағы ваҡыт буйынса таңғы 5 тула 5 минутта юлға сыға. Гоаға сәйәхәтселәр һәр 12 көн һайын оса ала. 238 пассажирға иҫәпләнгән Boeing-757-200 самолетында юлға сығыу ваҡыты - киске 11 тула 10 минутта. Вьетнамға сәйәхәт һәр 10-11 көн һайын ойоштоpола.

✓Рәсәй граждандары аҡсаларын һумда арттыра. Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәгенең һорау алыу һөҙөмтәләре шулай уҡ рәсәйҙәрҙең курстың үтә тиҙ төшөүен көтмәгәне, әммә котировкаларҙы иғтибарлы күҙәтеүе хаҡында һөйләй. Күбеһенсә кешеләр милли валютаның аҡрынлап төшөүенә әҙер. Һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, бөтә респондентарҙың 63 проценты аҡсаларын һумда йыя, һорау алғандарҙың 3 проценты - долларҙа, 5 проценты евролa һаҡлай.

КӨНАУАЗ

# ДӘРЕСЛЕКТӘР БУЛҺА...

## былдай хәл килеп тыумаҫ инеме?



**Август аҙағында Өфө ҡалаһының мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә үҙҙәренең традицион кәңәшмәһенә йыйылып, үткән уҡыу йылына йомғаҡ яһаны, яңыһына маҡсаттар билдәләне.**

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова, кәңәшмәнең көн тәртибенә ярашлы, тәрбиә мәсьәләләренә ҡағылды һәм йәш быуынды илһөйәр итеп тәрбиәләү йүнәлешендә бойомға ашырылған проекттар тураһында һөйләне. Әлбиттә, баш ҡалабыҙҙа республиканың башҡа төбәктәре, хатта Рәсәй кимәлендә өлгө итеп күрһәтерҙәй ундай проекттар бихисап. Был турала кәңәшмәлә ҡатнашыусы Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитет рәйесенең беренсе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова ла телгә алды. "Ил Президенты Владимир Путин, милләттәр, мәҙәниәттәр, диндәр, телдәр һәм халыҡтар дуҫлығы төрлөлөгө менән Башҡортостанда, һыу тамсыһындағы кеүек, беҙҙең бөтөн Рәсәй сағыла, тигән бик хаҡ һүҙҙәр әйткәйне, - тине Лилиә Салауат ҡыҙы. - Бөгөн йәмғиәттә башҡорт телен уҡытыу һәм уны һаҡлап ҡалыу тураһында бик күп фекер алышыуҙар бара. Был мөһим, бәхәсле һәм бик нескә һорауға яуап эҙләгәндә, моғайын, ошо һүҙҙәргә таянып эш итергә тейешбеҙҙер. Шуға күрә Башҡортостан территорияһында ошо төрлөлөктө һаҡлап ҡалыу өсөн алдынғы педагогтар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, депутаттар, ата-әсәләр, балалар, республиканың прокуратура вәкилдәренән торған эш төркөмө ойошторорға тәкдим итәм. Беҙҙә ун дүрт туған тел уҡытылыуын иҫәпкә алып, һәр ваҡыт Рәсәй кимәлендә башҡаларға өлгө итеп ҡуя килделәр. Әлбиттә, бөгөн кәңәшмәлә күрһәтелгән тәжрибә - Өфө уҡытыусылары көн дә башҡарған эштәрҙең аҙ ғына өлөшө. Башҡортостандың үҙенсәлекле мираҫын һаҡлап ҡалыу юлдарын бергәләп эҙләйек".

Бик күптәрҙе борсоған был мәсьәләгә ҡарата БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Эльвира Айытҡолова ла үҙ фекерен белдерҙе: "Психологтар ата-әсә һәм бала мөнәсәбәттәрен сағылдырыу өсөн "Светофор ҡағиҙәһе"н ҡуллана, - тине ул. - Ҡыҙыл төҫ икән - бала ғүмеренә ниндәйҙер хәүеф янай һәм ата-әсә киҫекмәстән сара күрергә тейеш. Әгәр һары төҫ булһа, баланың ниндәйҙер проблемалары бар, ләкин ата-әсә эргәлә булыуы мөһим булһа ла, уларһыҙ ҙа мәсьәләне үҙаллы хәл итеп була. Йәшел төҫ - бала тулыһынса үҙаллы үҫешә ала, ата-әсәләргә кәрәкле ярҙам күрһәтеп торорға ғына ҡала. Ошо ҡағиҙәне уҡытыусылар һәм ата-әсәләр миҫалында ҡулланһаҡ, башҡорт телен, ғәмүмән, туған телдәрҙе уҡытыу бөгөн ҡыҙыл зонаға инеп, киҫекмәҫтән хәл итеүҙе талап иткән мәсьәлә булып китте. Әммә был дөрөҫ түгел. Сөнки телдәр өйрәнгәндә бала ғүмеренә хәүеф янамай, быны ата-әсәләр аңларға тейеш..."

Ысынлап та, күпме йылдар республика балаларына туған телдәр менән бер рәттән, дәүләт телдәрен уҡытыуҙың ыңғай тәжрибәһе булғанда, ҡапыл ғына ғауға күтәреп, бөтә яуланған уңыштарҙы юҡҡа сығарыу төптө дөрөҫ булмаҫтыр. БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова был мәсьәләлә һәр кемдең, бигерәк тә атай-әсәйҙәрҙең фекерен иҫәпкә алып эшләргә кәрәклеген белдерҙе белдереүгә. Әммә беҙҙең Берҙәм дәүләт имтихандары менән ҡурҡыуға ҡалған атай-әсәйҙәр былдай имтиханға әҙерме, тигән һорау тыуа. Ә шулай ҙа министрҙың: "Министрлыҡ атай-әсәйҙәр араһында мониторинг үткәрҙе, уның буйынса Башҡортостанда балаларына туған телен уҡытырға теләгән атай-әсәйҙәр 70 процентҡа яҡын", - тигән мәғлүмәте бер аҙ күңелдәрҙе һүрелтеп ҡуйҙы ла, ләкин сөргәнештә йомшарта.

Әлбиттә, аҡылы бар кеше балаларын туған телдән мәхрүм итмәҫ. Әммә былдай шау-шыу тыуҙырған ваҡиғаның тағы бер сәбәбе бар: республикала Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы итеп төҙөлгән яңы дәреслектәр, уҡыу ҡулланмалары, дәфтәрҙәр һәм башҡа кәрәкле материалдарға гриф алыу мәсьәләһе әлегәсә тулыһынса хәл ителмәгән. Башланғыс синыфтар өсөн әҙерләнгән дәреслектәр федераль исемлеккә индерелгән, ә бына 5-11 синыф уҡыусыларына белем биргәндә элекке дәреслектәрҙе ҡулланып булмаясаҡ. Ошоғаса дәреслектәрҙе Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы хәлгә килтереүҙе хәстәрләмәгән министрлыҡҡа тәнҡиттән башҡа ни әйтәһең инде...

Ҡыҫҡаһы, сиселмәгән, аңлашылмаған проблемалар менән аяҡ баҫа бөгөн яңы уҡыу йылына уҡытыусылар. Шуның өсөн был кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың насар кәйефе йөҙҙәренә үк сыҡҡайны. Был аңлашыла ла. Кем әйтмешләй, мәғариф системаһынан башҡа бер генә тармаҡ та шулай туҡтауһыҙ реформаларға, үҙгәрештәргә дусар ителмәй бит. Әлеге йыйылышта Лилиә Салауат ҡыҙы әйтеүенсә, Рәсәйҙең яңы мәғариф министры Ольга Васильева ла былы аңлай һәм реформаларҙы туҡтатасаҡтары тураһында белдерә, имеш. Шул уҡ ваҡытта Мәскәүгә, юғарылағы етәкселәргә бөгөн бөтә йәмәғәтселекте тетрәндергән туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе өсөн борсолоуҙар ҙа барып етһен һәм уны хис-тойғоға, кемдәрҙеңдер йоҙроҡ болғауына ҡарап түгел, ә закондарға таянып хәл итеү зарурлығы алға һөрөлһөн ине. Шуны телəй барыһы ла.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# АЙЫҠ АҠЫЛМЫ...

## әллә амбициямы?





**Йәйҙең һуңғы айы әҫе көндәргә генә түгел, ә ҡыҙыу ваҡиғаларға ла бай булды. Шуларҙың береһе АҠШ һәм КНДР араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ҡырҡыулашыуы. Ике амбициоз лидер араһындағы "һүҙ ҡуйыртыу" нимә менән барып бөтөрө бөтә донъя йәмәғәтселеген борсой.**

Йәҙрә ҡоралына эйә булған был ике илде әлеге ваҡытта тик үҙ һүҙҙәрен өҫкә сығарыу ғына борсой, шикелле. Төньяҡ Кореяның Гуам утрауында (Тымыҡ океандағы утрау АҠШ составына инмәй, ләкин уның биләмәһе һанала - унда ил Конституцияһы йоғонтоһо сикләнгән, был утрау халҡы Америка граждандары иҫәпләнмәй) урынлашҡан Америка хәрби базаһын утҡа тотоу менән янауына ҡаршы, Дональд Трамп "әлегәсә донъя күрмәгән ут һәм ғәйрәт менән яуап бирәсәге" тураһында белдерҙе. Хәлдәр артабан ниндәй йүнәлеш алыр?

Сәйәсмәндәрҙең ҡайһы берҙәре ағымдағы йылда йәҙрә һуғышы башланасаҡ һәм беҙгә иң насар сценарийға әҙер булырға кәрәк, тип фаразлай. Әлбиттә, Рәсәй менән Ҡытайҙың ике ил араһындағы көсөргәнешлекте тыныс юл менән хәл итергә саҡырыуына АҠШ менән КНДР ҡолаҡ һалыр, тип ышаныу килә. Төптән уйлап ҡарағанда, Америкаға былдай һуғышты башлау ҡулайһыҙ, сөнки уға үҙенең статусын юғалтмаҫ өсөн ышанысты енеү кәрәк буласаҡ. Ә бөгөнгө көндә уның иҡтисади йәһәттән дә, сәйәси яҡтан да хәле мөшкөл. Шулай уҡ башҡа күпселек илдәр менән дә мөнәсәбәттәренең тигеҙ булмауын иҫәпкә алғанда, һуғыш башлау варианты ил сәйәсмәндәренең күпселегендә яҡлау тапмаясаҡ. Тағы ла шуныһы - КНДР-ҙың хәрби көсөнә уның кеше ғүмеренә (ҡаршы яҡтыҡына ла, үҙенең халҡына ла) ҡарата булған битарафлығын ҡушҡанда, был илгә ҡаршы һуғыш башлау айырыуса хәүефле. Шуға күрә, Трамп командаһына килеп тыуған хәлде нисек бар, шулай ҡалдырыу, йәғни ваҡиғаларҙы артабан ҡуйыртмайынса ғына Төньяҡ Корея тирәләй үҙ контролен киңәйтеү ҡулайлыраҡ күренә. АҠШ-ҡа ошо рәүешле үҙенең стратегик дошманын - Ҡытайҙы ла - хәрби базалар менән уратып алыу бер ни тормаясаҡ. Ә хәрби базалар урынлаштырыуҙың төп дәлиле булып нәҡ "Төньяҡ Корея ҡурҡынысы" файҙаланыласаҡ. Шулай уҡ Америкаға әлеге проблеманы тулыһынса хәл итеү ҙә кәрәкмәй, был уны Азияның төньяҡ-көнсығышында ҡалыу хоҡуғынан мәхрүм итәсәк. Ә былай ул үҙен әлеге лә баяғы КНДР хәүефенән ҡурсалап тороусы итеп күрһәтеүен дауам итәсәк.

Ләкин АҠШ хөкүмәтендә КНДР биләмәһенә һөжүм итеүҙе яҡлап сығыш яһаусылар ҙа юҡ түгел. Шуға күрә, кемдең позицияһы өҫтөн сығыуын бер кем дә аныҡ ҡына әйтә алмай. Ә Пхеньяндың иһә, үҙенең ракета-йәҙрә программаһы өҫтөндә артабан да эшләйәсәге көн кеүек асыҡ, сөнки ул тик үҙ көсөнә генә ышана алыуын аңлай һәм ул-был була ҡалһа, бер яҡтан да яҡлау тапмаясағын аныҡ белә.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк өсөн

❖ Йөрәк мускулы ныҡынһын, йөрәк ауыртыуҙан туҡтаһын өсөн энәлек емешен (боярышник) ваҡлап, уға ҡайнар һыу өҫтәп, төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр 50-әр мл эсергә. Төнәтмәне оҙаҡ һаҡламағыҙ, һәр ваҡыт яңыһын әҙерләгеҙ.

### Авитаминоз

❖ 2 ҡалаҡ гөлйемешкә 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнау хәленә еткерергә. Һөҙөргә, һыуытырға, 1 стакан лимон һуты өҫтәргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә.

### Арпа

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, ҡара быяланан яһалған буш шешәгә ҡарарға кәрәк. Оҙаҡ та тормай, арпа шиңеп, юҡҡа сыға. Ҡайын ботағын яндырып, уның көлөн көнөнә бер-ике тапҡыр арпаға һөртергә лә була. Бармаҡ менән тирләгән тәҙрәнең һыуын һөртөп алып, арпаны шуның менән сылаттыра ине ололар. 2-3 тапҡыр эшләнһә, арпа бөтә.

### Хәтерҙе ныҒытыу

❖ Ҡыҙыл миләш емеше менән гөлйемеште ваҡлап, 1 балғалаҡ емешкә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10-15 минут төнәтергә һәм эсергә. Көн дауамында эсергә, күләме сикләнмәгән.

### Быуындар һыҙлауынан

❖ Быуын һәм мускулдар һыҙлағанда ҙур ғына дегәнәк япрағын өҙөп алығыҙ, бер нисә секундҡа эҫе һыуға тығып алығыҙ, ҡоротҡансы һөртөгөҙ һәм һыҙлаған урынға бәйләргә. Япраҡ кипһә, алыштырығыҙ. Бер нисә көн дауаланғандан һуң, хәл яҡшыра.

### Үксә ярылыуынан

❖ Үксә ярылһа, тигеҙ күләмдә араҡы, глицерин, һеркә эссенцияһын болғатырға. Аяҡтарҙы йылы һыуҙа тотҡандан һуң коророрға һәм ошо ҡатнашманы һөртергә. 2-3 тапҡыр ҡулланғандан уҡ шифаһы күренә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Әбү Джәхел ҡаршылыҡ күрһәтә

Тик Әбү Джәхел ҡоро һүҙ менән генә сикләнеп ҡала торған кеше булмай. Был юлы уның ҡала кәңәшмәһендә ҡуйылған талабы буйынса Ҡөрәйш ырыуының бөтөн нәселдәре лә хашим нәселенә бойкот иғлан итә. Бойкот шарттары, быға тиклем мосолмандарға ҡуйылған һымаҡ уҡ, ҡаты була: хашим нәселе кешеләренән бер нәмә һатып алмаҡҡа һәм һатмаҡҡа, уларға өйләнмәскә һәм ҡыҙ бирмәскә, шулай уҡ бойкот шарттарын Мәккәлә һатыу итеүсе һәм ҡала тирәһендә йәшәүсе бөтөн ырыуҙарҙан талап итергә. Бойкот иһә хашим нәселе Мөхәммәттән баш тартҡанға тиклем дауам итергә тейеш була. Бойкотҡа ҡушылыуҙан Әл-Мотталиб нәселе генә баш тарта. Тик шунда уҡ уларҙың үҙҙәренә лә бойкот иғлан ителә.

Хашим нәселенең ҡала үҙәгендә йәшәүсе кешеләре, көтөлмәгән һөжүмдән һаҡланып, ҡаланың көнсығыштағы осонда туплана. Бында улар электән күплэп йәшәй. Мосолмандар ҙа ошонда килеп һыйына. Ҡаланың был яҡ осо ашығыс рәүештә нығытыла. Һуғыш башланған осраҡта бик күп ҡан ҡойоласағын аңлаған Ҡөрәйш мәжүсиҙәре уларға ҡаршы ҡорал күтәрмәй.

## Мосолмандар ышанысын яулағаны

Бойкот иғлан ителгәс, хашим нәселе өсөн дә, мосолмандар менән Мөхәммәт бәйғәмбәр өсөн дә бик ауыр көндәр башлана. Мәккә халҡы улар менән бөтөнләй аралашмай, һатыу итмәй. Ситтән килгән ғәрәптәрҙе лә хашим нәселе менән аралашыуҙан ныҡлап тыялар. Шуға ла, аҡсалары байтаҡ булыуға ҡарамаҫтан, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең туғандары менән имандаштары йыш ҡына ас ҡала. Әгәр ситтән ярҙам булмаһа, уларҙың хәле үтә лә мөшкөлләнер ине. Әммә хашим нәселенән башҡа нәселдәргә кейәүгә бирелгән ҡатындарҙың улдары уларға ярҙам итеп тора. Әбд әл-Мотталибтың ейәне - ҡыҙының улы - етәкселегендә улар, мөмкинлек булған һайын, төндәрен аҙыҡ-түлек килтереп тора. Ҡөрәйш мәжүсиҙәре быны белеп ҡалһа, яза ҡаты булыр ине. Тик туғанлыҡ тойғоһо был ҡурҡыныстан көслөрәк була.

Икенсе яҡтан, хашим нәселе кешеләре йәшерен рәүештә сит илдәргә бәләкәй караундар ебәреп, сауҙа итә. Был кәсеп тә уларға ярап ҡала. Һәм улар, бойкоттың ҡаты шарттарына ҡарамай, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе нәселдән ҡыуыуҙан баш тартып килә.

Шулай ҙа ошо осорҙа мосолмандарҙың байтағы икеләнә башлай. Алла тарафынан уларға ебеү вәғәҙә ителде. Ысынбарлыҡта иһә, уларҙың тормошо хөртәйгәндән-хөртәйә, кәрәштә гел еңеләләр. Боронғо илаһтар Аллаға ҡарағанда көслөрәк булып сығамы? Ҡөрьән аша ебәрелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ аңламайҙармы? Мосолмандар араһында Мөхәммәттең ысын бәйғәмбәр икәнлегенә шикләнеүселәр ҙә барлыҡҡа килә башлай.

Ошо ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр мосолмандарҙы йыйып ала ла, бер риүәйәт һөйләй. Был риүәйәт аҙаҡтанраҡ Ҡөрьәндә лә урын ала.

(Дауамы бар).

ӨФӨ БАШҠОРТО

**Ғәҙәттә, балалар телевизорҙа күргән персонажын урамда йәки башҡа урында осратһа, шатланып, ҡысҡырып уҡ ебәрә: "Ағай (апай) телевизорҙан сыҡҡан!" Бөгөнгө ҡунағыбыҙ телевизорҙан ғына түгел, хатта шоколадтан килеп ингән, тиергә була. Заманында уның фотоһы "Конди" фабрикаһы сығарған "Шәүрә" шоколадының тышлығын биҙәй торғайны. Рубрикабыҙҙың сираттағы әңгәмәсеһе, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө менеджеры - Шәүрә ЙОМАҒУЖИНА.**

# ШОКОЛАДТАҒЫ ШӘҮРӘ




**➔ Традицион һорау: баш ҡаланың ҡайһы мәктәбендә белем алдығыҙ, уҡыу йылдары ҡайһы яғы менән хәтерегеҙҙә ҡалды?**

- Мин, баш ҡалалағы күпселек башҡорт балалары кеүек үк, Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡыным. Айырып ҡына ниндәйҙер бер ваҡиғаны әйтә алмайым, әммә уҡыу йылдары ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс булып хәтерҙә ҡалған. Сөнки был белем усағы, Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты кеүек үк, милли кадрҙар әҙерләү тимерлеге булып торҙо, балаларға белем менән бер ҡатарҙан милли рух та, илһөйәрлек, телһөйәрлек нигеҙҙәре лә һалынды. Был йәһәттән, йылдар аша артҡа боролоп ҡарап, уҡытыусылар коллективы ҙур эш башҡарҙы, тип әйтә алам.

Мәктәптә осрашыуҙар бик йыш булып торҙо, шуларҙың иң иҫтә ҡалғандары: "Каруанһарай" эстрада-фольклор төркөмөнән килеүе һәм Мәрйәм Бураҡаева менән осрашыу. Әйткәндәй, был традицияны дауам итеп, беҙ ҙә "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө менән мәктәптәргә осрашыуҙар ойошторорға ниәтләйбеҙ. Сөнки бындай мәлдәр бала күңелендә мәктәп тураһында яҡты хәтирәләр ҡалдыра, ул туранан-тура музыка һәм милләтенең мәҙәниәте менән таныша. Күп милләтле 41-се мәктәптә осрашыу уҙғарыу тәжрибәһе бар, уны тағы ла камиллаштырырға кәрәк. Шулай уҡ бындай сараларҙы предметтарҙың төбәк компоненты сәғәте итеп үткәрергә лә мөмкин.

**➔ Бөтөн нәмә ғаиләләге тәрбиәнән килә, тиҙәр. Ғаиләлә ниндәй тәрбиә алдығыҙ, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡый инегеҙме, ғаиләлә башҡортса һөйләштегеҙме?**

- Ғаиләлә ике телдә лә һөйләшһәк тә, мәктәптә башҡортса уҡығас, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡыу йәки улар менән танышыу проблема булманы, сөнки мәктәп программаһы буйынса ла, өйҙәге бай китапхананан да башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡыныҡ. Мин үҙемдең атай-әсәйемә теләгән китапты уҡыу йәки теләгән нәмәне эшләүҙә тыймағандары өсөн бик рәхмәтлемен. "Тамыр" балалар студияһына йөрөү ҙә, уның тапшырыуҙарында ҡатнашыу ҙа бала сағымдың яҡты бер хәтирәһе булып күңел түрендә йәшәй. Ә инде "Тамыр" балаларының ниндәй икәнен артыҡ аңлатып тороу кәрәкмәйҙер, моғайын.

**➔ Һеҙ - һөнәрегеҙ буйынса юрист. Башҡорттарҙа хоҡуҡи нигилизм көслө, тиген фекер менән килешәһегеҙме? Ғөмүмән, башҡорттарҙың үҙҙәренең боронҙан килгән тәрбиәһе үҙе үк милли хоҡуҡ нигеҙе булып тормаймы?**

- Еңел булмаған һорау. Минеңсә, теләһә ниндәй халыҡтың йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре үҙендә йәмғиәттә тотоу һәм йәмғиәт ҡоролошо ҡағиҙәләрен тәшкил итәләр. Шуға ла мин башҡорттарҙа хоҡуҡи нигилизм көслө тимәҫ инем һәм был хата фекер булыр ине. Һәр йәмғиәттә "Әгәр мин шул ҡағиҙәне боҙһам, нимә буласаҡ?" тигән кешеләр бар һәм буласаҡ. Башҡорт халҡы ниндәйҙер ҡағиҙәләргә йәки законлдарға башҡаларға ҡарарғанда һиҙгерерәк, тиер инем, сөнки милләттең "эске ҡануындары" (йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, менталитет, тәртип нигеҙендәге тәрбиә) ҡанға һеңгән. Әммә был дәүләт ҡабул иткән ҡанундар һәр саҡ ҡабул ителә, һүҙһеҙ үтәлә, тигәнде аңлатмай.

Бәлки, мәғлүмәт менән алышыу ваҡытының тиҙ ағышы һөҙөмтәһендә, һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашығыу сәбәпле, беҙ бер-беребеҙ менән аралаша, барлыҡ һорауҙарҙы уртаға һалып һөйләшә һәм уларҙы анализлауҙан туҡтағанбыҙҙыр. Шуға күрә, ниндәйҙер ваҡиғаларҙы аңлап етмәү, ашығыс, киләсәкте уйламаған ҡарарҙар ҡабул итеү килеп сыға ла инде. Был көндәлек тормошҡа ла, йәмғиәт тормошона ла берҙәй ҡағыла.

**➔ Ни өсөн эш урыны итеп мәҙәниәт өлкәһен һайланығыҙ һәм башҡорт милли мәҙәниәтен пропагандалау менән шөғөлләнәһегеҙ? Быны сәбәптәре лә барҙыр, моғайын?**

- Үҙ-үҙемә ошо һорауҙы ҡабатлап бирҙем дә, шундай һығымтаға килдем: моғайын, мәҙәниәт минең яҙмышыма яҙылған яҙмыштыр ул. Бала сағым ул ваҡытта Мәҙәниәт министрлығына ҡараған Йәштәр бульвары, 8 адресы буйынса урынлашҡан ятаҡта һәм БР Милли, ул ваҡытта Крайҙы өйрәнеү, музейында үтте. Беренсе тапҡыр сәхнәгә - Башҡорт дәүләт филармонияһы сәхнәһенә - "Тамыр"ҙа "эшләгәнемдә" 4-5 йәшемдә сыҡтым һәм бөгөн дә ошо ойошмала эшләйем. Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институтын тамамлауым мәҙәниәткә мөнәсәбәтемде үҙгәртмәне. Бала саҡтан алып һәр саҡ башҡорт мәҙәниәтенә бәйле булдым, үҫә килә был бәйләлек арта ғына төштө. Юрист белеме алһам да, бөгөн дә ошо өлкәлә эшмәкәрлегемде дауам итһәм дә, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө етәксеһе Ринат Рамаҙанов менән танышыуым ҡабат ошо юлға төшөрҙө.

**➔ Һәр быуын ололар менән йәштәр араһында ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡтар тыуып тора. Өфө башҡорттары араһында "атайҙар һәм балалар" проблемаһы бармы? Һеҙҙең миҫалда ул проблема нисек хәл ителә?**

- Был - мәңгелек һорау. Беҙҙең ғаиләлә бер ваҡытта ла ундай проблема торманы, килеп тыуған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеп, уртаҡ фекергә килергә тырыштыҡ. Хәҙер ҙә шундай принциптан сығып эш итәбеҙ. Ғаиләне төрлө быуын кешеләре тәшкил итҡәс, уларҙың һәр ҡайһының фекерен белеү ҡыҙыҡлы. Ә йәмғиәт - ҙур ғаилә ул. Шуға күрә, нимәнелер башҡалар өсөн хәл итмәйенсә, уртаҡ фекергә килеү тап ошо атайҙар һәм балалар проблемаһын юҡҡа сығарыр ине, минеңсә. Ни генә тимә, йәштәрҙә - дәрт һәм көс, ә ололарҙа - аҡыл һәм тупланған тәжрибә бар. Дәрт һәм көс, аҡыл һәм тәжрибә бер йүнәлештә булғанда ғына нимәгәләр өлгәшергә мөмкин, тип уйлайым.

**➔ Өфөлә иң яратҡан урындарығыҙ ниндәй?**

- Ниндәйҙер айырым урынды ғына яратам тип әйтә алмайым, әммә тыуған ҡаламда яратҡан мәлем бар - ул таң атыуы. Өфө лә, кешеләр ҙә йоҡоларынан уянмаған, әле ҡояш та офоҡ артынан ҡалҡмаған, тирә-яҡта һиллек, тынлыҡ, матурлыҡ һәм саф һауа! Был күренеште һәм тойғоно башҡа бер нәмә менән дә алыштырып та, уны аңлатып та булмайҙыр. Уны бары тик үҙеңә кисерергә генә кәрәк!

**➔ Әгәр ҡулығыҙҙан килһә, Өфөнөң башҡорт йәштәренә ниндәй мөмкинлек бирер инегеҙ?**

- Ә йәштәргә бер нәмә лә бирергә кәрәкмәй, бөтөн мөмкинлектәр бар. Бары тик уларҙы үҙ һәм йәмғиәт файҙаһына файҙалана белергә генә кәрәк. Уйлап ҡараһаң, беҙ бит булған бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырышмайбыҙ, нимәлер килеп сыҡмаһа, ҡул һелтәйбеҙ ҙә ҡуябыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

✓ *Әл Мәсүди бөрйәндәр хаҡында: "Бөрйәндәр батшалығы ҙур һәм киң. Был күп һанлы, ҡеүәтле һәм яугир халыҡ Византия, Хазар илдәре, төрөктәр менән һуғыштар алып бара", тип яҙа.*



ТАРИХ ҠАБАТЛАНА

# БӨЛӨРҺӨҢ ДӘ...

## юҡ, юрамайыҡ улай, сараһын табайыҡ!

**Күренекле рус яҙыусыһы Глеб Иванович УСПЕНСКИЙ (1843-1902), "Русские ведомости" гәзите хеҙмәткәре булараҡ, 1889 йылда Ырымбурҙан Өфөгә саҡлы юл үтә һәм Рәсәйҙең үҙәк губерналарынан Башҡортостанға күсеп килеүсе урыҫ крәҫтиәндәренең көнкүрешен өйрәнә. Әммә Башҡортостанда булыу һәм башҡорттарҙың хәлен белеү унда сикһеҙ ауыр тойғо ҡалдыра. Ул башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талауҙы үҙе күреп ышана.**
**Яҙыусының "Ырымбурҙан Өфөгә саҡлы" ("От Оренбурга до Уфы") исеме аҫтындағы яҙмалары ошо хаҡта. Әйткәндәй, Глеб Успенскийҙың был әҫәрендә әсенеп әйтелгән "Бөлөрһөң дә башҡорт, бөлөрһөң! Башҡорт тигәнең һис шикһеҙ бөлөр инде!" - тигән һүҙҙәрен башҡорт халҡының тиҙ арала юҡҡа сығыуы хаҡында әйткән, тип уйлаусылар бар. Әммә демократик ҡарашлы яҙыусы башҡорт халҡын бөлгөнлөккә төшөрөүсе сәбәптәр тураһында яҙа һәм илдең алдынғы ҡарашлы зыялыларын башҡортто был афәттән ҡотҡарырға, ерен талауҙы туҡтаттырырға, ярҙам итергә саҡыра, сөнки, бөйөк яҙыусының фекеренсә, башҡорт халҡы ерһеҙ ҡалһа, ысынлап та, бөлгөнлөккә төшәсәк.**
**Әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**



### 1."Башҡорт бөлгөнлөккә төшәсәк"

- Бөлөрһөң дә башҡорт, бөлөрһөң! Башҡорт тигәнең һис шикһеҙ бөлөр инде!

...Башҡорттоң һәләкәте бынан йөҙ йылдар элегерәк ерҙәрен йыртҡыстарса талауҙан башланған һәм беҙҙең быуатта үтә лә киң ҡолас алған, ә ысулдары тураһында яҙып тороуҙың кәрәге лә юҡтыр, сөнки, беренсенән, улар хаҡында хатта Н.В. Ремезов та үҙенең ике томлыҡ бик ентекле яҙған хеҙмәтендә күрһәтеп бөтә алмаған. Икенсенән, башҡорт ерҙәрен талау кеүек оятһыҙ шөғөл, ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрмәһәң дә, һәр намыҫлы урыҫ кешеһендә бер ваҡытта ла онотолмаҫлыҡ ауыр тәьҫир ҡалдыра.

Һатылған ерҙәре өсөн документтарҙың дөрөҫ түгеллеген иҫбатлап, ҡаршылашып маташыусы башҡорттар булһа ла, хаҡһыҙлыҡты иҫбат итеүгә өлгәшһә лә, улар ерҙәрен законлы рәүештә тағы һатыр ине, сөнки уларға аҡса кәрәк һәм уларҙы аҡса боҙҙо.

...Башҡорт үҙ һәләкәтен үҙе, ерен ете тинлек ҡуртымға биреүҙән башлаған, унан инде менәр десятинаны мең тингә биргән. Әлбиттә, ундай тиндәр уны артыҡ мәшәҡәттән ҡотҡарған, байрамса йәшәргә мөмкинлек тыуҙырған, шуның өсөн дә тиндәр урынына һумдар тәҡдим ителә башлағас, аҡсаға күҙ ҡыҙыуын тыя алмаған. Тиндәр өсөн генә оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға биреп тороу үҙе биләгән ерҙәрҙе мәңгелеккә һумдарға һатыуға әйләнгән. Мәңгелеккә ҡулдан ысҡынған ерҙәрен ҡалдырып, ул икенсе яҡтарға китеп йәшәргә мәжбүр булған. Әммә аҡсаға ымһындырыусылар бында ла килеп таптан уны.

Шулай итеп, тәүҙә арзан ғына хаҡҡа йыртҡыстарса талау башланһа, күсеп килеүселәр иһә аҙ ғына ҡиммәтерәккә ала башлаған уларҙың ерен. Талаусы ете тин бирһә, ят ерҙәрҙән күсеп килеүселәр етмеш тин тәҡдим иткән. Күсеп килеүселәргә ер аҙ тойолған һайын, башҡорт еренә тағы ҡул һуҙа һәм ҡуртымға һорай. Ҡуртым хаҡы түләүгә ҡарағанда, һатып алыуҙың отошлораҡ икәнен белгән һаҡалтайҙар "ер тураһында һөйләшергә" тағы килә.

Ерҙең башҡорт ҡулынан китеүен күргән күскенселәр үҙҙәре үк: "Бөлөрһөң дә башҡорт, бөлөрһөң! Башҡорт тигәнең һис шикһеҙ бөлөр инде!" - тип, уны ихлас йәлләй ҙә, сүкыныл алғандан һуң, ҡулдарына балта тотоп, эшкә тотона.

- Йә, Алла, фатихаңды бир! - тип, еңел һулағандан һуң "бөлгөнлөккә төшөрөлә барған" башҡорт ерендә үҙ йортон һалыу өсөн тәүге бүрәнә төбөнә балта саба башлай.

### 2. Кеше аяғы баҫмаған иркенлек

Ырымбурҙан Өфөгә саҡлы һуҙылған тотош юл һөйләп аңлатҡыһыҙ матур тойғо ҡалдыра. Иркенлек, тәбиғәт ҡеүәтенең муллығы - юл сатында күҙгә салынып ҡалған ғына ерҙәрҙә лә тойола. Ә ҡайһы ваҡытта ҡырҡ-илле саҡрымдар буйы гәжәйеп урындар аша үтәһең, хатта бер генә минутҡа ла күҙҙе йөморға ҡурҡаһың, матурлыҡты күрмәй ҡалыр төҫлөһөң. Кеше-маҙар йәшәмәгән, һабан теймәгән, балта эҙе ҡалмаған төбәк был. Әйтерһең дә, изге күңелле мәрхәмәтле тәбиғәт-әсә был ерҙәрҙә ҡасан булһа ла йәшәйәсәк балаһына мул һәм матур төйәк әҙерләп ҡуйған.

Әйтерһең дә, кеше бәхетле йәшәһен өсөн, хәстәрлекле әсә барыһын да алдан иҫәпкә алған. Сәсеү өсөн иркен, уңдырышлы баҫыу булдырған, үсемлектәргә ҡояш нурҙары тиҙерәк төшһөн дә шытым бирә һалһын өсөн ҡалҡыулыҡ хасил иткән, ҡуйы ҡупереп торған үләнле болондар уртаһында шишмәләр урғылып сыға, ҡайһы саҡта бәләкәй генә күл барлыҡҡа килә, ҡом сүллектәр яғынан иҫкән ҡоро елдәрҙән һәм һалҡын төньяҡтан килгән ыжғыр дауылдарҙан һаҡлар өсөн кәрәкле урындарҙа ҡуйы урмандар үҫтергән: имән, ҡайын, йүкә, ҡарама - һайлап алып теҙеп үҫтергән кеүек, бөтөнөһө лә һәйбәт сифатлы, япраҡтары һутлы, йылҡылдап тора. Әммә был урмандар болондо тотош ҡояштан ҡаплап, ҡараңғылап, күләгәләп тормай...

...Глеб Успенский үҙенең яҙмаларында артабан ошондай матур төбәккә Рәсәйҙең төрлө яҡтарынан күскенселәр ағылыуы, ерҙәрҙе күпмегә һатып алыуҙары, башҡорттар биләгән ерҙең һаман аҙая барыуы, ул ерҙәрҙә күпме ауылға, хуторға нигеҙ һалыныуы хаҡында һандар килтереп яҙа. Ошо һандар аҫтында башҡорт яҙмышы ята ла инде.

Тарих ҡабатлана. Бөгөн иһә Рәсәй иленән генә түгел, ә тотош донъя илдәренән халыҡ ағыла Башҡортостанға. Аҡсалы халыҡ. Тиндәргә генә түгел, долларҙарға ымһындыра торғандары. Биләгән ерҙәребеҙҙе үҙебеҙ файҙаланып, улар ымһындырған аҡсаны үҙебеҙ эшләп алыу йәйин ҡарамаһаҡ, ни булырын күҙ алдына килтереүе лә ауыр.

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Бөрйәндәр

Бөрйәндәр башҡорт халҡының иң эре һәм иң боронғо ҡәбиләһе һанала. Бөрйән ырыуы хаҡында күп һанлы риүәйәттәр, тарихи хәтирәләр һаҡлана. "Бөрйән" этнонимы "бүре" һәм "йән" өлөштәренән тора. Башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы - "Урал батыр" эпосы бөрйән ырыуы башҡорттарының ижад емеше. Башҡорт ғалимы С. Ғәлләмовтың китабында шулай яҙылған: Шүлгә (Шүлгән) үлгәндән һуң уның улы Бөрйән Шумер (Көнгәр) батшаһы булып, б.э.т. 2045-2037 йылдарҙа хакимлыҡ итә. Археологтар тапҡан Арҡайым (Йима - Арҡайымға нигеҙ һала) ҡаласығының бөрйән этнонимына бәйле икәнлеге асыҡланды".

Бөрйән бей - бөрйән ырыуы башҡорттарының башында тора. Уның улы - Бикән, уның улы - Урал, уның улы - Төйнә, уның улы Буранғол, уның улы - Башҡорт, уның улы - Тимер Ҡарабуға, уның улдары - Аллаяр менән Ҡотлояр. Ҡотлоярҙың улдары - Янһары менән Байһары, Аллаярҙың улдары - Монаш менән Ямаш.

Бөрйән ҡәбиләһенең монаш һәм яғылбай ырыуҙары иң боронғолары һанала. Әйткәндәй, ҡырғыҙҙарҙа ла жағылбай һәм манғыш ырыуҙары бар. Манғыш тувиндарҙа, жағылбай - ҡаҙаҡтарҙа, жағалтай ҡарағалпаҡтарҙа бар. Был яғылбайҙарҙың бер тамырҙан икәнлеген аңлата.

Беҙҙең эраның VI быуатында бөрйәндәр башҡа ырыуҙар менән берлектә Эфталий дәүләтен ҡыйратыуҙа ҡатнаша, тип яҙа Ибн әл Әсир (XII). Автор яҙыуынса, бөрйәндәр 588 йылда башҡа төрки ҡәбиләләр менән бергә Иранға һөжүм итә. Күрәһең, бөрйәндәр был заманда Төрөк ҡағанатының сәйәси тормошонда әүҙем ҡатнашҡан. Артабан уларҙың Византия менән бәйләнеше нығый.

VII-IX быуаттарҙа бәшгәрттәр һәм бөрйәндәр Уралдың төньяҡ-көнбайышында һәм көньяғында, Евразияның төньяҡ өлөшөндә, көнсығыш Уралдан Иртышҡа тиклем төйәкләнгән. Бөрйәндәрҙең бер өлөшө төньяҡҡа, Волга менән Уралға киткән һәм беҙҙең эраның 2-се меңйыллығы башында Волга буйы болғарының көньяғын, көньяҡ-көнсығышын биләгән.

Тарихи сығанаҡтарҙа бөрйәндәрҙең Башҡорт иленең көньяҡ-көнбайышына күсенеүе хаҡында ярайһы уҡ мәғлүмәт бар. С. Мерәсов яҙыуынса, бөрйәндәрҙең боронғо иле булып Ыҡ, Оло һәм Кесе Кинель, Дим йылғалары буйҙары һанала. Бөрйәндәрҙең ҙур өлөшө Һаҡмар йылғаһының өҫкө ағымына ултырған. Урал арьяғындағы тауҙар араһында улар тик йәйге осорҙа ғына йәшәгән. Уларҙың тау-урмандар араһында тороп ҡалғандары солоҡсолоҡ, малсылыҡ һәм һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән.

Ырыу башы Бөрйән бейҙең ейәндәре Аралбей менән Уралбей атлы булған. Уралбей Яйыҡ йылғаһы буйында, Аралбей көнсығыш далаларҙа йәйләгән. Р. Кузеев яҙыуынса, Бөгөлмә ҡалҡыулығы XIII быуатҡа тиклем бөрйәндәрҙең, үҫәргәндәрҙең һәм түңгәүерҙәрҙең үҙәге һаналған.

Әбү әл-фиҙа бөрйәндәр хаҡында шулай яҙа: "Был халыҡ бер кемгә лә баш әйә белмәй (яугир)..." X быуатта "Дәүерҙәр хаҡында хәбәрҙәр" тигән китап авторы Әл Мәсүди бөрйәндәр хаҡында: "Бөрйәндәр батшалығы ҙур һәм киң. Был күп һанлы, ҡеүәтле һәм яугир халыҡ Византия, Хазар илдәре, төрөктәр менән һуғыштар алып бара", тип яҙа.

**(Дауамы бар).**

✓ *Тик бына шул осорҙарҙа мине һәр саҡ бер һорау борсоно: совхоз үҙәге булған ошо ауылдың күп кенә башҡорт кешеләре, ә уҡытыусыларыбыҙҙың барыһы ла, ни өсөндөр, үҙ балаларын урыҫ мәктәбендә уҡытыуҙы хуп күрҙе.*



АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# АЛТЫН КӘҢӘШТӘР...

## гел оҙата барһын юлығыҙҙа

**Бала тәрбиәләгәндә ололарҙың кәңәштәрен тыңлау, уларҙың тәжрибәһенә таяныу, халыҡ педагогикаһының алтын аҡылын иҫтә тотоу, ҡулланыу беҙгә, йәштәргә, бик ныҡ ярҙам итә, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай. Бала саҡта атай-әсәйҙәрҙән ишетеп үҫкән кинәйәле әйтемдәр, тыйыуҙар, өйрәтеүҙәрҙе тормошта һәр аҙымда ҡулланырға тырышабыҙ. Шөкөр, тамырҙар өҙөлмәгән, рухи күсәгилешлек бар, тип шатланам. Бына шул әсәй-өләсәйҙәрҙән ишеткән, үҙем ҡулланған ҡайһы бер аҡылды яҙып үтәйем әле.**

- Иртә таңдан көн башлана, һәр көн яңылыҡтар, шатлыҡтар килтерһен өсөн яҡшы кәйеф менән йоҡонан тор, Аллаға шөкөр ҡыл, ярҙам һорап мөрәжәғәт ит.
- Таң менән ғауғалашма, тауыш күтәрмә, фәрештәләрҙе өркөтөрһөң.
- Уң аяғың менән тор, һәр ваҡыт кейенгәндә, ашағанда уң ҡулың алдан йөрөһөн.
- Икмәккә үрелгәндә, ишектән сыҡҡанда, эш хаҡы алғанда, "бисмилла" әйтеп йөрө.
- Иртә йәки кис эңерҙә өйөңә килгән кешегә асыҡ сырайлы бул, йомошон йомошлай алмаһаң да түрҙән уҙырға тәҡдим ит, һыйың булһа, һыйла - Хызыр Ильяс булыуы бар. Үҙеңдән башҡаны фәрештә, тип бел.
- Бөгөн барһың, иртән юҡһың. Мәңге йәшәйем, тип донъя көт, иртән үләм тиеп, тәүбә ит.
- Бер кемде лә рәнйетмә, кеше хаҡы, кешенең тир, күҙ йәше хаҡы һис кемде лә ебәрмәй. Эш эшләтһәң, кешенең тире ҡатмаҫ борон хаҡын түлә.
- Өй эсендә ыҙғыш сыҡмаһын өсөн кисәгене соҡома. Иртәнсәк булған аңлашылмаусанлыҡты кис онот. Бөгөнгө уй иртәнгә бармай, кисә шулай тинең бит, тип, үҙ-ара ғауға сығарма.
- Өйҙәген тышҡа сығарма, урамдағын, эштәген өйгә алып ҡайтма, йәғни хәбәр йөрөтмә, ошаҡ ташыма, кешенең ғәйебен соҡома, ғәйбәт һөйләмә.
- Бармаҡтар тигеҙ булмаһа ла, ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта, балаларың араһында тигеҙ мөғәмәләлә бул. Береһен үҫендереп, икенсеһен рәнйетеүгә юл ҡуйма. Ул да кеше балаһы бит, ул да кеше, тип үҙ-ара татыулыҡҡа өйрәт.
- Сабыр төбө һары алтын, Алланан сабырлыҡ һора.
- Илдең - итәге киң, һәр кемгә лә урын табыла. Төшөнкөлөккә бирелмә, һәр кем үҙенә яҙғанын үҙе күрәсәк.
- Гел бер төрлө булып тормай донъя, гел бер төрлө булмай кешеләр. Кешегә үс һаҡлама, асыу тотма, осрашҡанда сәләм бир, асыуыңды онот.
- Бар яраштыра, юҡ талаштыра, һаран булма. Һаран ике түләй, шуны онотма. Булғанын бүлешеп тотон.
- "Ярар"ҙың башы ауыртмай, йомош ҡушҡанда, юҡ, тип ҡырҡа ҡаршылашып, баш тартма.
- Баҫалҡыға баҡа ла баш, үҙеңде баҫыуға юл ҡуйма.
- Ярым-йорто эшләгәндән тик торғаның яҡшыраҡ, эшеңде урын-еренә еткереп башҡар.
- Тән һаулығы - рух ныҡлығында, һәр көн үҙ-үҙеңде камиллаштыр, китаптар уҡып, доғалар өйрән.
- Аҡтан ҡараны сүплә, йәғни күп уҡы, яҡшынан ямандлы айыра бел.
- Бер абынған урынға төкөрөп кит, йәғни урап үт, бер алдаған кешегә ҡабат ялынма, таянма.
- Иҫерекә һүҙ ҡушма, юлдаш булма, яманатың сығыр.
- Бишектәге бала бишкә төрләнә, бала саҡта шулай ине, тип кешене тикшермә.
- Телеңде, фекереңде яҡшы һүҙгә, алғыштарға, доғаларға өйрәт, күнектер, йәшлектәге тыйыуһыҙ тел, фекер, ҡартлыҡтағы мәғәнәһеҙ һүҙ яҡындарыңды рәнйетеп, үҙеңдән өркөтөп бөтөрөр.
- Алланан башҡа алла юҡ, Алланан башҡа табыныр зат юҡ. Кеше әсә ҡарынында яралғандан алып, ер-әсә ҡуйынына инеп ятҡансы һәр ғәмәле, һәр эше, һүҙе өсөн бер Алла ҡаршыһында үҙе генә яуап бирә. Һәр көнөңдө Аллаға мөрәжәғәт итеүҙән башла, кис ятҡанда ла, төндә уянғанда ла Алланы иҫеңә төшөр. Аллаға ышанған кеше өсөн был донъяла бер ҡурҡыныс юҡ.
- Ололарҙың һүҙен тыңла, китап һүҙенә ҡолаҡ һал. Бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләмә.

Шулай итеп, ата-әсә өлгөһө - алыштырғыһыҙ тәрбиә ысулы. Яҡшы ата-әсәнең балаһы үҙ ата-әсәһе хаҡында һәр ваҡыт яҡшы фекерҙә була. Ата-әсәһен хөрмәтләп иҫкә алмаған кешеләрҙән Алла һаҡлаһын.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА.**
**Баймаҡ районы Ғүмәр ауылы.**

**Беренсе сентябрь бала саҡтың оло бер һынылышы, шатлыҡлы ваҡиғаһы булып һәр кемдең хәтерендә ҡалалыр. Шул көн яҡынлашҡан һайын, минең дә тәүге мәртәбә мәктәп ишеген үрелеп асып, беренсе синыфҡа уҡырға килгәнем бөгөнгөләй булып күҙ алдыма баҫа. Инде ярты быуаттан ашыу ғүмер кисергән, байтаҡ ҡына тормош әсе-сөсөһөн татыған кеше күҙлегенән сығып, һәммәбеҙҙең күңеленә яҡын булып киткән ошо датаға бәйләнешле юҫыҡта фекер йөрөтөп алыу зарурлығын тоям.**

# ХАТАЛАР

## йәки Мәктәп йылдарымды



Алыҫта хеҙмәт итеп йөрөүсе ағайым алып ҡайтып бүләк иткән сатраш костюм-салбарымды кейеп, парта артына килеп ултырыуым, башҡа малайҙарҙың күкһел төҫтәге, махсус тегелгән мәктәп формаһына ҡарап күҙҙәрем ҡыҙыуы әле булһа хәтеремдә. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, бейек кәүҙәле, аяҡтарына йылтырап торған хром итек кейгән тәүге уҡытыусым Яҡуп ағай төп-төҙ баҫып килеп инеү менән класс бүлмәһендә (ул саҡта беҙ "синыф" һүҙен ҡулланмай инек) урынлашҡан тынлыҡҡа ҡәҙәре онотолмаған. Тыумыштан үҙем һулаҡай булғанғамы, уҡытыусы ағайыбыҙҙың беҙҙе ҡәләмде нисек тоторға өйрәтеүе лә иҫемдә ҡалған. Ағай күрмәгәндә генә ҡәләмемде һул ҡулға күсерә һалыуымды, шуның өсөн бер нисә мәртәбә шелтә лә алыуҙарҙы бала саҡтың күңелле хәтирәләренең береһе итеп һаҡлап киләм. Һәр дәресте ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп алып барған был уҡытыусы ағайыбыҙ Ер йөҙөндәге барса нәмәне белә икән, тип уйлайбыҙ, уның һөйләгәндәрен йотлоғоп тыңлайбыҙ, һәр бер һүҙен хәтерләп ҡалырға тырышабыҙ. Педагогика буйынса юғары белеме лә булмаған ана шул башланғыс ауыл мәктәбе уҡытыусыһының ябай ғына итеп һәр төрлө фәндәргә ҡарата тәрбиәләгән ихтирам тойғолары синыфташтарыбыҙҙың киләсәкке тормошонда, һәр ҡайһыһының ниндәйҙер булһа берәй һөнәр һайлауында күпмелер кимәлдә сағылыш тапҡандыр, моғайын. Математика, урыҫ теле, тарих һәм башҡа фәндәрҙән айырмалы, минең күңелемә иң яҡын булып урынлашҡаны "Туған тел" булыуында шигем юҡ. Уҡытыусыбыҙ өйрәткән һәр ҡағиҙә, мәктәп программаһы буйынса үткән һәр бер хикәйә тиерлек кисәгеләй иҫемдә, тиһәм дә артыҡ булмаҫ. Көр, ҡалын тауыш менән Яҡуп ағайыбыҙҙың матур, тасуири итеп шиғырҙар уҡығаны әле булһа ҡолағымда сыңлай. Хатта ул ятларға ҡушмаған шиғырҙарҙы ла тиҙ генә ятлап ала инем. Уларҙың күп кенәләрен әле булһа онотмағанмын, тик авторҙары ғына әллә ни хәтеремдә түгел. Мостай Кәримдең "Беренсе тамсылар" исемле шиғырын айырыуса оҡшаттым, нишләптер. "Көн буйы тын торған һауала ҡарайып болоттар ҡабара..." тип башланып киткән был шиғыр юлдары һаман телемдә әйләнә...

Бишенсе синыфҡа күрше ауылға уҡырға киттек. Ундағы урта мәктәптә башҡорт һәм урыҫ синыфтары бар. Артабан һәр предметты айырым уҡытыусылар алып барыуы баштараҡ ирмәк һымағыраҡ тойолдо, сөнки минең ул саҡтағы инаныуымса, һәр уҡытыусы кеше, үҙебеҙҙең Яҡуп ағай һымаҡ, бөтә фәнде лә уҡытырға тейеш, тип уйлай инем. Ағайҙар, апайҙар барыһы ла үҙ эшен күңел биреп башҡара, беҙгә төплө белем биреүгә бөтә көсөн һала. Һәр төрлө саралар ойоштороп, күп ваҡыттарын мәктәптә үткәргән был мөғәллим һәм мөғәллимәләребеҙҙең үҙ өйҙәрендәге шәхси тормошо бөтөнләйгә булмаған һымаҡ тойола.

Тик бына шул осорҙарҙа мине һәр саҡ бер һорау борсоно: совхоз үҙәге булған ошо ауылдың күп кенә башҡорт кешеләре, ә уҡытыусыларыбыҙҙың барыһы ла, ни өсөндөр, үҙ балаларын урыҫ мәктәбендә уҡытыуҙы хуп күрҙе. Русса яҡшы ғына һөйләшеп йөрөгән был малайҙар һәм ҡыҙҙар беҙгә - башҡорт синыфында уҡығандарға бер аҙ өҫтәнерәк ҡараған һымаҡ та тойола торғайны. Беҙ уларға башҡортса һүҙ ҡушабыҙ икән, яуапты мотлаҡ русса алабыҙ. Ә инде эстән генә әҙерләнеп, "уларса", йәғни, урыҫса әйтәм, тигәнсе, нимәһендер яңылыш әйтеп ебәреп, көлкөгә ҡалабыҙ. Бына шундай рус телле балаларға бер аҙ көнләшеп ҡарай инек. Беҙгә телебеҙ ҡағиҙәләрен, уның нескәлектәрен тырыша-тырыша өйрәткән башҡорт теле уҡытыусыларының да үҙҙәренең балалары менән тик урыҫса ғына һөйләшеүен күреп, ғәжәпләнеп бөтә алмай торғайным. Һис кем дә беҙҙе кәмһетмәне, әлбиттә, шулай ҙа беҙ, "башҡорт" балалары, мәктәп масштабында ниндәйҙер берәй дөйөм саралар мәлдәрендә (улар башлыса рус телендә алып барыла) үҙебеҙҙе урыҫ синыфындағыларға ҡарағанда бер аҙ түбәнерәк кимәлдә һымаҡ та хис иттек. Бәғзеләребеҙ алдынғы уҡыусыларҙан һаналыуыбыҙға ҡарамаҫтан, "уларса" иркенләп һөйләшергә ҡыймайбыҙ, яңылышып оятҡа ҡалыуҙан шикләнәбеҙ... Ана шул саҡ, ирекһеҙҙән, күптәребеҙҙең аңында "бер ҡасан үҫеп етеп, үҙебеҙҙең балаларыбыҙ булғас, уларҙы иң беренсе нәүбәттә мотлаҡ урыҫса һөйләшергә өйрәтеү "кәрәклеге" тойғоһо инеп оялағандыр, тип фаразлайым.

Хәҙерге һымаҡ, киң матбуғат сараларында туған телдең ни тиклем ҡәҙерле һәм мөһим булыуы хаҡында алып барылған нәсихәттәрҙе ул дәүерҙә бер мәртәбә лә ишеткәнем булманы. Күпселеге башҡорт балаларынан торған рус кластары өсөн ул саҡта, хәҙергенән айырмалы, мәктәп программаһында башҡорт теле буйынса хатта бер генә дәрес тә ҡаралмаған ине бит! Үҙгәртеп ҡороу мәлдәренә тиклем башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү юҫығында ниндәйҙер һүҙ алып барыуға ынтылыштарҙың, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, хупланмауына, әлбиттә, шул замандағы сәйәсәт сәбәпсе булғандыр. Кемдәрҙеңдер күҙлегенән сығып, "милләтселек" тип аталған күренеш менән көрәш самананан артып китеү һөҙөмтәһе лә булғандыр, тип уйлайым хәҙер. Арҙаҡлы шәхесебеҙ Зәки Вәлиди Туғанды "милләтсе", "халыҡ дошманы", тип һанаған, тарих дәрестәрендә беҙҙе тап ана шулай тип уҡытҡан осорҙар ине бит инде. Ул дәүер һәләтле шағир Рәми ағай Ғариповҡа ла ана шундайыраҡ юҫыҡта ғәйепләүҙәр тағып, уның ижадын ҡыҫырыҡлаған саҡтар менән тап килә шул. Әммә Ғабдулла Туҡайҙың "Эй туған тел, эй матур тел, атам-әсәмдең теле!.." тип башланып киткән шиғырын, бәхеткә, бер кем дә тыйманы. Күңелдәргә ныҡ инеп урынлашты ул. Туған телгә ҡарата һөйөү рухы һалынған был шиғри әҫәр һәммә милләттәр өсөн дә ҡиммәтле. Быны аңлай белеп аңлаған яҡташтарым да күп булғандыр, тип уйлайым. Әммә ошо шиғырҙың да иң һуңғы һәм (минең ҡарамаҡҡа) иң мөһим куплетын "киҫеп ташлаған" килеш беҙгә өйрәткәндәрен һуңыраҡ ҡына белдем:

**Эй туған тел! Һиндә булған иң әүәл ҡылған доғам:**

**Һаҡлаһын, тип, үҙемде үә ата-әсәмде Хоҙам.**

Динебеҙҙе "халыҡтар әфиуны" тип атап, "атеизм" тигән нәмә артынан һуҡыр рәүештә күпләп (хатта һөрлөгөшөп тип әйтергә лә тартынмайым) эйәреп барған замандар ине шул...

*✓ Бала кеше иң тәүҙә үҙ туған телен өйрәнергә һәм белергә тейеш. Урыҫса бер ни ҙә белмәгән атайым һәм әсәйем мәрхүмдәр ҙә "балаларығыҙҙы башҡортса һөйләштерегеҙ", тип тылҡып ҡына торҙо.*

# ӨҪТӨНДӘ ЭШ,

## хәтерләүҙән тыуған һығымталарым

Оҙаҡламай, "башлы-күҙле" булып, үҙебеҙ балалар тәрбиәләү йәшенә лә килеп еттек. Мин үҙем һәр саҡ, бала кеше иң тәүҙә үҙ туған телен өйрәнергә һәм белергә тейеш, тигән инаныуҙа булдым шулай ҙа, әлхәмдүлиллаһ. Урыҫса бер ни ҙә белмәгән атайым һәм әсәйем мәрхүмдәр ҙә "балаларығыҙҙы башҡортса һөйләштерегеҙ", тип тылҡып ҡына торҙо. Әммә әйтеүе генә аңһат икән ул. Балаларым үҫкән мәлем оҙайлы хәрби хеҙмәт иткән осорға тура килде. Хәрби ҡаласыҡта урамда, йәиһә балалар баҡсаһында башҡалар менән уйнап, һөйләшеп йөрөгән улдарымды туған телен оноттормай тотоп тороу, ысынлап та, еңелдән булманы. Ә инде мәктәп йәшенә етеп, улар уҡый-яҙырға өйрәнә башлағас, был мәсьәлә уғата киҫкенләште. Эштән бушаған мәлдәремдә балаларыма үҙем белгән ҡәҙәре башҡорт грамматикаһын да өйрәтергә тырыштым. Шул уҡ ваҡытта, рус телендә һөйләшеү уларға үҙ теленә ҡарағанда күпкә еңелерәк икәнен, балаларымдың "урыҫса уйлай" башлауын тойҙом. Йыш ҡына улдарым теге йәки был нәмәне урыҫ телендә әйтһә, уны башҡортса ҡабатлатырға мәжбүр була инем. Хатта бер мәл башҡорт телен өйрәнеүҙә күрһәткән тырышлыҡтары өсөн, әрме теле менән әйтмешләй, "поощрение" итеп, уларға туңдырма алырға бер аҙ аҡса биреү ысулын да ҡулланып ҡараным. Башҡортса шиғырҙар ятларға, йырҙар йырларға, ҡурайҙа уйнарға өйрәтеп, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын белгәнемсә ҡәҙәре балаларыма еткерергә тырыштым. Йыл да бирелә торған отпуск мәлдәрендә улар ҡартаталарында булалар һәм, әлбиттә, тик туған телендә генә һөйләшәләр ине. Өлкән улым Суворов исемендәге хәрби училищеға уҡырға ингәс, беҙгә башҡорт телендә генә хаттар яҙҙы. Ә кесе улымды, мәктәпте тамамларға ике йыл ҡалғас, алыҫыраҡ булһа ла, үҙебеҙҙең туған Башҡортостанға алып ҡайтып, интернат-мәктәпкә урынлаштырҙым. Башҡорт телен тағы ла яҡшыраҡ үҙләштерһен өсөн. Шул мәктәптә уҡыған дәүерҙә уның телгә бәйләнешле "ҡыҙыҡтары"н башҡорт теле уҡытыусыһы һөйләп көлдөрә торғайны. Инша яҙғанда "ғорурланам" тигән һүҙҙе "ғәрләнәм" тигән һүҙ менән бутағанын, йәиһә полиэтилен пакетты башҡортса "шыптыр тоҡ" тип яҙғанын әле булһа хәтерләп, көлөшөп алабыҙ. Талҡаҫ күле хаҡында яҙған бер иншаһында уның ошондай бер һөйләме хәтерҙә ҡалған: "...Талҡаҫ күле бынан егерме биш-утыҙ йылдар элек бик таҙа була торғайны (күпте күргән оло кешеләр хәтерләгән һымағыраҡ итеп һөйләм төҙөгән улыма ул саҡта ни бары 16 йәш ине). Ә хәҙер төрлө яҡтан туристар килеп, күл төбөнә шыптыр тоҡтар һәм башҡа нәмәләр ташлайҙар..." Туған телен тик ғаилә эсендә генә үҙләштергән был балалар өсөн, әлбиттә, бындай етешһеҙлектәр - кисерерлектәр, тип һанайым. Башҡорт теле грамматикаһын улдарыма тейешенсә кимәлдә өйрәтә алмауым, әлбиттә, үкенесле. Бар көсөмә тырышыуҙарыма ла ҡарамаҫтан, малайҙарым ошо көнгәсә туған телендә һөйләшеүҙә бер аҙ ауырлыҡ тоя һымаҡ. Минең яҙған әҫәрҙәремде уҡығында уларға ҡайһы бер һүҙбәйләнештәрҙе өҫтәмә рәүештә аңлатып бирергә мәжбүрмен.

Отставкаға сығып, Башҡортостанға йәшәргә ҡайтҡас, әүҙем рәүештә хаталар өҫтөндә эш башланым. "Балаларығыҙҙы фәҡәт үҙ телендә генә һөйләштерегеҙ, башҡортса уҡытығыҙ", тип, улдарыма аныҡ бурыс ҡуйҙым. Әлхәмдүлиллаһ, ейән-ейәнсәрҙәрем туған телендә һөйләшә. Был мәсьәләне хәл итеүҙә, әйтергә кәрәк, килендәр, йәғни балаларҙың әсәләре ҙур, хатта төп ролде уйнай, тиһәм дә яңылыш булмаҫ. Мәктәп йәшендәгеләре башҡорт мәктәбенә йөрөй. Медицина өлкәһендә эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, улдарымдың икеһе лә дин юлдында, бынан бер нисә йыл элек Мәккә ҡалаһына барып, Ислам диненең бишенсе терәген - хаж ғәмәлдәрен дә үтәп ҡайттылар, үҙ балаларын да имани рухта тәрбиәләргә тырышалар...

Бына шулай, ҡәҙерле туғандар, әллә ҡайҙарҙа йәшәп тә туған теленә ҡарата битараф булып китмәү һәр кемдең бурысы, тигән инаныуҙамын мин. Ә бит ситтә йәшәгән бик күп милләттәштәребеҙҙең балалары үҙ телендә һөйләшә белмәү түгел, хатта уны аңламай ҙа! Быға фәҡәт ата-әсә үҙе генә ғәйепле, тип уйлайым. Башҡа өлкәләрҙә йәшәп, балаларында диненә, теленә һәм милләтенә һөйөү тәрбиәләү, үрҙә әйткәндәй, еңел эш түгел. Әммә тырышҡан кеше һәр саҡ булдыра ала. Тик телде онотоу тигән насар нәмә сит яҡтарҙа йөрөгән кешеләрҙә генә түгел бит әле, йәмәғәт! Баштараҡ әйткәндәй, үҙ республикабыҙҙа йәшәп тә, балаларыбыҙға туған телен өйрәтмәй, башлыса, ана шул сәбәпле милләтебеҙҙе бөлдөрәбеҙ. Хәҙер ҡала ерендә йәшәгән кемдер берәүҙең (башҡорттоң!) балаһы башҡортса һөйләшә икән, быны беҙ мөғжизәгә һанайбыҙ, тиерлек. "Фәлән кеше үҙе Өфөлә үҫкән, ә үҙе тап-таҙа башҡортса һөйләшә!" тип ғәжәпләнәбеҙ. Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһында башҡортса һөйләшә белеү - ғәҙәти хәл булырға тейеш түгелме ни? Өфө, тип артыҡ алыҫтан алдым, йәмәғәт, Сибай, Баймаҡ, Ишембай, йәиһә Салауат һымаҡ башҡа күп ҡалаларыбыҙҙа ла шул уҡ хәл. Әлхәмдүлилләһ, телебеҙҙе (әлегә!) һаҡларҙай ауылдарыбыҙ бар. Әммә бөгөн тап-таҙа башҡортса һөйләшеп йөрөгән ауыл йәштәре эш эҙләү ниәте менән ҡалаларға барып төпләнә икән, уларҙың буласаҡ балаларының күптәренең ниндәй телдә һөйләшәсәге хаҡында уйландыра, йәмәғәт.

Иң тәүҙә ғаилә шарттарында, унан башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә телде өйрәнеүгә ҡағылышлы аныҡ хәлдәрҙе, кешеләрҙе миҫал итеп килтереү юлы менән үҙ фекерҙәремде ошо мәҡәләмдә сағылдырырға тырыштым да инде. Бындай миҫалдар менән тормошта һәр кемебеҙ таныш, тик күптәребеҙ уларға тейешенсә иғтибар итеп, уларҙы кәрәгенсә анализлап, йәшәйештә ҡуллана һалып бармай, үкенескә.

Ул ғына ла түгел, балаларының туған телен белеү-белмәүенә бөтөнләйгә битараф яҡташтарҙың күп булыуы эсте көйҙөрә. Бер таныштымдың биш-алты йәшлек ейәне ҡаланан ҡунаҡҡа килеп, русса һөйләшеп йөрөгәнен күргәс: "Башҡортса беләме был бала?" тип һорай ҡуйҙым. "Минең улым башҡортса һөйләшеп тә тормай ул!.." тип яуап бирҙе өләсәй кеше ғорур тон менән. Бына шулай, балаларының тик урыҫса ғына һөйләшеүенә "әллә кем" булып йөрөгән яҡташтарыбыҙ ҙа юҡ түгел. Ә хөкүмәткә килгәндә инде, ул телебеҙҙе тыймай бит, хатта башҡорт теле уҡытылмаған бер мәктәп тә хәҙер юҡ, тип әйтерлек! Закондар ҙа туған телде уҡытыуҙы күтәрә. Тик үҙ телен бөтөнләйгә белмәгән көйөнсә беренсе синыфҡа килгән балаларға мәктәптә ниҙер өйрәтергә маташыуҙың файҙаһы бик-бик самалылыр, тигән фекерҙе яҡташтарыма тағы һәм тағы ҡабатлағым килә...

Һөнәрем буйынса тел ғилеменән күпкә алыҫ булыуыма (һөнәрем - хәрби табип) ҡарамаҫтан, мин үҙем, шәхсән, ҡасандыр эшләгән хатамды төҙәтеү юҫығында тырышам һәм башҡа милләттәштәремде лә шуға өгөтләйем. Ә һеҙ ниндәйерәк фекерҙә?

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Тормошта һәр төрлө үрҙәргә үрләүгә башҡорт мәктәбендә уҡыуҙың һис бер тотҡарлыҡ булып тормауын раҫлап, ябай ғына миҫал килтерәм. Яҡуп ағай мәрхүм ҡулында башланғыс белем алып, башҡорт мәктәбен тамамлаған Йәлил исемле ҡустым хәҙерге көндә профессор, биология фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, былтыр хатта "академик", тигән юғары исемгә лайыҡ булды. Үҙенең өс балаһын да башҡорт мәктәбендә уҡытты, уларҙың барыһы ла юғары белемле, икәүһе инде фән кандидаты. Хәҙерге ваҡытта ейәне Ильяс Өфө мәктәптәренең береһендә башҡорт синыфында уҡый...**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# "КҮП ЭСМӘГЕҘ", ТИЕҮ...

## шул уҡ "Эсегеҙ" тиеүгә бәрәбәр түгелме ни?



**Эскелек хаҡында мәҡәлә баҫылмаған гәзит һандары ла юҡтыр, моғайын. Әҙәм балаларына илебеҙҙе солғап алған бына ошо афәттән ҡотолоу юлын күрһәтергә тырышып, киң мәғлүмәт сараларында йыш ҡына "араҡы эсеү менән саманан тыш мауығыуҙың", йәиһә "кәрәгенән артыҡ эсергә яратыуҙың" организмға ниндәй ҙур зыян килтереүе тураһында яҙалар.**

Тик ни өсөндөр бына ошо ағыу (хәмерҙе ысын исеме менән атайым) хаҡында һөйләгәндә, кеше организмына мотлаҡ кәрәк булған углевод (крахмал, шәкәр, һ.б.), май, витаминдар һәм башҡа матдәләр хаҡында һөйләгән һымаҡ һүҙ алып барабыҙ. Ысын! Әгәр беҙ "кәрәгенән артыҡ", йәиһә "саманан тыш" тигән һүҙбәйләнеште ҡулланабыҙ икән, тимәк, хәмерҙең "кәрәк" нормаһы барлығын, йәиһә ниндәйҙер "сама" менән эсеү зарурлығын күҙ уңында тотабыҙ булып сыға ла баһа!

Йәшерен-батырыны юҡ, йәмәғәт, тураһын әйтеү кәрәк. Беҙҙең быуын үҫкәндә беҙгә, ысынлап та, хәмерҙе "бөтөнләйгә эсеү ярамай", тип түгел, ә "эсә белеп, самалап ҡына эсергә кәрәк", тип өйрәттеләр. Хаталанмаһам, хәҙерге ваҡытта ла бөтә ил, бөтә донъя кимәлендә ана шундай фекер кешеләрҙең аңына ныҡ ҡына һеңдерелә. Магазиндарҙа икмәк, һөт, шәкәр һымаҡ аҙыҡ-түлектәр менән бер рәттән, мотлаҡ араҡы ла булырға тейеш, тип һанайбыҙ. Табындар, туйҙар ҙа шунһыҙ үткәрелмәй. Илебеҙҙе баҫып алған эскелеккә ҡаршы көрәш алып барылған хәлдә лә, хәмерҙе бөтөнләйгә бөтөрөү хаҡында түгел, ә уның хаҡын күтәреү йәиһә һатыу ваҡыттарын сикләү, йә булмаһа, хәмер, һыра шешәләренең "бәләкәйерек" булырға тейешлеге, уның менән "саманан тыш" мауыҡҡандарға ниндәйҙер яза биреү тураһында ғына һүҙ бара. Эскелектән кешеләр "саманан тыш" артыҡ үлә башлаһа, йәиһә, стандартлы араҡынан тыш, башҡа нәмә эсеп үлә икән, беҙ ғәйеплеләрҙе көмөшкәселәрҙән, хатта тәнгә һөртә торған дарыу һатыусы аптекаларҙан эҙләй башлайбыҙ. "Нормаль", йәки "сифатлы" араҡы эсеп, алкоголь сиренә, башҡа ауырыуҙарға һабышҡандар, йәиһә кинәт кенә үлеп киткәндәрҙе (улар илебеҙҙә йыл һайын меңәрләп!) нормаль үлеүгә һанайбыҙ. Йәнәһе лә, бындайҙар әлеге "сама" тигән нәмәне генә белмәгән. Халыҡты "сама белеп" кенә, "мәҙәни" эсергә өйрәтеүҙә ҡотолоу күрә бәғзеләр. Ә минеңсә, был - ифрат та яңылыш юл.

Ә тура юл - берәү генә. Ул да булһа, халҡыбыҙҙың ҡасандыр (бер быуат самаһы элек), кемдеңдер тарафынан тайшандырылған иманына ҡабаттан ҡайтыуы. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйы дин ҡанундары буйынса ғүмер итеп, иҫерткес эсемлектәргә ҡарата нәфрәт тойғоһонда бер-береһен тәрбиәләп йәшәгән кешеләр булған. Ә хәҙер беҙ ниндәйҙер "сама" тураһында гәп һатабыҙ. Изге Ҡөрьән Кәримдә Аллаһы Тәғәлә кеше үлтереүҙе, урлауҙы, зина ҡылыуҙы, рибаны (ростовщичество) һәм башҡаларҙы тыйған һымаҡ, иҫерткес эсемлектәрҙе (бөтөнләйгә!) хәрәм ҡылған, йәғни, тыйған. "Харама", тигән һүҙ ғәрәпсәнән - "тыйыу" тип тәржемәләнә. Ә әҙәм балаһы Аллаһы Тәғәлә тарафынан тыйылған ана шул хәмер тигән нәмәне үҙенсә "самалап" алған. "Самалап ҡына урлау", йәиһә, "кәрәгенсә, белеп кенә зина ҡылыу" һымағыраҡ килеп сыға бит был, йәмәғәт!

Беҙ һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылғанда "...Эй, Раббым Аллаһ, һинең ҡушҡандарыңды үтәп, тыйылғандарыңдан тыйылып ғүмер итергә насип ҡыл!" тип ялбарабыҙ. Аллаһы Тәғәлә "хәрәм" тип әйткән нәмәне "хәләл", тип, йә Ул "ярамай" тигәнде "ярай" тип әйтеү - ололарҙан оло гонаһ. Ә инде Аллаға, Ул вәғәҙә иткән ут ғазаптарына ышанмаған кеше өсөн, әлбиттә, барыбер. Был яҙғандарым, ҡәҙерле туғандар, Аллаһы Тәғәләгә ышанған кешеләр өсөн. Ә ышанмағандарҙы, ҡасандар һәм кемдер әйтмешләй, "Совет власына" өгөтләү файҙаһыҙ.

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

***✓ Әсәйемдең был һүҙенең хаҡлығына оҙаҡ та үтмәй төшөндөм. Ҡашҡаһыйырҙың ағы беҙгә генә түгел, яңғыҙ быҙауына ла теймәй башланы. Көн һайын ул ыҙан буйынан буш елен менән ҡайтты.***

# Һыйыр тураһында йыр

**Йыһат СОЛТАНОВ**



Табындарҙа ултырғанда ҡорҙаштарым миңә тынғы бирмәй: "Арабыҙҙан бер һин генә шағир булдың, шуның менән үҙ өҫтөңә оло бурыс-йөк алдың; һыйыр тураһында ла яҙ әле йыр!" - тиҙәр. Көтөп-көтөп тә, ул йыр һаман донъяға күренмәгәс: "Ҡорҙаш, ҡорҙаш, оноттоңмо ни үткәндәрҙе? Әгәр ул саҡтарҙа һыйыр булмаһа, бөгөн һин булыр инеңме лә, беҙ булыр инекме?" - тип битәрләйҙәр. Мин өндәшмәй генә башымды эйәм. Их, белһә ине улар эстә ни янғанын!..

Бына нисә йыл инде шул йырҙы ижад итә алмай интегәм. Өҫтәл тартмамда һарғайып бөткән ҡағыҙ ята, тынғы бирмәй үҙенә тарта. Көн дә мин, ҡырҡ эштәремде ҡуйып тороп, шул тартмаға һонолам, унда уңып бөткән зәңгәр ҡаралы яҙыу күрәм: "Һыйыр тураһында йыр". Күҙ һалам да шул яҙыуға, түбән эйелә башым, төшөп китә ҡәләмем...

1943 йылдың әсе яҙы ине. Бөйөк Ватан һуғышының ғәрәсәте өйҙән-өйгә ишек шаҡып йөрөгән саҡ. Миңә ун бер йәш, апайыма ун өс йәш. Һуғыштың башынан алынып, Башҡорт атлы дивизияһында йөрөгән атайым, Донбасс ерен фашистарҙан азат итеү өсөн дошман тылына тәрән рейдҡа ингән саҡта, дивизияның бик күп кешеләре менән куша ҡамауҙа ҡалып, хәбәрһеҙ юғалған. Әсәйем шул ҡайғыһынан һәм аслыҡтан миктәп, түшәккә йығылды, оҙаҡ һауыға алмай, саҡ йөрөй. Шулай итеп, донъя йөгө апайым менән минең елкәгә төштө.

Кистән буран ҡоторҙо, йөрәкте өҙөп, әсе ел һыҙғырҙы. Бер ҡатлы ғына тәҙрәбеҙгә шаҡ та шоҡ боҙло ҡар бәрҙе. Күҙ төбәп көткән берҙән-бер малыбыҙ - Ҡашҡа һыйырыбыҙҙың төнгөләккә тамағын тәрбиәләп, торор урынын томалап, аҙбарға ел һуҡмаҫтай итеп ҡапҡаһын нығытып ингәнбеҙ. Ләкин үҙебеҙгә тәҙрә төптәренән, һылауы ҡупҡан бүрәнә ектәренән ел бәрә. Һуҡыр шәм яҡтыһында өй эсендә көмөш туҙандай ваҡ-ваҡ ҡына ҡар бөртөктәре өйөрөлә. Буй урындыҡ башында, мөйөштә, әсәйем һаташып ыңғыраша. Мейес араһында бесәй балалары аслыҡтан сыйылдай. "Был ғына һеҙгә аҙ әле!" тигәндәй, өйҙөң һуңғы йылыларын һурып алып, мейес ҡалағын тыҡырҙатып, мөрйә илай...

Апайым да, мин дә, ауырыу әсәйем дә йоҡламай, һәр кем үҙ уйын уйлай. Бер өй эсендә ятһаҡ та, һәр беребеҙ айырым-айырым ҡар бураны йырып бара, буран ҡосағында интегә кеүек.

Апрель етһә лә, һаман яҙ булмай, һаман көндәр һыуына; лапаҫ башында - бесән, утынлыҡта утын бөтә, тип бошонам мин. Иртәгә бер ыумаслыҡ та он юҡлығын, иртүк тороп, билбау аҫты буш килеш тағы ла колхоз идараһына ашарға һорап барырға тура киләсәген көрһөнөп күҙ алдыма баҫтырам. Юҡ, быйылға мәктәпте ҡуйып торорға, ҡара яҙ башынан уҡ, билде ҡыҫа быуып, һабанға сығырға кәрәк, тигән ныҡлы уйға киләм.

Ә тәҙрәгә шаҡ-шоҡ бәреп, буран олой ҙа олой, мөрйә илай ҙа илай. Ниңә һаман яҙ килмәй, ниңә былай оҙон-оҙаҡ булды һуң әле был ҡыш? Тукта, тукта, был ниндәй моң, был ниндәй йыр? Тәҙрәләрҙең сеңләүен, мөрйәләрҙең илауын, йөрәктәрҙең һыҙлауын баҫып, ҡайҙан килеп керҙе әле был танһыҡ йыр? Ҡайһындай ҙа наҙлы йыр, ниндәйен дә сазлы йыр!

Күҙҙәремде аса алмай, хистәремде баҫа алмай, өй эсенә тулған мондо тыңлап ятам, йырҙы тыңлап ятам.

Күңелем менән мин ташҡын Һаҡмарымдың ап-аҡ яллы тулҡындарын күкрәгемә ҡыҫа-ҡыҫа ярһып барам - ата-бабам, үҙем эскән йәншишмәмдең, Һаҡмарымдың тәрән күкрәк моңо булып һыҙылып сыға был йыр.

Күңелем менән мин, тилереп, май айының аллы-гөллө сәскәләре атҡан йәшел болонлоҡта тәкмәс атып уйнайым, ата-бабам бесән сапҡан, усаҡ яҡҡан тыуған яҡтың әрем еҫен һулай-һулай йырлайым - ғәзиз ерҙең йөрәк моңо булып һыҙылып сыға был йыр.

Күңелем менән мин, елкенеп, бөркөт булып күккә ашам, ал Ҡояшты ҡарпып алып, Уралыма аҡ нур сәсәм, көнгә шытҡан бөрөләрҙең ысыҡлы күҙен һыпырып асам - йәшел йәшлек шаңы булып һыҙылып сыға был йыр. Тәпәш кенә өйөбөҙҙө тормош дәрте менән көйләп, ябайҙарҙан ябай ауаз булып һуҙыла был йыр. Беҙ белгән йыр, беҙҙең балалыҡ белгән йыр.

Мин, йөрәгем сығып китер һымаҡ ашҡынған хәлдә, йырҙың төштә түгел, өндә икәненә ышанып етмәгән хәлдә, күҙҙәремде асам. Эйе, эйе, беҙҙең өйҙә был минутта ысынлап та изге йыр: миңә ҡарап мөңрәп тора һыйыр. Үҙебеҙҙең һыныҡ мөгөҙлө, бөйрәкәй Ҡашҡаһыйыр. Алдында, бер ус бесән өҫтөндә, тояҡтары балауыҙ һымаҡ һапһары, һырт-арҡаһынан ҡатыҡ аҡҡандай ап-ак бөйрәкәй-билле, әрсеп һалынған шалҡан кеүек, еп-еүеш быҙау ята. Ҡашҡаһыйыр, мызылдап мөңрәй-мөңрәй, уның ҡыҙыл йөндәрен ялап ҡорота, үҙе мейес араһынан сығып килгән арыҡ инә бесәйгә асыулы күҙ ата. Бесәй, әҙәп һаҡлаған һымаҡ, ашығып урындыҡ аҫтына инеп китте, һыйырҙың да асыуы бөттө. Мыяубикә, ҡасҡан еренән сығып, түргә һикереп менде, әсәйем янына килеп, битен йыуа башланы: былдай изге минуттарҙа кем кенә ҡыуһын инде!

- Ниңә быҙау әбинешергә әйтмәнегеҙ? - тип шелтәләнем апайымды.

- Бик тәмле итеп йоҡлап ята инең шул, ҡыҙғандыҡ уятырға.

Их был ҡыҙҙарҙы!..

Ҡуңалтаҡ быйма эләктереп, тышҡа атылып сыҡтым, лапаҫ башына осоп мендем. Ыш иткән ел-тауыш юҡ, күк йөҙө, әсәйем йыуған тәҙрә өлгөһөләй, салт аяҙ ине. Баш өҫтөндә, ҡул һуҙым ғына тәңгәлдә, йоҙроҡтай эре йондоҙҙар, баҙырлап, ус төбөнә үрелә.

Көҙҙән үк айырым өйөп, Ҡиҫке сана табаны менән баҫтырып ҡуйған йәшел кәрешкә бесәндең бер күтәремен елдереп алып индем. Әсәйем ең һыҙғанған, һөт күнәген ялтлатып йыуып ҡуйған, инде хәҙер мөйөштәге әрһеҙ күнәккә ҡаҙандан йылы һыу һоҫа. Тәпәндәге барлы-юҡлы тоҙҙо асып ҡараны, ул беҙҙең иң һуңғы услам тоҙ ине. Бер аҙ уйланып торғас, бөтөргәнсе күнәккә ҡаҡты уны. Ҡулы менән болғатып, күнәкте апайыма бирҙе. Күҙҙәре төпкә батып, сарсап торған Ҡашҡаһыйыр апайым ҡулынан тоҙло һыуҙы бөтөргәнсе һемереп, күнәк төбөн тыҡырҙатып яланы. Тояҡланып имергә йәбешкән билдәш быҙауын, әленәнәле мөңрәй-мөңрәй, беләк буйы яғымлы-ялмауыр теле менән һыйпаҡлап, мин килтергән йәшел бесәнде умырып ашай башланы. Өйгә бөркөү сәскәле йәй айҙарының хуш еҫтәре таралды. Башына аҡ яулыҡ бәйләгән әсәйем, әйтерһең, тамам һауығып, һыйырҙың икенсе яғынан ниндәйҙер мәрхәмәтле, изге, нурлы йөҙ менән һауырға ултырҙы.

- Биргәненә шөкөр, асҡа үлмәбеҙ инде. Балаҡайҙарым-ҡолонсаҡҡайҙарым бәхетенә берүк иҫән-һау була күр инде, йондоҙом! - тип һөйләнде ул.

Инәһенең ыуыҙын имеп ҡанған быҙау, эскәмйәләй дүрт тояғын дүрт яҡҡа тарбайтып, ҡаҡ иҙәндә тая-тая, бесән янына килде, морононa сыбыҡ төртөлөп, буғай, сөскөрөп ҡуйҙы. Уның ҙур булып ҡурҡып асылған күҙҙәрен, бөрсөк-бөрсөк тирле тәңкә танауын, бәләкәс кенә дағалай ҡашҡа маңлайын әллә ҡайҙан үрҙән ҡапыл һалынып төшкән бик ҙур, яғымлы нәмә ауырттырып һәрмәләне. Быҙау был нәмәнең үҙен хәстәрләүсе инә теле икәнен, унан ҡурҡырға кәрәкмәгәнен аңланы, иркәләнеп, сабый муйынын һуҙҙы. Был минутта һыйырҙың да, быҙауҙың да күҙҙәре саф аяҙ, ерҙе ҡотлап тәҙрәгә нур ҡойған таңғы болотһоҙ күк төҫлө керһеҙ аяҙ ине.

Әсәйем беҙгә ҡарап алсаҡ йылмайҙы:

- Инде беҙ ҙә ҡара ергә иҫән-аман аяҡ баҫырбыҙ, балаҡайҙарым.

Күнәк төбөнә гөбөр-гөбөр ағылған һөт йыры өйгә яңы тормош килеүе, яҙҙың ыҙғар ҡышты еңеү мәҙехе булып яңғыраны.

Ысынлап та, ул йылда беҙгә уҡыуҙы тоҙлап торорға тура килде. Ҡара яҙҙан уҡ апайым - ер тырматырға, мин һабанда үгеҙ башы тоторға эшкә сыҡтыҡ. Һуғыш ғәрәсәте оҙаҡҡа һуҙылыу арҡаһында, колхозда мал-тыуар бөтөп, үгеҙ ҙә, ат та етмәгәнлектән, һабанға һыйыр егергә тура килде. Һаулыҡҡа туйына алмаған әсәйем быйыл еңелерәк эшкә - хат таратыусы итеп тәғәйенләнгәйне. Ул иртүк почтаға барырға йыйынған еренән туҡталып, ике ай ҙа тулмаған билдәш быҙауҙы ҡосаҡлап, мине тәүге яҙғы һабаныма Ҡашҡаһыйырыбыҙҙы етәкләтеп ебәрҙе, һабан артынан ҡашҡа билдәш быҙау - баҡырып, әсәйем күҙ йәшен һөртөп оҙатып ҡалды.

Һәй, ҡыйын булды ул йылдың һабандары!.. Ашарға юҡ, өҫкә юҡ, аяҡта сабата тишек. Бер ҡаранан бер ҡарағаса бил яҙмай эшләйһең. Малдар арый, йөрөмәй, ҡысҡыра-ҡысҡыра тамаҡ бөтә. Тик нисек тә һөрөргә, күберәк һөрөргә кәрәк, фронтҡа икмәк үҫтереп бирергә кәрәк. Һабан тотоусым - һалдат ҡатыны Мөнирә еңгә, ә мин малҡайҙарҙы ҡыуам. Үгеҙ ҡатарынан һонолоп тартҡан Ҡашҡаһыйыр, сыбыртҡы шартлаған һайын, ҡалтырап ҡуя, көбөләй елен-имсәктәре, атлағанда, тәртәгә бәрелеп ҡанап бара. Туҡтаған ҡыҫҡа араларҙа ул, ауыл яғына боролоп ҡарап, йөрәк өҙгөс итеп баҡыра, миңә билдәш быҙауҙың да алыҫ-алыҫтан илау тауышы ишетелгәндәй була. Һыйырҡайҙың монло күҙҙәренән ҡасып ситкә боролам.

- Эй йәнем, ниндәй гонаһ шомлоҡтары икән был? Гөбөрҙәтеп һауа торған быҙаулы һыйырҙы һабанға егеп йөрөйбеҙ... Гитлерҙың ғына ҡара башына төшһөн бының ҡоһоро!.. - тип әсенеп һөйләнә еңгәм. Бер ыҙанды тамамлап, икенсеһенә төшкән арала ул, һабанды туҡтатып, һыйырҙы туғара.

- Эй малҡайым, ниндәй бәхетһеҙ һин! - ти ул, Ҡашҡаның ҡанап торған ҡамыш имсәктәрен һыпырып. Ләкин һыйыр уны яҡын ебәрмәй, мөгөҙө менән һелтәй.

- Һауырға ине. Елене һыҙлай бит, - ти еңгәм, миңә төбәлеп ҡарап. - Кил, ҡәйнеш, үҙең тотоноп ҡара, булмаһа.

Малай башыма был әллә нисек тойола.

- Ниңә туғарҙың, - тим, үпкәләберәк уға, - егеүле килеш һауаһы ине.

Еңгәм, сирҡанып, көллө тәне менән ҡалтырап, кинәйәле күҙ ата:

- Тәүбә, тиң. Егеүле һыйырҙы һауырға, выжданымдан яҙмағанмын әле мин.

Өндәшмәй, һыйыр ҡатарына сүкәйеп ултырам, тартҡан һайын имсәктәрҙән безелдәп сыҡҡан ап-аҡ һөттө боҫланып ятҡан ҡара бураҙна төбөнә ағыҙам...

Кисен әсәйем арманһыҙ булып ҡайтҡан Ҡашҡаһыйыр менән мине эсе үткәшкән ҡашҡа билдәш быҙауҙы етәкләп ҡаршы ала. Әсәйем дә, мин дә өндәшмәйбеҙ, тик бахыр быҙау ғына, сабыйҙай үкһеп, имсәкте тарта, уларҙың буш икәнен тойоп зарлана. Тиҙҙән ул да тына. Ҡашҡаһыйырға колхоздан тейгән болғау нормаһын һалып, быҙауы менән ҡалдырабыҙ, үҙебеҙ, өйгә инеп, ҡара һыуға болғатылған ыумас эсергә ултырабыҙ. Апайымдың да, минең дә күҙҙәрҙе йоҡо баҫа, көнө буйы йөрөп талған табандар әсетеп һыҙлай. Әсәйем, беҙгә ҡарап, әкрен генә көрһөнә. Был минутта өсөбөҙ ҙә, моғайын, бынан бер ай ғына элек, ҡышты ҡыуып, ҡашҡа билдәш быҙау булып өйгә ингән яҙ йырын, тәпән төбө таҡырайып, өмөт һүнеп, һуңғыбыҙға таянғанда, көтмәгәндә, әкиәттәгеләй ҡабарып бешкән ыуыҙ ҡоймағын, иртән һемереп эскән боҫло ҡуйы һөттәрҙе, туҡып ҡапҡан бауырҙай ҡаты ҡатыҡтарҙы, аҡ һәм ҡыҙыл эремсектәрҙе иҫкә төшөрөп, шым ҡалғандыр.

- Күнәк биреп ебәрмәгәнһең, - тим мин, бер аҙ өнһөҙ ултырғас, әсәйемә ҡалҡынып. Ул тертләп ҡуя:

- Ә, нимә тиһең?

- Һыйырҙы һауырға, тим.

Әсәйем, ҡырҙағы Мөнирә еңгәйем кеүек үк ҡурҡынып, күҙҙәремә ҡарап һөйләнә:

- Тәүбә-тәүбә... Әлдә һауып эсмәгәнһең әле, балам. Гонаһ ул. Әсәйеңде бығаулап ҡуйып имеү менән бер...

- Әрәм бит.

- Эй, балам, әрәм иттек инде ул. Еккән сәғәтендә үк...

Әсәйемдең был һүҙенең хаҡлығына оҙаҡ та үтмәй төшөндөм. Ҡашҡаһыйырҙың ағы беҙгә генә түгел, яңғыҙ быҙауына ла теймәй башланы. Көн һайын ул ыҙан буйынан буш елен менән ҡайтты. Бер көн килеп һутлы ҡамыш имсәктәре ҡороно - мал ғынабыҙ һыуалды. Ҡашҡабилдәш быҙау күпме генә ярһып-ярһып имһә лә, мороно менән танҡыслаһа ла, ҡоро ҡалды ауыҙы. Шунан һуң ул инәһенән ситләшеп, дүрт тояғын ҡуша баҫып, башҡайын түбән эйҙе...

**(Дауамы бар).**

*✓ Артабан ҡурайҙа йәштәр яратып тыңларлыҡ заманса көйҙәр ҙә уйнарға ниәт иткәнмен. Был юҫыҡта ҡурайҙың да, ишҡурайҙың да киләсәге ҙур, минеңсә.*



*ИЖАДХАНА*

# ЙЫЛМАЙЫП ЙӘШӘҮСЕ ҠУРАЙСЫ

**Баймаҡ районы Темәс ауылы егете, "Далан" фольклор-эстрада төркөмө ҡурайсыһы, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы Илнур ҺИБӘТУЛЛИН башҡорт сәнғәтенә Хәмит сәсән, Әҙһәм Исҡужин, Юлай Ғәйнетдинов кеүек шәхестәр биргән данлы аранан. Бер нисә һорау биреп, талантлы ҡурайсының ижадханаһына күҙ һалып алайыҡ әле.**



**➔ Һинә ғүмер биргән һәм үҫең ҡорған ғаиләләрҙән башлайыҡ әле танышыуҙы.**

- Әсәйем Рәшиҙә Морат ҡыҙы Юнысова беҙҙе, Земфира апайым менән мине, яңғыҙы ҡарап үҫтерҙе, кеше итте (апайым сит телдәр белгесе, Бангладешта, Һиндостанда эшләп ҡайтты, хәҙер Өфө аэропортында юлсыларҙы ҡаршы алып, оҙатып ҡала). 5-се синыфҡа уҡырға Баймаҡ гимназия-интернатына барҙым. Унан һуң Сибай сәнғәт училищеһында һәм БДУ-ның Сибай институтында Нурғәле Ҡайыҡбирҙиндың ҡурай класында белем алдым. Юғары уҡыу йортона училищенан һуң килгәс, институтты 4 йылда экстерн ысулы менән тамамланым. Студент һабаҡташым Нәркәс Нурғәлина, Әбйәлил районы Ташбулат ауылы һылыуы, мине әрменән көтөп алды. Ҡайтҡас, оҙаҡҡа һуҙмай, гөрләтеп туй яһаныҡ. Камила исемле ҡыҙ үҫтерәбеҙ.

**➔ Илнур, беҙҙең оло тормош юлына аяҡ баҫыу ваҡытыбыҙ донъялағы, илдәге иҡтисади көрсөктән "сәскә атҡан" ғына сағына тура килде. Хеҙмәт юлың тураһында бәйән ит әле...**

- Институтта, беренсе курс аҙағында, Сибай филармонияһына эшкә урынлаштым. Баязит Байназаров бригадаһына эләгеүемде яҙмыш бүләге тип ҡабул иттем. Сибай филармонияһы мине оло сәхнәгә сығарҙы. Уҡыу менән бергә эшләп тә йөрөү студентҡа ниндәй оло тәжрибә биреүе тураһында тәфсирләп тормайым. Бары шуны ғына әйтәм: әлеге эш урыным студент саҡта уҡ тәҫмөрләнгәйне. 2011 йылда баш ҡалала үткән "Студент яҙы" республика фестивалендә лауреат исеме алғайным. Сығышымды билдәле режиссер Илшат Фәхертдинов оҡшатҡан, күрәһең. Концерттан һуң: "Уҡып бөткәс, Өфөгә филармонияға эшкә кил, ҡуш ҡуллап алырбыҙ", - тип өмөтләндерҙе. Дипломлы булғас, әрме хеҙмәтенә алындым. Унан имен-һау әйләнеп ҡайтҡас, ауылда йәй буйы мунса бураным да, Фәхертдинов ағайҙың телефон һандарын йыйҙым. Уның фекере үҙгәрмәгәйне: "Иртәгә үк килеп ет!" - булды яуабы. Мин яңы ҡалаға, яҡташыбыҙ, легендар башҡарыусы Хөсәйен Әхмәтов исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт филармонияһына юлландым. Бында ла уңыш йылмайҙы - "Далан" фольклор-эстрада төркөмөндә, Артур Туктағолов ҡанаты аҫтында, эш башланым. Ҡурайсы ағайҙар, таныш егеттәр: "Өфөлә тәүге өс йылда ғына ауыр ул - ҡалғаны һәүетемсә китә", - тигәйне. Был һүҙҙәр раҫ булып сыҡты. Тәүге айҙа бигерәк тә балалар баҡсаһынан ҡасып ҡайтырға теләгән баланан кәм күренмәгәнмендер инде: үлтереп ҡайтҡы килде. Өфөләрен күтәреп һуғып, ауылға, йә Сибайға ҡайтырға ла уйлап бөтөлгәйне, ләкин эшем, мине аңлаған коллективым, ҡурайҙы үҙенә күрә бер кинәнес менән тыңлай белгән тамашасылар миңә дәрт, ышаныс өҫтәгәндәй булды. Ғөмүмән, мин үҙемде даланлы, өләшлә, бәхетле кешеләр рәтенә индерә алам. Ҡайҙа барһам да, асыҡ сырайлы, яҡшы кешеләр генә осрай юлымда.

Студент саҡтағы тағы бер хәл тураһында әйтмәй булдыра алмайым. Ул хәл миңә бик әсе лә, татлы ла тормош һабағы бирҙе. Тәүге курста уҡып йөрөгәнемдә Октябрьский ҡалаһында йыл да уҙғарыла килгән Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамында ҡатнашырға булып киттем. Конкурс талаптары буйынса, һәр ҡатнашыусы баһалама комиссияһы алдында 100 билеттың береһен тартып сығарып, унда яҙылған көйҙөң тарихын һөйләп бирергә, уны еренә еткереп башҡарырға тейеш. Мин был конкурсҡа етерлек кимәлдә әҙерләнмәй барғайным. Бәхетле осраҡҡа өмөт иткәйнем. Әмәлгә ҡалғандай, белмәгән көй эләкте. Шул саҡ баһалама комиссияһы рәйесе Юлай Ғәйнетдинов миңә өҫтәмә билет алырға рөхсәт итте. Һәм мин үҙем белгән был көйҙө уйнап, тарихын һөйләп ишеттерҙем. Юлай Ишбулды улы мине, йәш кешене, бөтөнләй оятҡа ҡалыуҙан араланы һәм миңә ышаныс белдереп, иңемә яуаплылыҡ та һалды. Бынан ары үҙемә: конкурстар, концерттар алдынан мотлаҡ ныҡ итеп әҙерләнәсәкмен, тигән һүҙ бирҙем. Бөгөн мин исемлеккә ингән 100 йырҙың һәр береһен башҡара алам һәм яртыһының тарихын беләм, тип әйтә алам...

Һорауыңа кире әйләнеп ҡайтҡанда, яратҡан эш ялҡытмай ул, тимәксемен. Әле лә бына, төрлө тәҡдимдәр бар. Өфөлә тыуып, әле Мәскәүҙә йәшәүсе, исеме донъяға билдәле саксофонсы Олег Киреев менән дә ижади хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Уның Өфөлә һәм Мәскәүҙә үткән бер нисә концертында сығыш яһарға тура килде. Ҡурайҙа уйнау, нисек кенә ауыр булһа ла, ниндәй генә ентекле әҙерлек талап итһә лә, минең өсөн - күңел ялы, хатта, ағайҙарҙың һүҙе менән әйткәндә, йәшәү рәүеше лә.

**➔ Киләсәккә пландарың ниндәй?**

- "Далан"ға мин Рөстәм Шәриповтың урынына килдем. Уның ғүмере бик иртә өҙөлдө. Әммә ул шул тиклем бай архив ҡалдырҙы. Студияла уның әле тамашасыға сығарып өлгөрмәгән көйҙәре лә бихисап. Концерттарҙа мин ана шул көйҙәрҙе "Рөстәм Шәрипов репертуарынан" тип уйнайым һәм уйнаясаҡмын да. Арабыҙҙан иртә киткән рәссамдың (ә уны музыкалағы рәссам тип әйтеү урынлы булыр) ижад емештәре үҙ тыңлаусыһына яҙма булып түгел, тере моң булып, тере кеше башҡарыуында барып етһен, тим. Ярты йыл инде Ишморат Илбәковтың ишҡурайында уйнау кимәлемде шымартыу менән мәшғүлмен. Артабан ҡурайҙа йәштәр яратып тыңларлыҡ заманса көйҙәр ҙә уйнарға ниәт иткәнмен. Был юҫыҡта ҡурайҙың да, ишҡурайҙың да киләсәге ҙур, минеңсә. Әлбиттә, ишҡурай традицион ҡурайҙың вакант урынына дәғүә итмәй, итмәҫ тә. Һәр хәлдә, минең күңелемдә улар икеһе айырым төшөнсә.

Яҡын аралағы пландарға килгәндә, Әхәт Сабитов исемле клип төшөрөүсе йәш егет менән бер проект өҫтөндә эш башларға торабыҙ. Яҡын киләсәктә Өфөлә үҙ концертымды ойоштороу хыялымды ла күңелдә йөрөтәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илнур төшөнкөлөккә бирелмәй торғандарҙан. Нисә ҡарама, ҡурайын тотоп, йылмайып йөрөп ята. Әллә бөтөн аһ-зарын, хафалы уйҙарын дөртле ҡурай моңо ярҙамында "яндыра" беләме икән ул, тип тә уйлап ҡуяһың. Был һорау асыҡ ҡалһын әлегә...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

*ЗАУЫҠ*

*Фәнил БҮЛӘКОВ*

# ҮҘ-ҮҘЕМДӘ КИСӘ АҘАШҠАЙНЫМ...

* * *

Шәфәҡ һүнә... Йәнем төнгә күнә.
Тәнем генә йоҡлай, йәнем уяу.
Төн йоҡоһон йотҡан мең уйҙарым -
Йән әрнетер ыулы, утлы ҡаяу.
Төн ҡарая... Йөрәк кенә серҙәш,
Йән ыуалған сағы ярсыҡтарға.
Мин шәфҡәткә Ерҙә ышанамын
Баҫасаҡмын иртән ысыҡтарға.
Яланаяҡ бәпкә үләнендә
Таң нурҙарын ҡаршы алырмын.
Үҙ-үҙемдә кисә аҙашҡайным,
Мин үҙемде иртән табырмын.
Төн ҡыҫҡара... Йәнем минең уяу,
Йән һыҙлата төнгө уй-яныу.
Ҡара төндәр таңға ялғаналар,
Өмөт бирер йәнә уяныу.

* * *

Күкрәү күктең иңрәүҙәре генә,
Ул тауыштан нинә йәшенәң?
Өнһөҙ уты менән йәнде алған
Ҡурҡыр кәрәк утлы йәшендән.
Һағая бел, һаҡ бул кешеләрҙән,
Дуҫ тигәнде һына күҙенән.
Күңелендә өмөт емелдәһен
Биҙгәндә лә үҙең-үҙеңдән.
Ярһып аҡҡан тәрән йылғаларҙан
Тымыҡ ятыуҙары ҡурҡыныс.
Һин үҙеңә генә ихлас Ерҙә,
Шулай ҡулай, шуға йән тыныс.
Донъялыҡта һәр нәмәнең хаҡы
Ғүмер баһаһынан түбән дә.
Эҙҙәребеҙ Ерҙә юғалырҙар
Ысыҡ кипкән төҫлө үләндә.

* * *

Тағы яуа... шыбырлауы моңһоу,
Төнгә ҡуна килгән ямғырҙың.
Йәнде тетә меңәр утлы уйҙар
Ә күңелдә ҡыҙа яу ҡыры.
Күпме ҡорбан, ҡалҡты күпме ҡурған,
Күпме хыял унда күмелде.
Мин һаман да ихлас, дошманға ла
Ҡулды һуҙам ихлас күңелдән.
Ямғыр яуа, күктәр ергә ауа
Кеше көслө, сыҙам һынауға.
Мин тормошҡа үсле түгелмен ул,
Көсләмөн мин шуны аңлауҙан.
Тағы яуа, шыбыр-шыбыр ямғыр
Төндәремде таңға ялғай ҙа.
Мин үҙемә ихлас, йән тыныс та
Сыныҡҡанға ҡупҡан яуҙарҙа.

### Балам ғынам

Тупылдатып һөйөп алам, балам ғынам,
Татлы балым, бер аҙ әскелт балан ғынам,
Күңелемде моңға сорнар ҡошсоғом һин
Күҙҙәреңә һөйөү менән бағам ғына.

Яҙмышыма бүләк иткән далан ғына,
Саф күңеле аҡ ҡағыҙҙай - балам ғынам.
Наҙлы ғынам, бәпләп кенә яраттырған,
Йөрәгемә Хоҙай биргән дауа ғына.

### Тыуған яҡ

Батша бында ҡырыҫ гүзәллек,
Ҡылғандарҙы ярһыу ел тарай...
Сағыу гөлдәр яҙҙың нурлы күҙе,
Яҙ балҡышы йәнде мең арбай...
Гөжләп оса һары бал ҡорттары,
Алтын бөртөгөнә юлығып...
Сәскәләрҙән тама яҙғы шәрбәт
Татлы балдай ғына һығылып...
Күктә бейей моңло һабантурғай,
Йыр-моңонан йәнем арбалған...
Бер мөғжизә гәзиз тыуған яғым,
Хоҙай нурҙарынан яралған...

***✓ Арҡайымда ҡайһы бер нәмәләр онотолоп йә күскән ваҡытта төшөп ятып ҡалған. Бына минең алда Арҡайымда табылған ташһындың һүрәте тора. Ергә ултырған кеше үҙенең ҙур күҙҙәрен йондоҙҙарға төбәп, ҡатып ҡалған.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕҘЛЕК СИРГӘ КИЛТЕРӘ

■ Аҙ йоҡлаған балалар икенсе типтағы диабет менән йышыраҡ ауырый. Төнгө йоҡоноң һәр өҫтәмә сәғәте артыҡ ауырлыҡты юғалтыу, мускул массаһын үҫтереү һәм ҡандағы глюкоза кимәлен түбәнәйтеү менән бәйле. Яңы тикшеренеүҙәрҙә 9-10 йәшлек 4525 бала ҡатнашҡан. Улар йоҡо режимы тураһындағы һорауҙарға яуап биргән. Уҡыу йылы дауамында балалар уртаса 10,5 сәғәт йоҡлаған. Ҡатнашыусыларҙың йоҡо оҙайлығы 8-12 сәғәт тәшкил иткән. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәткән: башҡаларға ҡарағанда аҙыраҡ йоҡлаусыларҙа инсулинға тәьҫир түбәнәйгән. Бынан тыш, был балаларҙа артыҡ ауырлыҡ күҙәтелгән. Йәғни, аҙыраҡ йоҡлаусыларҙа икенсе типтағы диабет хәүефе ҙурыраҡ булған. Америка педиатрия академияһы тәҡдиме буйынса, 6-12 йәшлек балалар сәләмәт булыр өсөн 9-12 сәғәт йоҡларға тейеш.

■ Диабет сиренә ҡағылышлы тағы бер яңылыҡ. Күптән түгел "Diebetes Care" журналында яңы тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре баҫылып сыҡты. Унда әйтелеүенсә, диабет менән ауырығандарға туҡланыу режимын мотлаҡ күҙәтергә кәрәк. Тель-Авив университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 2 типтағы шәкәр диабеты менән ауырыған кешеләр иртәнге ашты ашамаһа, уларҙың ҡандағы глюкоза кимәле иртәнге ашты ашаған көн менән сағыштырғанда, төш мәленә үк 37 процентҡа күтәрелә. Шәкәр диабеты сире мәлендә был ҙур әһәмиәткә эйә, ти ғалимдар, сөнки һуңғы мәлдә күптәр иртәнге ашты ашамай. Ғөмүмән, иртән яҡшы итеп ашап, кисен ашты еңелсә генә ҡапҡылаған кешеләрҙең ҡандарындағы шәкәр кимәле нормала була.

■ Ә бына йоҡо проблемалары менән шөғөлләнеүсе белгстәр йоҡо сифатына иртәнге аш тәьҫир итә, тип белдерә. Уларҙың фекеренсә, иртәнге аш дөрөҫ булырға тейеш. Уянғас та ярты сәғәт эсендә 8 миндаль сәтләүеге һәм 2 финик ашағыҙ, тип кәңәш итә улар. Сәтләүек һәм кипкән емештәр аҡһым, май, углеводтарҙы балансҡа килтерә, шул рәүешле организм матдәләр алышыныуҙы һәм ҡандағы шәкәр кимәлен көйләй. Иртәнге аш яҡынса 150-200 калорий булырға тейеш. Бындай иртәнге аш һөҙөмтәһендә организм кисен мелатонин гормоны бүлеп сығарасаҡ. Гормон йоҡо өсөн яуаплы. Тыныс йоҡонан тыш, дөрөҫ иртәнге аш һимеҙлектән ҡотолорға ярҙам итә, сөнки был осраҡта матдәләр алышыныу тиҙлеге 10 процентҡа арта. Ә бына иртәнге аштан баш тартыу стресс горомны бүленеп сығыуға килтерә, был йоҡлап китеүгә лә ҡамасаулай.

■ Артыҡ ауырлыҡ йөрәк сәләмәтлегенә насар тәьҫир итә, тип белдерә Лондондың Импер колледжы тикшеренеүселәре. Һынауҙарҙа йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән яфаланыусы - 7600, шулай уҡ 10 мең сәләмәт кеше ҡатнашҡан. Белгестәр йөрәк-ҡан тамырҙары үҫеше хәүефен баһалаған. Юғары ҡан баҫымы юғары холестерин һәм бил үлсәменең ҙур булыуы йөрәк ауырыуҙары хәүефен ике тапҡырға күтәрә икән. Иң ҡыҙығы, бында кешенең тән массаһы бөтөнләй роль уйнамай. Шулай ҙа артыҡ ауырлыҡ йөрәк сирҙәре хәүефен 26 процентҡа күтәрә. Тимәк, "сәләмәт" һимереү юҡ, ул барыбер ҙә йөрәккә насар тәьҫир яһай.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

**Башҡорт халҡының күпләп йәшәгән төбәгендә бөгөн дә беҙ тулыһынса аңлап етмәгән урындар бар әле. Шуларҙың береһе булып Арҡайым ҡаласығы иҫәпләнә. Әлбиттә, был ҡаласыҡ тураһында күп яҙылған, ул төрлө яҡлап өйрәнелгән, уның тураһында байтаҡ мәғлүмәт тупланған. Ә шулай ҙа Арҡайым һаман да үҙ серҙәрен тулыһынса асырға ашыҡмай, буғай. Ә был ҡаласыҡтың баһаһы шунда: ул ғалимдарҙы тарихҡа яңыса ҡараш менән ҡарарға мәжбүр итә.**

# АРҠАЙЫМ СЕРҘӘРЕ...

## һаман асылмай әле





Арҡайым ҡаласығының мөһимлеген аңлар өсөн ҡараштарыбыҙҙы быуаттар төпкөлөнә ташлайыҡ. Бына беҙҙең алда бронза дәүеренә ҡараған Көньяҡ Урал далалары. Был осор беҙҙең эраға тиклемге III-II мең йыллыҡҡа тура килә. Бөгөнгө көндән сама менән 4 мең йыл элек була инде. Бына ошо осорҙа икһеҙ-сикһеҙ йәйрәп ятҡан далаларҙа, ғалимдар әйтеүенсә, ябай халыҡ ябай ғына тормош көтөп, һәүетемсә генә йәшәп ятҡан. Улар ғаилә ҡорған, йәшәү өсөн һунар иткән, балыҡ тотҡан, мал көткән. Туғандар бер тирәгәрәк уҡмашып, бер-береһенә терәк булып, ябай ғына торлаҡтар төҙөп көн иткән. Ҡыҫҡаһы, ғалимдар билдәләүенсә, ул осорҙа Көньяҡ Уралдың икһеҙ-сикһеҙ далаларында унда-бында һибелеп, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа йәшәгән.

Бына ошо дәүерҙә икһеҙ-сикһеҙ йәйрәп ятҡан далала бөтә яҡтан ныҡлы уйлап төҙөлгән Арҡайым исеме алған ҡаласыҡ та булған икән. Аптырамаған ерҙән аптырарһың шул. Уны өйрәнгән ғалимдар бөгөн дә күп һорауҙарға аныҡ ҡына яуап таба алмай аптырана. Беренсе һорау - был ҡаласыҡты кемдәр төҙөгән икән? Быға бөгөн дә яуап юҡ әле. Был ҡаласыҡтың төҙөлөш планын кем һыҙҙы икән - был һорауға ла әле яуап юҡ. Әммә шуныһы асыҡ: ул кешеләр бик аҡыллы булған. Сөнки ҡаласыҡтың төҙөлөшө бөгөнгө көндә лә күптәрҙе хайран ҡалдыра...

Арҡайымдың төҙөлөш планын күҙ алдына килтереү өсөн ҙур һәм бәләкәй булған ике велосипед тәгәрмәсе алығыҙ һәм уларҙы бер-береһенә ҡатлап һалығыҙ. Ҙур велосипедтың тәгәрмәсе буйлап түңәрәк һыҙып сығығыҙ. Бына Арҡайымдың тышҡы стенаһы барлыҡҡа килде. Хәҙер бәләкәй тәгәрмәсте ошо түңәрәккә һалып, тағы бер түңәрәк һыҙығыҙ. Күсәрҙәрҙең тап килеүе тураһында онотмайыҡ. Бына хәҙер ҙур түңәрәк эсендә бәләкәйерәк түңәрәк килеп сыҡты. Күсәр ятҡан урынды ла һыҙып ҡуяйыҡ. Бына хәҙер беҙҙең алда Арҡайым ҡаласығының ябай ғына макеты ята - ҙур түңәрәк, уның эсендә бәләкәйерәге, ә уртала күпкә бәләкәй түңәрәк.

Ҙур түңәрәк - ул Арҡайымдың тышҡы стенаһы. Түңәрәктең диаметры сама менән 145 метр. Стена бик ныҡ төҙөлгән. Уның киңлеге 5 метр, ә бейеклеге 5,5 метр. Ошо тышҡы стена буйлап "күп фатирлы" өйҙәр теҙмәһе киткән. Хәҙер ҡаласыҡ төҙөлөшөнә һеҙ үҙегеҙ ҙә төшөнә башлағанһығыҙҙыр инде. Тап шулай, тышҡы стена өйҙәрҙең бер яғы булып торған. Өйҙәрҙең эске стеналарын билдәләү өсөн велосипедтың ҙур тәгәрмәсен кире түңәрәккә һалығыҙ һәм уның сымдары буйлап араларын тигеҙ ҡалдырып, 40-лап һыҙыҡ һыҙып сығығыҙ. Бына хәҙер өйҙәрҙең эске стеналары билдәле булды. Өйҙәрҙең оҙонлоғо 10 метр тирәһе булған. Аңлауығыҙса, был өйҙәр дөйөм стена ысулы менән төҙөлгән. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, ике яҡтан ике күрше. Ҡаласыҡтың сиге буйлап апаруҡ ғаилә көн иткән. Үҙегеҙ баһа биреп ҡарағыҙ әле. Уның тышҡы түңәрәге буйлап 40-тан ашыу йорт урынлашҡан. Әлегә был йорттар һаны тулыһынса асыҡланмаған, тип иҫәпләй ҡайһы бер ғалимдар.

Хәҙер ҡаласыҡтың эске түңәрәгенә күсәйек. Уның диаметры 85 метр тәшкил итә. Ҡаласыҡтың эске стена һәм йорттар төҙөлөшө тышҡы стенаныҡынан әллә ни айырылмай. Айырма шунда - эске стенаны күпкә бейегерәк төҙөгәндәр. Уның бейеклеге 7 метр самаһы тәшкил итә. Ә стена киңлеген апаруҡ бәләкәсәйтә төшкәндәр. Ул 3 метр самаһы. Бына ошо эске түңәрәктә бөтәһе 27 йорт урынлашҡан. Йәмғеһе был ҡаласыҡта 70-80-гә яҡын ғаилә көн күргән. Апаруҡ ҙур булған икән Арҡайым.

Ҡаласыҡтың ҡап уртаһында урынлашҡан иң бәләкәй түңәрәктә алдан уйлап ҡалдырған. Был түңәрәк - дөйөм йыйылыш үткәреү майҙансығы. Ул апаруҡ ҙур булған, уның диаметры 25 метр тәшкил иткән. Бына ошо майҙансыҡта йыйылып, кәңәш ҡорғандар инде арҡайымдар.

Аңлауығыҙса, тышҡы һәм эске өйҙәр араһында урам ҡалдырылған. Билдәле, был юл түңәрәк булған. Бында ла барыһы ла уйланып эшләнгән. Хатта ҡыйыҡтан ағып төшкән ямғыр һыуы ла канауҙар буйлап ағып барып, айырым эшләнгән соҡорҙарға йыйылған һәм ҡаласыҡтың тыш яғына ағып торған. Иҫ китмәле, ҡаласыҡта барыһы ла уйлап эшләнгән. Хатта баяғы һыу аға торған соҡорҙар ҙа бит ҡайҙа етте шунда түгел, ә һәр 30 метр (!) һайын эшләнгән.

Шуға күрә өйҙәрҙең нисек уңайлы итеп эшләнгәне тураһында яҙып та тормайым. Иң ғәжәпкә ҡалдырғаны тураһында яҙмайынса бер нисек тә булмай - һәр өйҙөң үҙ ҡоҙоғо булған! 80-ләп өй, 80-ләп ҡоҙоҡ. Хайран ҡалырлыҡ инде. Ҡаласыҡ һөжүм итеү өсөн түгел, ә һаҡланыу маҡсатынан сығып төҙөлгән. Шуға күрә һәр өйҙә туп-тура ҡыйыҡҡа менә торған баҫҡыстар булған. Һөжүм була ҡалһа, йүгереп кенә менәһең дә ҡыйыҡ башына, уҡтан ата ла башлайһың. Ҡыҫҡаһы, бында йәшәгән халыҡ баҫҡынсылыҡ менән шөғөлләнергә уйламаған, ә бары тик үҙ йорттарын һаҡлау тураһында ғына ҡайғыртҡан.

Һүҙ ҙә юҡ, ҡаласыҡ бөтә яҡтан уйланып эшләнгән. Әммә Арҡайымда халыҡ ни бары 100 йыл самаһы ғына йәшәгән. Ни сәбәптәндер, улар ҡаласыҡты ташлап сығып киткән. Былай ғына ташлап сығып китмәгәндәр, улар ҡаласыҡты яндырып (бына һиңә, мә!) сығып киткән! Әллә ҡаласыҡ үҙе янып китте микән? Улай тиһәң, халыҡ тәүҙә барлыҡ нәмәһен төйнәгән һәм үҙе менән алып сығып киткән бит әле. Шунан халыҡ ҡайҙа сығып китте икән, ҡайҙа барып төпләнделәр икән? Алдан улар ҡайҙа йәшәне икән? Һорауҙар, һорауҙар, һорауҙар...

Ә шулай ҙа Арҡайымда ҡайһы бер нәмәләр онотолоп йә күскән ваҡытта төшөп ятып ҡалған. Бына минең алда Арҡайымда табылған ташһындың һүрәте тора. Ергә ултырған кеше үҙенең ҙур күҙҙәрен йондоҙҙарға төбәп, ҡатып ҡалған. Ә минең күҙҙәр ошо ташһынға төбәлгән. Хатта минең башыма: "Әллә йондоҙҙарҙан ергә төшөп, беҙҙе өйрәнгәндән һуң, кире йондоҙҙарға осоп китмәнеләр микән был арҡайымдар?"- тигән уй ҙа инеп сыға. Ултыра биргәс, уйлап ҡуям, арҡайымдар был ташһынды юрый ташлап киткәндәрҙер әле. Әйҙә, уйланығыҙ, беҙҙең серҙе аса алырһығыҙ микән? Әҙерәк кенә ярҙам йөҙөнән ошо ташһынды ҡалдырып китәбеҙ һеҙгә, йәнәһе...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**23 августан Һижри 1438 йылдың зөлхизә айы башланды. Был айҙың 10,11,12-се көндәрендә мосолмандарҙың иң изге байрамы - Ҡорбан ғәйете үткәрелә. Ул Мәккәгә хаж ҡылыу йолаһын тамамлап ҡуя. Ҡорбан байрамдың тәүге көнөндә, башлыса, байрам намаҙы уҡып, Аллаһы Тәғәләгә бағышлап ҡорбан салалар. Байрам намаҙы ҡояш ҡалҡҡандан һуң 40-45 минут үткәс, ҡумәкләп уҡыла.**



### Зөлхизә айының өҫтөнлөктәре

Рәсүлуллаһ (с.ғ.с.) әйткән: "Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыу өсөн зөлхизә айының беренсе ун көнөнән дә яҡшыраҡ ваҡыт юҡ. Бер көнлөк ураҙа бер йыллыҡ ураҙаға тиң, ә төндә ҡылынған ғибәҙәт Ҡәҙер кисәһендә ҡылынған ғибәҙәткә тиң". Аллаһы Тәғәлә был ун төн тураһында Ҡөрьәндең "Фәжер" сүрәһендә ант әйтә. Ғәләмәләрҙең күпселеге аталмыш ун төндөң нәҡ шул зөлхизә айының беренсе ун көнөн белдереүе менән бер тауыштан килешә. Улар айырыуса туғыҙынсы көнгә, йәғни Ғәрәфә көнөнә баҫым яһай. Ул көн ғәйет көнөнән алда килә. Был ун көндөң һәр береһенең өҫтөнлөктәре бар. Зөлхизәнең туғыҙынсы көнөндә (Ғәрәфә көнө) ураҙа тотоу - уҙған һәм яңы йылдың кәффәрәте, ә ғәйет төнөндә йоҡламайынса ғибәҙәт ҡылыу - оло сауаптарға ҡаҙаныу сығанағы.

### Ҡорбан кемдәргә үәжиб?

Ҡорбан ул үҙ аҡылында үә балиғ булған һәр мосолман өсөн үәжиб. Сәфәр хәлендә булмаған үә 595 грамм көмөшкә эйә булған һәр кем йәки асыл ихтыяждарынан артыҡ байлығы шул күләм көмөш баһаһына тиң булған һәр кем өсөн ҡорбан үәжибтер. Байлығы нисабҡа барып етмәһә лә, кемдер ҡорбан салһа, ул барыбер күп сауаптар ҡаҙаныр.

Нисаб күләмендәге (595 грамм көмөштөң бәйәһе) байлыҡҡа эйә булған бала йәки енел аҡыллы кешеләр һәм уларҙы бағыусылар өсөн ҡорбан үәжиб түгел. Шәриғәт хөкөмдәренән аңлашылғанса, ҡорбан мосафирға ла үәжиб түгел. Әгәр үҙенә ҡорбан үәжиб булмаған кеше ҡорбан салыу ниәте менән мал һатып алһа, ҡорбан уның өсөн үәжиб ғәмәлгә әйләнә.

### Ғибәҙәт хаҡы

Кеше үҙенең тәбиғәте буйынса һәр ваҡыт ғәмәленең емешен көтә. Картуф ултыртһа, уңышын көтөп ала. Бала үҫтерһә, тәүфиғына өмөт итә. Эшкә барһа, хаҡын талап итә. Әгәр эш хаҡын бирмәһәләр, эшкә бармай. Ултыртҡан үҫентеләренең уңышы булмаһа, икенсе тапҡыр ултыртып та тормай. Балалары тәүфиҡһыҙ булһа, ҡайғыра. Ә намаҙҙың һөҙөмтәһе нисек һуң? Ниңә ураҙа тоторға, саҙаҡа бирергә кәрәк? Һөҙөмтәһен тотоп ҡарап булмағанға күрә лә күптәр намаҙ уҡымай, ураҙа тотмай, мәсеткә йөрөмәй.

Ғибәҙәттең емеше Әхирәттә буласаҡ. Был турала Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә күп урында әйтеп киткән. Ахырҙа, был ғәмәл-ғибәҙәттәрҙең һөҙөмтәһе - мәңгелек йәннәттәр. Уның емешен донъяла көтөү дөрөҫ булмаҫ. Әлбиттә, донъяла ла буш ҡалмаҫбыҙ. Аллаһының ҡушыуын үтәү фани донъябыҙға ла тәьҫир итер, тормошобоҙ хәйерле булыр. Ә хаҡтың күбеһе Әхирәткә ҡалдырылыр, шуны халҡыбыҙ аңламай, ғибәҙәт ҡылыуҙың емешен донъялыҡта өмөт итеп, уны көтөп ала алмағас, баш тартып ҡуя. "Бөтөн донъя серәкәйҙең ҡанатына ла тормай", - тигән Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм. Донъялағы тонна-тонна алтын-көмөштәр, триллионлаған долларҙар, һумдар серәкәй ҡанатына ла тормай. Шуға ла намаҙҙарыбыҙҙың, ураҙаларыбыҙҙың, бөтөн изгелектәребеҙҙең әжере донъяла түгел, Әхирәттә биреләсәк. Быны донъяла биреп тә бөтөрөп булмаҫ ине. Сөнки намаҙ-ғибәҙәттәрҙең өҫтөнлөгө донъя хисабына һыймай. Әхирәттә генә уны күрербеҙ, иншаллаһ. "Ғәнкәбүт" (Үрмәксе) сүрәһенең 6-нсы аятында: "Әгәр берәйһе Аллаһ юлында тырышһа, тырышыуы үҙе өсөндөр. Дөрөҫлөктә Аллаһ, шикһеҙ, бөтөн ғаләмдәрҙән дә Бай, бер нәмәгә лә мохтаж түгел", - тиелгән.

Бөтөн тырышыуыбыҙ үҙебеҙ өсөн. Ниндәй генә изгелек ҡылһаҡ та, береһе лә онотолмаҫ. Уның әжерен Әхирәттә күрербеҙ, иншаллаһ. Рәсүлуллаһ (с.ғ.с.) әйткән: "Изгелек бер ҡасан юҡҡа сыҡмаҫ, гонаһтар бер ҙә онотолмаҫ, мәңге Тере Аллаһ бер ҡасан да үлмәҫ (йәғни язаһы шикһеҙ булыр). Шулай булғас, ни теләһәң, шуны эшлә, барыбер (насар йәки хәйерле) язаһын алырһың." Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм киҫәткән: "Ни ҡылһаң да язаһына әҙер бул", - тигән. Аллаһ ҡушыуын үтәү, Уның ризалығына илтә. Ә бөтөн ғаләм дә Уның әмеренә буйһона.

Был донъяла ҡылған изгелектәр беҙгә иң ауыр саҡта, ҡәбергә төшөп ятҡанда енеллек бирер. Тағы ла ауырыраҡ саҡта, Ҡиәмәт ваҡытында, Хисап көнөндә кәрәк булыр. Донъя, тип, бөтөн ғүмерен сарыф итеүселәр шул саҡ үкенер. Тапҡан байлыҡтары тороп ҡалыр, ә гонаһтар эйәреп барыр. Аллаһының асыуынан һаҡланайыҡ.

### Ҡорбан салыу ысулы

Кеше ҡорбанды үҙе салырға тейеш. Әгәр боғаҙлай белмәһә, башҡа берәүҙән боғаҙлата ала. Ҡорбан салынғанда уның шул урында булып, ҡарап тороуы хәйерлерәк. Ҡорбан салыу ниәтен күңелдән дә ҡылып була. Уны ҡысҡырып әйтеү шарт түгел. Ҡорбан малын боғаҙлағанда "Бисмилләәһи, Аллааһу Әкбәр" тип әйтергә кәрәк. Ҡорбан малын кешенән салдырһаң, эргәһендә баҫып торорға кәрәк. Хайуанды ҡиблаға ҡаратып һуҙып һалғас, түбәндәге доғаны әйтеү сөннәттер: "Иннә саләәтии үә нусукии үә мәхйәәйә үә мәмәәтии лилләәһи раббил-ғәәләмиин". Йәғни: "Намаҙым, ғибәҙәтем, тормошом һәм үлемем ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһ өсөндөр" ("Әнғәм" сүрәһе 162-нсе аят).

### Ҡорбандың көндәре үә ваҡыты

Ҡорбан салыу махсус билдәләнгән өс көн дауамында үтәлергә тейеш. Был көндәрҙән тыш, башҡа көндәрҙә ҡорбан салынмай. Ҡорбан көндәре - зөлхизә айының мотлаҡ 10,11,12-нсе көндәре. Ҡорбан ошо өс көндөң береһендә салынырға мөмкин, әммә беренсе көн әфзал, йәғни яҡшыраҡ.

Йәмәғәт намаҙҙары уҡылған ауылдарҙа, ҡала-ҡасабаларҙа ғәйет намаҙы уҡылғансы ҡорбан салыу рөхсәт ителмәй. Әгәр берәйһе ғәйет намаҙына ҡәҙәр ҡорбан салһа, намаҙҙан һуң уны яңынан ҡабатларға тейеш. Йәмәғәт намаҙҙары һәм ғәйеттәр уҡылмаған ауылдарҙа йәшәүселәр ҡорбанды зөлхизәнең унынсы көнөндә таң атҡандан һуң салырҙар. Беренсе көндә ғәйет намаҙы берәй сәбәптән уҡылмаған урындарҙа ҡорбан ғәйет намаҙы ваҡыты үткәндән һуң салынырға тейеш. Ҡорбанды төндә салыу рөхсәт ителһә лә, был хупланмай.

УҢЫШ ҠАҘАН

## ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Ни сәсһәң, шуны урырһың

Әгәр тормошта нимәлер ҡәнәғәтләндермәй икән, был хаҡта уйлауҙы һәм һөйләүҙе туҡтатырға кәрәк! Беҙ теләмәгән бөтөн нәмә ниңә оҙаҡ йәшәй? Сөнки ул иғтибарыбыҙҙың энергияһы менән туҡлана, ә инде канал ябылһа, үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Был осраҡта идеаль миҫал булып көнкүреш аңлашмаусылыҡтары тора. Мәҫәлән, ир йәки ҡатын өйгә ҡайтҡанда уҡ талашырға әҙерләнә, әммә уға яуап биреүсе булмаһа, бер ниндәй ҙә талаш сыҡмаясаҡ, сөнки кеше үҙ-үҙе менән талаша алмай бит инде. Ниндәйҙер унайһыҙ хәлдә ҡалһаң йәки гел генә шул хаҡта уйлаһаң, борсолоуың тирә-яҡтағыларға ла һиҙелә. Әгәр хис-тойғолар кимәлендә азат була алһағыҙ, теләһә ниндәй проблема үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Был түбәндәге принципты хәтерләтә.

### Ғәмәл ҡаршы тәьҫир кеүек үк

Һаҡланыуҙан туҡтамай тороп, кешеләр һиңә һөжүм итеүҙән туҡтамаясаҡ. Ни өсөн? Сөнки беҙ үҙебеҙҙең позициябыҙҙың ышаныслы булмауын тойғанда ғына һаҡлана башлайбыҙ. Мәҫәлән, эштә һеҙҙең турала төрлө имеш-мимеш тараталар. Әгәр үҙегеҙҙең ғәйепһеҙ булыуығыҙ тураһында ҡысҡырып йөрөһәгеҙ, тағы ла күберәк һөйләй башлаясаҡтар. Әгәр иғтибар итмәһәгеҙ, барыһы ла үҙенән-үҙе туҡтар. Быны менән үҙенде яҡламаҫҡа кәрәк тимәйем. Бары тик ҡаршы тороп, яфаланып һ.б. бары тик үҙебеҙгә иғтибар ғына йәлеп итәбеҙ. Бала сағымда телевизорҙан ҡаршылыҡ марштары тураһында репортаждар ҡарап, атайымдан: "Ниңә улар унда бер-береһе менән һуғыша?" - тип һорағаным иҫемдә. "Сөнки тыныслыҡ теләйҙәр!" - тип яуапланы ул. Һуғышҡа ҡаршы көрәшеүҙән файҙа юҡ. Тыныслыҡ төҙөргә кәрәк. Ҡыҫҡаһы, тормошоңдо ҡаршылыҡ демонстрацияһы итеүҙән файҙа юҡ. Нимәгә ҡаршы сығыш яһаһаң да, ул һиңә ҡаршы көс йыясаҡ ҡына. "Ҡаршы" түгел, ә "өсөн" булырға кәрәк.

### Үҙебеҙ хәл итәбеҙ

Хәл-торошҡа ҡарап, беҙ башҡаларҙы ниндәй итеп күрергә теләйбеҙ, шундай итеп күрәбеҙ. Кемдәрҙе яратырға теләһәк, барыһына ла түҙергә ризабыҙ. Әгәр кешеләр асыуыбыҙға тейһен тиһәк, уларҙың етешһеҙлегенә иғтибар йүнәлтәбеҙ. Беҙҙең башҡаларға мөнәсәбәтебеҙ уларҙың үҙ-үҙен тотошона түгел, ә беҙҙең көйләнешкә бәйле. Күптәребеҙ башҡаларҙа яҡшы нимә бар икәнен уйлау урынына, нимә улай түгел икәнен эҙләп баш вата. Һәр кеше икенсе кешенең уйында ике исемлек менән ҡылыҡһырлана. Беренсеһендә кире яҡтар һанала һәм ул бик ҡыҫҡа. Икенсеһен "бәхетһеҙлек йәки толдар исемлеге" тип атарға мөмкин. Ул бик оҙон, унда кешенең барлыҡ ыңғай сифаттары яҙыла. Кеше эргәбеҙҙә йөрөгәндә беҙ, нигеҙҙә, уның "ҡыҫҡа" исемлегенә сифаттарына иғтибар бирәбеҙ. Ә инде берәй бәхетһеҙлеккә осраһа йәки вафат булһа, иғтибарыбыҙ "оҙон" исемлекте барлай башлай. Әгәр исемлектәр шул тиклем мөһим икән, бәлки, уларҙың урынын алмаштырырғалыр? Бәлки, кеше иҫән саҡта уның ыңғай яҡтарына иғтибар туплап, беҙҙе ташлап киткәс кире яҡтарын иҫкә алырғалыр: "Ул үҙенең хырлауы менән йоҡларға ирек бирмәй ине"... Кире нәмәләргә иғтибар туплаусылар үҙҙәрен, мин реалист булырға тырышам, тип аҡлай. Ғәмәлдә ысынбарлыҡты үҙебеҙ булдырабыҙ. Тирә-яҡтағыларҙың ыңғай сифатына иғтибар йүнәлтегеҙ һәм мөнәсәбәттәрегеҙ шунда уҡ яҡшыра башлар. Был бик ауыр, ҡайһы берҙә ҡурҡыныс, әммә тырышлығығыҙ ыңғай һөҙөмтә бирер.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**

**(Дауамы бар).**

СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ...

# ИЖАДИ ЭШЕҢӘ - БАҺА



**Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы 2018 йылда мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә Республика Башлығының гранттарына конкурс иғлан итте.**

Гранттар музыка, театр, педагогия, хореография һәм һынлы сәнғәт, кинематография, архитектура һәм дизайн, музей һәм китапхана эше, художество кәсептәре, халыҡ ижады өлкәләрендә мәҙәни ҡиммәттәрҙе булдырыу, һаҡлап ҡалыу, арттырыу, таратыу һәм үҙләштереү, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының мәҙәни потенциалын һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү буйынса ижади проекттарға ярҙам итеү өсөн ойошторолған. 90-шар мең һумлыҡ 25 грант - мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә, 270 мең һумлыҡ биш грант ижади коллективтарға тапшырыласаҡ. Гранттар конкурс һөҙөмтәләре буйынса маҡсатлы бушлай субсидиялар формаһында бирелә. Гаризаның формаһы менән Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы сайтында "гранттар" бүлегендә танышырға мөмкин. Конкурс эштәре 1 сентябрҙән 1 октябрға тиклем Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығында (15-се бүлмә) ҡабул ителә һәм теркәлә.

# ТАНЫТМА ЛА МӨҺИМ




**Рәсәй киноһы көнөндә "Родина" кинотеатрында режиссер Таңсулпан Бураҡаеваға Рәсәй Кинематографистар союзының ағза танытмаһы тапшырылды.**

"Башҡорт кинематографы тиҙ үҫешә. Тағы ла күберәк профессионалдар республикала эшләргә ҡала, шуға күп кенә кино эшмәкәрҙәре Башҡортостан һәм Рәсәй Кинематографистар союзы ағзаһы була", - тип хәбәр итте Башҡортостан Кинематографистар союзы рәйесе Фәрит Ғәбитов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2017 йылда кинодраматургтар Шәүрә Шәкүрова һәм Дамир Йосопов, фильмдарҙы төшөрөүҙе ойоштороусы Гөлнур Ильясова Рәсәй Кинематографистар союзы ағзалары булды. Әлеге ваҡытта Мәскәүҙә тағы ла бер нисә дәғүәсенең эштәре ҡарала, республикала ыңғай яуап көтөп ҡалалар.

# МИЛЛӘТ-АРА СТАТУСТА




**Иглин районында "Урал мирасы" милләт-ара йәштәр мәғариф форумы үтте. Сара сиктәрендә лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре, команда эшен булдырыуға тренингтар, социаль проектлау буйынса дәрестәр, республика һәм Рәсәй кимәлендәге фән, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, сәйәсмәндәр, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары менән осрашыуҙар, спорт һәм күңел асыу саралары уҙҙы.**

"Форумдың милләт-ара статусын алыуына шатмын. Ҡатнашыусылар өсөн был теләһә ҡайны уңышлы кеше өсөн кәрәкле ҙур белем һәм оҫталыҡ алыу мөмкинлеге", - тип билдәләне форумдың ойоштороусыһы Даян Солтангужин.

Ҡатнашыусылар үҙ командаларында милләт-ара һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлек, туризм өлкәһендә ҡыҙыҡлы проекттар тәҡдим итте. Башҡорт тирмәһе менән бер рәттән, ҡатнашыусылар өсөн урыҫ, татар, сыуаш, мари, белорус һәм башҡа мәҙәниәттәр сатырҙары асылғайны. Уларҙа ошо халыҡтарҙың матди мәҙәниәте менән танышырға ғына түгел, милли ашһыуҙан ауыҙ итергә лә мөмкин булды. Шулай уҡ аттарҙа йөрөү һәм уҡтан атыу мөмкинлеге булды. "Урал мирасы" форумы үҙенең энергетикаһы, тынларға һәм һөйләргә генә түгел, эшләргә, үҙгәртергә, йәшәү сифатын күтәрергә, яңы проекттарға әҙер йәштәрҙең күтәренке кәйефе менән һоҡландыра. Был теләһә ниндәй үҙгәрештәрҙең төп нигеҙе була алған илебеҙҙең стратегик резервы", - тип һөйләй иктисад һәм идара итеү өлкәһендәге консультант Дмитрий Занин. Форум өсөнсө тапҡырға уҙғарылды. Быйыл ул "Территория смыслов на Клязьме" федераль форумында отоп алынған грантҡа ойошторолдо.

# ҠУРАЙ ҮҘЕН ТАНЫТА



**Башҡортостан музыканттары Санкт-Петербург тамашасыһы алдында ҡурай үләненән музыка ҡоралы яһап күрһәтте. Был турала "Башинформ" агентлығына "Йатаған" этно-төркөмө етәксеһе Илдар Шакир һөйләне.**

Коллектив "Донъя музыкалары" халыҡ-ара этник фестивалендә ҡатнашты. Байрамға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән (Карелия, Бүрәт республикалары) һәм сит илдәрҙән - Ҡаҙағстан, Франция вәкилдәре йыйылды. Сара Санкт-Петербург үҙәгендә, Шереметьев һарайында, хәҙерге Музыка музейында үтте. "Музыка музейында йыйылғандарға яҡшы тәьҫораттар, күтәренке кәйеф, шулай уҡ үҙебеҙҙең ҡул тамғалары менән "Йатаған" төркөмө дискын һәм үҙебеҙ эшләгән ҡурайҙы бүләк иттек", - тип хәбәр итте агентлыҡ әңгәмәсеһе.

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ БАЙРАМ



**Татарстандың Аҙнаҡай районында "Сатыртауҙа йыйын" VII халыҡ-ара төрки халыҡтары фестивале үтте.**

Төп сәхнәлә бөтә Рәсәйҙән фольклор коллективтар сығыш яһаны. Халыҡ байрамында Татарстандың Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Түбәнге Кама, Туҡай райондары башҡорттары, Түбәнге Кама ҡалаһынан "Сал Урал" башҡорт фольклор ансамбле һәм Яр Саллы ҡалаһынан "Гөлнәзирә" башҡорт халыҡ фольклор ансамбле сығыш яһаны. Башҡорттарҙың милли-мәҙәни автономияһы идараһы рәйесе Ғәли Хәсәнов: "Фестивалдә башҡорт тирмәләрен ҡуйҙыҡ, йолаларҙы күрһәттек, башҡа төрки халыҡтарҙан айырылып торған көнкүреш, мәҙәниәт менән таныштырҙыҡ", - тине. "Сатыртауҙа йыйын" фестивале 2011 йылдан уҙғарыла. Фестивалдең төп маҡсаты - төрки халыҡтарының мәҙәни хеҙмәттәшлеген, мәҙәни йолаларҙы, рухи байлыҡты тергеҙеү һәм үҫтереү, халыҡтарҙың бер-береһен аңлау һәм берләшеүен нығытыу.

# ИЛДАР ИЛДӘР ЯУЛАЙ



**Зальцбург ҡалаһында бөтә донъяға билдәле опера йырсылары - Рәсәй басы Илдар Абдразаҡов һәм Мексика теноры Роландо Вильязондың осрашыуы үтте.**

Сара ҡунаҡтар өсөн "Deutsche Grammophon" брендына яңы "Дуэттар" альбомы сығыр алдынан ойошторолдо. Альбомды рәсми рәүештә һатыу 22 сентябрҙә билдәләнгән. Ике опера йырсыларын - Илдар Абдразаҡовты һәм Роландо Вильязонды күп йыллыҡ дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек бәйләй. Тәүге тапҡыр йырсылар бергәләп сәхнәгә 2009 йылда "Лючия ди Ламмермур" Метрополитен Операһы постановкаһында сыҡты. Яңы альбом менән таныштырыу сараһынан һуң артистар дуэт программаһы менән Европа ҡалалары буйлап ҙур турға сығырға ҡуҙғалай. Маршрут Прага (20 ноябрҙә), Берлин (23 ноябрҙә), Баден-Баден (26 ноябрҙә), Штутгарт (29 ноябрҙә), Мюнхен (3 декабрҙә), Париж (9 декабрҙә) һәм Вена (12 декабрҙә) аша үтәсәк.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (13) дүшәмбе | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 18:29 | 19:59 | 21:29 |
| 5 (14) шишәмбе | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:26 | 19:56 | 21:26 |
| 6 (15) шаршамбы | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:24 | 19:54 | 21:24 |
| 7 (16) кесе йома | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 8 (17) йома | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 9 (18) шәмбе | 5:09 | 6:39 | 13:30 | 18:16 | 19:46 | 21:16 |
| 10 (19) йәкшәмбе | 5:11 | 6:41 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғафури районы Сәйетбаба ауылында йәшәүсе һөйөклө ҡатын, хәстәрлекле хужабикә, яҡшы әсәй, өләсәй һәм ҡәйнә булған **Рәшиҙә Барый ҡыҙы Ишмырҙинаны** 70 йәшлек матур юбилейы менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ.

Хоҙай һине сәләмәтлектән, күңел тыныслығынан, ҡартлыҡ бәхетенән айырмаһын. Ҡартайған көнөңдә балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең шатлыҡтарын уртаҡлашып, ҡәҙерхөрмәт күреп, беҙгә терәк булып, оҙаҡ йәшә. Һин булғанға беҙгә тыныс, донъя бөтөн.

**Иң изге теләктәр менән ире Закир һәм ҡыҙҙары, кейәүҙәре, улдары, килендәре, ейән-ейәнсәрҙәре.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА



# АҠЫЛ ЭЙӘЛӘРЕ...

## ете серҙе мотлаҡ һаҡларға ҡуша

• Иң мөһим серҙәрҙең береһе - алдағы йылдарға ҡорған пландар. Ниәтегеҙ бойомға ашмайынса, улар тураһында береһенә лә һөйләмәгеҙ. Уйлап еткерелмәгән, "сей" идеяға ҡаршылыҡ уйлап табыу бик еңел, бөтөнләй тормошҡа ашмаҫлыҡ итеп ауырлыҡтар тыуҙырыуҙары бар.

• Аҡыл эйәләре сер итеп һаҡларға кәңәш иткән икенсе нәмә - ул һеҙ ҡылған изге эштәр. Яҡшы эш был донъяла бик һирәк күренеш, нәҡ шуның өсөн уны күҙ ҡараһылай һаҡларға кәрәк. Яҡшы эштәрегеҙ менән маҡтанмағыҙ, изгелектәрегеҙгә яуап булып ҡайтарылған яҡшылыҡтарҙы ғорурлыҡ "урлауы" бар.

• Сер булып ҡала торған өсөнсө нәмә - ул һеҙҙең донъя рәхәтенән ваз кисеүегеҙ тураһында мәғлүмәт. Аҙ туҡланыу, етерлек йоҡламау, шәхси тормош тураһында уңға-һулға хәбәр һөйләп йөрөргә ярамай.

• Шулай уҡ, батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ күрһәтеү хаҡында ла телгә алмау хәйерле, тип һанай аҡһаҡалдар. Кемгәлер тышҡы һынауҙар бирелә, берәүҙең рух көсөн һынай яҙмыш. Тышҡы һынауҙар күҙгә күренгән эш, шуға бының өсөн кеше бүләктәр ала. Эске кисерештәр сит кешегә билдәһеҙ, көслө рухлы булған өсөн наградалар ҙа бирелмәй.

• Сер итеп һаҡлай торған бишенсе нәмә - ул рухи, дини белем. Рухи белемдең кимәлдәре төрлө була һәм кеше үҙаллы таҙарынып, аң кимәлен үҫтереп кенә был белемгә эйә булырға мөмкин. Яңы ғына рух һәм дин асылына төшөнә башлаған кеше ашығыс рәүештә бүтәндәр менән ошо белемен уртаҡлашырға теләп хаталана. Изге ниәттән әйтелгән һүҙҙәр был кимәлгә күтәрелеп етмәгән кешенең башын бутай һәм яҡшылыҡ килтерер урынға зыянлы булыуы бар.

• Бүтәндәр менән бүлешергә ярамаған алтынсы сер - өйҙә ҡупҡан низағтар, ғәмүмән, ғаилә тормошо тураһындағы мәғлүмәт. Ғаилә эсендәге проблемалар хаҡында ни тиклем әҙерәк кешегә һөйләһәң, шул тиклем татыу, тыныс йәшәрһегеҙ. Ыҙғышыу, әрләшеү - аралашыу барышында тупланған негатив энергиянан арыныу.

• Шулай уҡ аҡһаҡалдар ишетеп белгән насар хәбәрҙе башҡаларға һөйләмәскә кәңәш итә. Урамда аяҡ кейемен бысратырға мөмкин булған кеүек, аңды ла бысратырға була. Юл ыңғайында ишеткән бөтә мәғәнәһеҙ хәбәрҙе өйгә ҡайтып һөйләүсе ишек алдында бысраҡ аяҡ кейемен сисмәй үткән кешенән бер ере менән дә айырылмай.

АФАРИН!

# "МИРАҪ"ТАР...

## халыҡ-ара фестивалдә

**Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле сит илдән гастролдәрҙән ҡайтты. Алдан "Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, коллектив Венгрияла "Summerfest" халыҡ-ара фольклор фестивалендә Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының традицион мәҙәниәте менән таныштырҙы. Өфө артистарына маҡтаулы бурысты Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто йөкмәтте.**

Фольклор байрамының һәр көнө сағыу ваҡиғаларға һәм тәьҫораттарға бай булды, тип уртаҡлашты "мираҫтар". 14 августа Сазхаломбатт ҡалаһында рәсми рәүештә фестивалде асыу һәм үҙәк урамдар буйлап коллективтар шарады була. Шунда уҡ Изге Стефан майҙанында коллективтарҙың сығыштарынан тыш, халыҡ ижады йәрминкәһе ойошторола. Башҡортостан күргәҙмәһе милли кейемдәр, биҙәүестәр һәм төрлө сувенир продукцияһы менән барыһының да иғтибарын йәлеп итә.

Биш көнлөк фестиваль программаһында ансамбль Сазхаломбатт, Тёкёль, Рацкеве, Будапешт ҡалаларында, шулай уҡ Дунай йылғаһы буйлап йөрөгән иң ҙур теплоходта ла сығыш яһай. Тамашасыларға "Сатыр эргәһендә", "Йәшлек", "Оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙар", "Солтанаҡов" кеүек - башҡорт, "Калинка" һәм "Себер" рус бейеүҙәре тәҡдим ителә. Венгрияға ансамблдең бәләкәй төркөмө генә барыуына ҡарамаҫтан, уларҙың сығыштарын фестиваль директоры Джозеф Сигатвари һәм Сазхаломбатт ҡалаһы мэры Михай Везер юғары баһалай. "Мираҫ" ансамбле юғары башҡарыу кимәленә һәм ҙур ижади потенциалға эйә, тип билдәләй улар. Фестиваль сиктәрендә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитовтың Сазхаломбатт ҡалаһы етәкселеге менән рәсми осрашыуы була. Осрашыуҙа Өфөлә 2020 йылда үтәсәк бөтә донъя Фольклориадаһын ойоштороу мәсьәләләре тикшерелә.




ВИКТОРИНА

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы Хисмәтулла Юлдашевтың тормошо һәм ижады буйынса викторина һорауҙары тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Ырымбур өлкәһенең Туҡ-Соран буйындағы Иҫәнгилде ауылында тыуған Хисмәтулла Юлдашев ҡайһы әҙип менән ауылдаш?**

**а)** Мөхәмәтша Буранғолов; **г)** Рауил Бикбаев;
**б)** Ғабдулла Амантай; **д)** Дауыт Юлтый.
**в)** Сәғит Агиш;

**2. Авторҙың түбәндәге шиғыр юлдарында төшөп ҡалған һүҙҙе табығыҙ. "Ҡайҙа йөрөһәм дә, эҙләйем мин**
**Башҡорт йөҙлө,**
**Башҡорт ..."**

**а)** күҙлене; **в)** һүҙлене.
**б)** йәнлене;

**3. Һәр яҙыусының әҫәрҙәрендә уның биографияһы бер ни тиклем сағылыш таба. Хисмәтулла Юлдашев хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенә үҙе күргән-кисергән хәлдәргә нигеҙләнгән ниндәй яңы теманы индерҙе?**

**а)** афғансы яугир; **в)** нефтселәр тормошо.
**б)** себерҙәге башҡорт;

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул Хисмәтулла Юлдашевтың автографы ҡуйылған "Һуҡмаҡ" исемле өр-яңы китабын алып һөйөнәсәк. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса, Миләүшә Ҡаһармановаһың автографы ҡуйылған "Күңелем йылы теләй" исемле китабын Өфө ҡалаһынан Айһылыу Сафина отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Рубриканы Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҮҘЕБЕҘҘЕН ҠЫҘҘАР!



• Чебоксар ҡалаһында "Мисс туризм России" Бөтә Рәсәй конкурсы тамамланды. Унда 30 төбәк һылыуҙары ҡатнашты. Ун алты йәшлек башҡорт һылыуы Рената Нәҙершина "Иң яҡшы милли костюм һәм үҙ төбәгең менән таныштырыу" этабында еңеүсе тип иғлан ителде. Ҡыҙ сәхнәгә башҡорт дизайнеры Альбина Жерлицынаның костюмында сыҡты. Рената Нәҙершина - "Берҙәмлек" лицейы уҡыусыһы, "Мисс Башҡортостан-2017" республика матурлыҡ конкурсы финалсыһы, "Мини-Мисс Өфө" конкурсы еңеүсеһе. Конкурста буйы 172 сантиметрҙан кәм булмаған 16-24 йәштәге илебеҙ ҡалаларында һәм төбәктәрендә уҙғарылған матурлыҡ конкурсы финалсылары һәм еңеүселәре ҡатнашты. Конкурстың ойоштороусыһы - "Volga Models" модель агентлығы.



• Өфөлә "Башҡортостан һылыуы" II республика матурлыҡ конкурсында еңеүсе иғлан ителде. Ул - Баймаҡ ҡалаһынан 19 йәшлек Раушания Исҡужина. Ҡыҙға бүләк итеп таж, көнкүреш техникаһы, косметика менән тулы кәрзин һәм ювелир салонынан биҙәүестәр тапшырҙылар, тип хәбәр итәлә конкурстың рәсми төркөмөндә. "Был минең тәүге еңеүем, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенә Раушания Исҡужина. - Мин Өфө нефть техник университетында өсөнсө курста уҡыйым. Бала саҡтан халыҡ бейеүҙәре менән шөғөлләнәм. Киләсәктә республикам өсөн яҡшы белгес һәм файҙалы кеше булырға теләйем".

Конкурстың финалы Башҡорт академия драма театры бинаһында үтте. Башҡортостандың баш ҡалаһына республиканан: Нефтекаманан, Ишембайҙан, Сибайҙан, Баймаҡтан, Дүртөйләнән иң матур ҡыҙҙар килде. Һылыуҡайҙар "Баланы мәктәпкә йыяйыҡ" хәйриә акцияһында ҡатнашты. Уҡыу өсөн мәктәп кәрәк-яраҡтары менән рюкзактар республика балалар йорттарына ебәреләсәк.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРҠАҠ КЕШЕНЕҢ...

## йоҙроғо кеҫәһендә була

Килен кеше - кәм кеше, көнләксөгә тиң кеше; ҡәйнә кеше - уллы кеше, губернаторға тиң кеше.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә ҡатының һиңә:" У-ух, мөгөҙлө шайтан!" тип әйтә икән, шайтан тураһында түгел, ә мөгөҙ тураһында уйла.

**(Станислав Лец).**

Хатта сәнғәт әҫәренең камилллығы ла уның кимәлен билдәләмәй, сөнки һәр кимәлдең үҙ камиллығы..

**(Григорий Ландау).**

Ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәштәрендә йыш ҡына ирҙәрҙең көшөлөгөндәгеләр иреп юҡҡа сыға.

**(Александр Кумор).**

Ҡаршы тора алғанға ғына таянырға мөмкин.

**(Блез Паскаль)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саудәгәр үҙенең улын иң ҙур аҡыл эйәһенә Бәхет серен өйрәнергә ебәргән. Үҫмер ҡырҡ көн буйы сүллек аша үтеп, аҡыл эйәһе йәшәгән матур һарайға барып юлыҡҡан. Ләкин аҡыл эйәһе эргәһендә шул тиклем кеше күп, ти, үҫмер ике сәғәт көтөп ултырғандан һуң ғына уның эргәһенә килә алған. Ҡарт үҫмерҙең һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлаған һәм уға "Бәхет серен асырға әлегә ваҡытым юҡ, һин тағы ла ике сәғәт һарай тирәләй йөрөп тор, шунан килерһең", тигән һәм үҫмергә бәләкәй генә бер ҡалаҡ тотторған, уға ике тамсы май тамыҙған һәм: "Йөрөгән саҡта ошо ҡалаҡты һәр ваҡыт ҡулыңда тот, тик майын түгә күрмә", - тигән. Үҫмер һарай тирәһендәге баҫҡыстарҙан бер төшөп, бер менеп, ваҡыт уҙғарған, ә күҙҙәре гел ҡалаҡта булған. Ике сәғәттән әйләнеп килгәс, аҡыл эйәһе унан:"Шунан, минең ашханамдағы келәмдәрҙе күрҙеңме? Баҡсамда ниҙәр үҫә икәнен шәйләнеңме? Минең китапханамдағы матур китаптар күҙеңә салындымы?" - тип һораған. Үҫмер ҡалаҡтағы майҙы түкмәҫ өсөн башҡа бер нигә лә ҡарамауын, бер ни ҙә күрмәүен танырға мәжбүр булған. Аҡыл эйәһе: "Улай булғас, бар, минең донъямдағы мөғжизәләр менән яңынан танышып кил", - тип, үҫмерҙе сығарып ебәргән. Был юлы үҫмер ҡулына ҡалағын тотҡан көйө һарай менән танышырға сығып киткән һәм бындағы бар матурлыҡты, байлыҡты күреп һоҡланған. Аҡыл эйәһе янына килгәс, ул күргәндәрен ентекләп һөйләп биргән. "Ә ҡалағыңдағы ике тамсы майың ҡайҙа һуң?"- тип һораған унан аҡыл эйәһе. Үҫмер ҡалағына ҡараһа, ундағы май ағып бөткәнен күргән. "Һиңә бирә торған берҙәнбер Бәхет сере шул, - тигән аҡыл эйәһе, - донъяның мөғжизәләрен байҡағанда ҡалағыңдағы ике тамсы май тураһында онотма".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1769/09